ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

17-23 ғинуар (һыуығай) 2025

№2 (1146)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Ахмаҡ һәм наҙан бәндәне ошо биш сифат аша танып була: ул сәбәпһеҙгә асыулана, урынһыҙ ерҙә һүҙ һөйләй, үҙенә ҡағылмаған эшкә ҡыҫыла, әленән-әле фекерен үҙгәртә, уға кем яуызлыҡ, кем изгелек теләгәнен дә айыра алмай.*

*(Г. Честертон).*

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ялға ҡайтҡайнылар



6

Атайлы булғым килеп

йәшәнем ғүмер буйы...



8-9

Атлы, затлы халыҡбыҙ



12

Иң яҡшы онколог



13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БӘЙГЕЛӘ ҠАТНАШЫРЛЫҠ БУЛҒАС...

## башҡорт телен беләләр, беләсәктәр!

**Ошо көндәрҙә баш ҡалабыҙҙа йылдың иң мөһим ваҡиғаларының береһе - Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиада үтте. Был ярыш 39-сы тапҡыр ойошторолдо һәм Башҡортостан, Татарстан республикаларынан, Ырымбур, Силәбе, Ҡурған өлкәләренән барлығы 316 уҡыусы ҡатнашты.**

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиада йыл да телһөйәр балаларҙы бергә туплай, һәм ғинуарҙың беренсе эш аҙнаһы гел ыңғай хис-тойғолар солғанышында үтеүенә күнегеп киткәнбеҙ. Бына инде 4 тиҫтәгә яҡын йыл был йолаға хыянат итеү юҡ: быйыл да шундай күтәренке кәйеф, рух берҙәйлеге, башҡорт теле байрамы булды ул. Ғәҙәттәгесә, олимпиада һынауҙары өс йүнәлештә үтте: башҡорт мәктәптәре уҡыусылары, башҡорт телен туған тел һәм дәүләт теле булараҡ өйрәнеүселәр үҙ-ара ярышты. Һуңғылары тағы ла телде башлап һәм дауам итеп өйрәнеүселәр категориялары буйынса ла айырылды. Бына шулай, һәр кем үҙенең белемен самалап, үҙе тиңләшерҙәй тиҫтерҙәре менән көс һынашты.

**(Дауамы 2-се биттә).**




О, СПОРТ!

# ТАНЫЛҒАН ХОККЕЙСЫҒА АРНАП...



**"Өфөлә Сергей Ғимаевтың 70 йыллығына арналған хәйриә уйынында Ғимаев Кубогына турнирҙы йыл һайын үткәрергә ҡарар иттек. Балалар өсөн шәп спорт байрамы буласаҡ", - республика Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә шулай тип хәбәр итте.**

Ғимаев Сергей Наил улы - Туймазы районының Кәкребаш ауылы башҡорто. Танылған хоккейсы 2017 йылдың 18 мартында Тула ҡалаһында СССР хоккейы ветерандары матчы барышында вафат булды. Туймазы ҡалаһындағы боҙ һарайы уның исемен йөрөтә, ошонда уҡ 2019 йылда шәхескә арналған музей булдырылған.

Был аҙнала Өфөлә уҙған "Ғимаев Кубогы" хәйриә матчында донъяның билдәле хоккейсылары Илья Ковальчук, Павел Дацюк, Алексей Морозов, Сергей Мозякин һәм башҡа йондоҙҙар ҡатнашты. Спорт сараһын БР Хөкүмәте вице-премьеры вазифаһын башҡарыусы - спорт министры Руслан Хәбибов, билдәле хоккейсы Вячеслав Фетисов и Сергей Ғимаевтың улы - хоккейсы Сергей Ғимаев асты.

"Сергей Ғимаевтың 70 йыллығына арналған турнир үткәреү бөтә республика өсөн оло мәртәбә. Сергей Ғимаев спорт карьераһын тап ошонда башлаған. СССР-ҙың халыҡ-ара класлы спорт мастеры, Рәсәйҙең атҡаҙанған тренеры исемдәренә лайыҡ булған. Беҙ уны шулай уҡ абруйлы спорт комментаторы булараҡ хәтерләйбеҙ. Сергей Ғимаев илебеҙ спорты үҫешенә ҙур өлөш индерҙе. Ғәҙел, асыҡ һәм талапсан кеше ине. Уның "Барығыҙ һәм алышығыҙ!" тигән ҡанатлы һүҙҙәре бөгөн хоккей һәм спорт өсөн генә түгел, барыбыҙ өсөн дә, айырыуса ил һағында торған егеттәребеҙ өсөн бик актуаль", - тине Руслан Хәбибов.

Хәйриә матчы данлыҡлы хоккейсы Алексей Морозовтың командаһының 8:7 иҫәбенә еңеүе менән тамамланды. Еңеүселәр составында Александр Гуськов ике шайба индерҙе, шулай уҡ Илья Ковальчук, Вячеслав Буцаев, Евгений Давыдов, Вячеслав Фетисов, Игорь Щадилов һәм Андрей Зюзин берәр мәрәй яуланы. Павел Дацюктың командаһында Максим Афиногенов һәм Максим Спиридонов - икешәр, Дацюк үҙе, Игорь Григоренко һәм кесе Сергей Ғимаев берәр шайба индерҙе.

**(Дауамы 5-се биттә).**

12+

***✓ Балаларҙың башҡорт телен белеү кимәленә килгәндә, һорауҙарҙың ҡатмарлығы уларҙың милли мәктәптәрҙә уҡыуына, туған тел йәки дәүләт теле булараҡ өйрәнеүенә ҡарап төҙөлгәйне.***



*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# БӘЙГЕЛӘ ҠАТНАШЫРЛЫҠ БУЛҒАС...

## башҡорт телен беләләр, беләсәктәр!

**(Башы 1-се биттә).**

- Олимпиада 39-сы йыл рәттән уҙғарыла, ошо йылдар эсендә ул бик ныҡ ҙур үҙгәрештәр кисергән, төбәк-ара кимәлгә күтәрелгән. Быйыл ҡатнашыусылар һаны бик күп булыуын билдәләп үтергә кәрәк, сөнки яҡын райондарҙан көнөндә килергә вәғәҙә итеүселәр һауа торошо насарайыуға бәйле юлға сыға алмай ҡалһалар ҙа, 300-ҙән ашыу уҡыусы бәйге тотто. Баһалама ағзаларының эшенә килгәндә, барыһы ла ғәҙел барҙы: юғары уҡыу йорттары һәм колледж уҡытыусылары эштәрҙе баһаланы, таныш-тоношлоҡ булманы. Һәр йүнәлешкә уҡыусыларҙың белемдәрен самалап, һорауҙар айырым төҙөлгәйне. Тәүҙә викторина һорауҙарына яуап яҙҙылар, шунан телде аңлау, фекерләү ҡеүәләрен һынау өсөн текстҡа анализ яһанылар, өсөнсө эштә яҙма эштәрҙе үтәнеләр. Һуңлабыраҡ килеүселәргә ваҡыт өҫтәп бирелде. Беҙ инде үҙ сиратыбыҙҙа һәр балаға иғтибар бүлергә, оялыбыраҡ шымып ултырған сағында һорауҙар биреп, һөйләтергә тырыштыҡ.

Бына шулай, ойоштороу йәһәтенән бик ныҡ әҙерлекле булды олимпиада. Ә инде балаларҙың башҡорт телен белеү кимәленә килгәндә, һорауҙарҙың ҡатмарлығы уларҙың милли мәктәптәрҙә уҡыуына, туған тел йәки дәүләт теле булараҡ өйрәнеүенә ҡарап төҙөлгәйне. Төрлө балалар бар, әммә башҡорт теленә һис битараф булмауҙары, тырышлыҡтары ҡыуандырҙы. Мәҫәлән, "мәтрүшкә" һүҙен руссаға тәржемә итергә ҡушылғайны. Уны нимә генә тип яҙып бөтмәгәндәр! Берәүҙәр "зверобой", "бергамот" тиһә, миңә эләккән эш авторы "матрушка" тип тәржемәләгән. Тексталағы "яр һалып ҡысҡырҙы" тигән һүҙбәйләнештәге "яр һалды" тигән һүҙҙе аңламай, "поставить точку", "порвать отношения" тип тәржемә итеүселәр булды.



Башҡорт мәктәбендә 11-се класта уҡығандар араһында еңеүсе булған Илтимер Мырҙағолов һымаҡ телмәре үҫешкән, фекерле балалар булыуы ҡыуандырҙы. Шуға, башҡорт теле бөтә, тип ҡайғырып ултыраһы түгел, киләсәгебеҙ өмөтлө", - тип һөйләне олимпиаданың башҡорт мәктәптәре араһында жюри рәйесе, филология фәндәре докторы, ӨФТУ профессоры Гөлфирә Гәрәева. Ул шулай уҡ олимпиаданың балаларҙы башҡорт мөхитенә ылыҡтырыу, төрлө яҡлап тәрбиәләү, бер-береһе менән танышып аралашыу мөмкинлеге биреү йәһәтенән мөһимлеген телгә алды.

Быйыл баһалама ағзалары олимпиада һорауҙарының әллә ни ҡатмарлы булмауын билдәләһә, уҡыусыларҙың ҡайһы бер урындарҙа ҡаушап ҡалыуҙары тураһында ла телгә алды. Ә бит бөтә һорауҙар ҙа уҡыу программаһына ингән темалар, әҫәрҙәр буйынса төҙөлгән булған.

- Мин үҙем дә мәктәп йылдарында ошо олимпиадала ҡатнашып, бер-ике йыл рәттән абсолют еңеүсе булып, вузға имтихандарһыҙ уҡырға ингәйнем. Шуға күрә комиссиялағы етди эште ҙур тулҡынланыу, яуаплылыҡ менән ҡабул иттем. Үҙем тикшергән эштәр буйынса шундай фекерҙәмен: уҡыусыларға күберәк уҡырға, ҡыҙыҡһынырға, эҙләнергә, телмәрҙәрен үҫтереү йәһәтенән нығыраҡ эшләргә кәрәк. Сөнки шулай белемен камиллаштырырға тырышҡан баланың донъяға ҡарашы киңерәк, тимәк, һәр нәмәгә үҙ фекере була, - ти баһалама комиссияһы ағзаһы, РФ Хөкүмәте ҡарамағындағы Финанс университетының Өфө филиалы уҡытыусыһы Зарина Бағышаева-Назырова.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиаданың еңеүселәре быйыл түбәндәгесә билдәләнде: башҡорт мәктәптәре уҡыусылары араһында Ишембай районы Ә. Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатының 9-сы класс уҡыусыһы Яҙгөл Хәйруллина, Ейәнсура районы Яңыбай ауылы мәктәбенең 10-сы класс уҡыусыһы Динара Ҡәҙербәкова, Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылы мәктәбенең 11-се класс уҡыусыһы Илтимер Мырҙағолов еңеүсе тип табылды **(1-се биттәге фотола)**.

Башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнеүселәрҙән Илеш районы Үрмәт ауылы мәктәбенең 9-сы класс уҡыусыһы Рузанна Вәлиева, Әбйәлил районы Асҡар ауылының Т. Кусимов исемендәге гимназияһының 10-сы класс уҡыусыһы Наҙгөл Илһамова, Баҡалы районы Мостафа ауылы мәктәбенең 11-се класс уҡыусыһы Миләүшә Дусиева еңде. Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ башлап ҡына өйрәнгәндәр араһында Бүздәк районынан Регина Кузина, Баймаҡ ҡалаһынан Дарья Баскакова, Өфө районынан Милена Парушкина, Әлшәйҙән Диана Зайвый юғары баһа алды; дауам итеп өйрәнеүселәрҙән Өфө ҡалаһынан Хәниф Йосопов, Дәүләкәндән Сыңғыҙ Хәбиәхмәтов, Өфө районынан Айсар Сәйетгәрәев, Асҡындан Азалия Шәһиева еңеү яуланы. Ә бына төбәктәрҙән килеп ҡатнашыусы уҡыусылар араһында бөтә еңеүселәр ҙә Ырымбур өлкәһенән булып сыҡты: Карина Ғабзалилова, Алһыу Сыңғыҙова, Динә Бикинеева.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиада быйыл "БР дәүләт һәм туған телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү" дәүләт программаһы сиктәрендә үткәрелде, шуға еңеүсе һәм призер уҡыусыларҙы дәртләндереү саралары ла тороҡ булды. Мәҫәлән, еңеүселәргә аҡсалата приз күләме 3 мең һумдан 7 меңгә тиклем арттырылған. Бынан тыш БР Мәғариф министрлығы, БР Мәғарифты үҫтереү институты, республиканың юғары уҡыу йорттары, милли матбуғат вәкилдәре, йәмәғәт эшмәкәрҙәре башҡорт телен яратҡан, башҡорт мөхитенә ылыҡҡан балаларҙы күтәрмәләп, үҙ бүләктәрен тапшырҙы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бына шулай, йәш быуындың телгә ҡыҙыҡһыныуын, ә уның аша рухи һәм матди байлыҡтарына ҡарата иғтибарын арттырыу өсөн дүрт тиҫтәгә яҡын үткәрелеп килгән олимпиаданың иртәгәһе өмөтлө икән, тимәк, беҙ дөрөҫ юлдан барабыҙ. Тимәк, йәш быуын башҡорт теленә ҡарата иғтибарлы, ә уның аша халҡыбыҙҙың үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге менән дә ҡыҙыҡһына. Шунан да мөһиме юҡтыр.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

## БАРЛЫҠ ШАШТЫРА,

### юҡлыҡ асыҡтыра

- Самаһыҙ аҡыллылыҡ аҡылдан яҙҙыра.
- Емтекте - себен, бөлгән илде наҙан баҫа.
- Эт күҙе төтөн күрмәҫ, һөмһөҙ туғанын белмәҫ.
- Алмаһы бөтһә, ағасын, аҫыллығы бөтһә, кешене һелкетмәйҙәр.
- Алға баҡмағандар арттағы соҡорға тәгәрәй.
- Күп тыңла, әммә һығымтаны үҙеңсә яһа.
- Барлыҡ шаштыра, юҡлыҡ асыҡтыра.
- Белекһеҙҙән - әҙәп, наҙандан - белем, ҡарундан аш өмөт итмә.
- Ғүмер үткән һайын аҡыл тәрәнәйә, ахмаҡлыҡ ҡына үҙгәрмәй - йәш көйө ҡала.
- Алмаһы бөтһә, ағасын һелкетмәйҙәр.
- Үҙеңә биргән вәғәҙәне боҙоу - быуынһыҙ ергә балта сабыу ул.
- Кеше хәлен аңламаған - үҙен дә төшөнмәгән ахмаҡ ул.
- Һаҡһыҙ һалдат - дошман ҡоло, яңғыҙ себеш - ҡарға еме.
- Кеше һоло һол булмаҫ, етем ашы һис ҡунмаҫ.
- Нәфсеңде тый: ул мәлғүн тауҙы ла йоттора, затыңды ла ҡороттора.
- Аҙҙы ла күп һоғоноп, күпте лә бер генә йотоп була.
- Мең саҡрым бер аҙымдан, ҙур уңыштар бәләкәй генә эштән башлана.
- Тел тыймаһаң - янаһың, ҡул тыймаһаң - батаһың.
- Түтәлдәге әле муллыҡ түгел, келәттәге генә ҙур байлыҡ.

**Мөнирә МОНАСИПОВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓2025 йылда Башҡортостанда республика программаһы буйынса 98 ихатаны төҙөкләндереү планлаштырыла. "Башҡорт ихаталары" программаһы буйынса биш йылда 1326 ихатаны тәртипкә килтереү өсөн алты миллиард һумдан ашыу аҡса тотонолған. Был программа 2019 йылда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров башланғысы менән булдырылған.

✓Кушнаренко районының Кушнаренко ауылына сәфәре барышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Махсус хәрби операцияла һәләк булған Сергей Ғизәтуллин, Илгиз Ғайсаров, Илвир Ғәләмов, Фидан Хәбибов, Юлай Хәнәфин, Илнар Ғилмановтың ғаиләләре менән осрашты. Ул шулай уҡ райондың МХО ветерандары менән аралашты. Улар эшкә урынлашыуҙары, ауылда уҙғарылған патриотик сараларҙа ҡатнашыуҙары хаҡында һөйләне һәм Радий Хәбировҡа шәхсән иғтибары, алғы һыҙыҡта хәрби бурыстарын үтәгән яугирҙарыбыҙға ярҙамы өсөн рәхмәт белдерҙе.

✓2025 йылда Башҡортостандың 3 муниципалитетында - Өфө ҡалаһында, Стәрлетамаҡ һәм Стәрлебаш райондарында подъездарҙы ремонтлау планлаштырыла. Финанслау күләме 21 миллион һум тәшкил итер тип көтөлә. Программа ғәмәлгә ашырылған ваҡытта - 2019-2024 йылдарҙа 2783 йортта 8290 подъезд яңыртылған, сығымдарҙың дөйөм суммаһы 3,5 миллиард һумдан ашып киткән.

✓Яҙыусы, шағир, драматург, фронтовик Мостай Кәримдең тыуыуына 105 йыл тулыуы һәм Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығы айҡанлы "Рус түгелмен, ләкин россиян мин: Мостай Кәрим мираҫы" проекты Президенттың мәҙәни башланғыстар фонды конкурсында еңеүсе булды. Ул Татарстан Республикаһы башҡорттары ҡоролтайы һәм Ҡаҙандың "Залесный" мәҙәни үҙәге менән берлектә әҙерләнгән. Проект мәҙәни мираҫты һаҡлауға, гражданлыҡ, илһөйәрлек формалаштырыуға йүнәлтелгән.

✓Башҡортостанда етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларға уҡыу әсбаптары һәм яҙыу-һыҙыу кәрәк-яраҡтары һатып алыу өсөн пособие, шулай уҡ айлыҡ пособие түләү күләме һәм тәртибе билдәләнде. Пособие республика ҡаҙнаһынан йүнәлтелә. Башҡортостан Хөкүмәтенең тейешле ҡарары рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. Көндөҙгө бүлектә уҡыған өсөн пособие күләме - 13 638,48 һум. Шулай уҡ документ ошо пособиены түләү тәртибен раҫлай. Ҡарарҙың үтәлешен контролдә тотоу Хөкүмәт Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаевҡа йөкмәтелде.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЙОРТОНДА НИСӘ ЭТ?



**Башҡортостанда йорт хайуандарын аҫрауға һәм йөрөтөүгә өҫтәмә талаптар раҫланды. Башҡортостандың Премьер-министры Андрей Назаровтың ҡарарынан күренеүенсә, бесәй, эт һәм башҡа йорт хайуандарын дөйөм йорт биналарында тотоу тыйыла. Һүҙ подъездар, балкондар, лоджиялар, сарлаҡтар һәм ихаталар тураһында бара.**

Һәр 18 "квадрат" фатирҙа бер генә уртаса эт, йәки ике ваҡ эт йәки бесәй, һәр 200 квадрат метр баҡса йәки дачала бер ҙур/уртаса эттән йәки өс ваҡ эттән артыҡ йәшәтергә рөхсәт ителмәй. Ҙур тип бейеклеге 51 см һәм унан да күберәк булған эттәр һанала, уртаса - 31-51 см, ваҡ - 30 см-ға тиклем.

Ер участкаларында хайуандарҙы аҫрағанда, халыҡ һәм юридик берәмектәр кешеләрҙең ғүмеренә, һаулығына һәм мөлкәтенә хәүеф тыуҙырмаҫҡа, бөтә хәүефһеҙлек сараларын үтәргә тейеш. Эт бәйһеҙ булғанда иҫкәртеү таҡтаһы ҡуйып, ҡойма менән уратып алырға кәрәк.

Урамда йөрөгән ваҡытында хайуан хужаһы ҡарамағында булырға тейеш, эттәргә муйынсаҡ, бер метрҙан да оҙонораҡ булмаған арҡан һәм морондоҡ кейҙерергә кәрәк (ҡулда булған осраҡтарҙан тыш). Был һуҡырҙарҙы оҙатып йөрөүсе эткә ҡағылмай. Хайуан артынан экскременттарын йыйып алыу мөһим.

Әгәр эт кешене, башҡа хайуандарҙы тешләһә, 12 сәғәт эсендә ветеринарға мөрәжәғәт итергә кәрәк. Һаҡлау шарттары булғанда, хайуанды тикшергәндән һуң 14 көнгә ҙауллы изоляцияларға мөмкин.

Хайуандың ҡапыл үлеүе йәки сирләү осраҡтары тураһында профилле учреждениеларға кисекмәҫтән хәбәр итергә кәрәк.

Республика территорияһында хайуандың үҙен генә сығарып ебәреү тыйыла. Ҡарауһыҙ ҡалған хайуандарҙы тотоп, махсус приюттарға урынлаштыралар. Эттәрҙе автобустарҙа һәм башҡа йәмәғәт транспортында морондоҡ һәм ҡыҫҡа арҡан булған осраҡта ғына йөрөтөргә рөхсәт ителә.

**Иван ВАВИЛОВ.**

# ҮЛТЕРМӘҪКӘМЕ?

**Йортһоҙ хайуандарҙы үлтереү - улар кеше өсөн хәүефле булған осраҡта ғына мөмкин булған ғәҙәттән тыш сара. Рәсәй Конституция суды үҙенең ҡарарында ошондай вердикт сығарҙы.**

Атап әйткәндә, гуманлы ысулдар менән тормошҡа ашырылған был сара ваҡытлыса тотоу урынында булмаған эйәһеҙ хайуан кешегә һөжүм итһә, ҡурҡыныс сир менән ауырыһа, йәшәүгә һәләтһеҙ булһа ғына ҡулланыла. Хайуандарҙы ваҡытлыса тотоу пункттарына урынлаштырыу өсөн нигеҙҙе РФ субъекттары билдәләй ала. Хужаһыҙ хайуандарҙы үлтереү башҡа саралар кешенең тейешле кимәлдә яҡланыуын, уның хоҡуҡтарын һәм азатлығын, йәмәғәт именлеген тәьмин итә алмағанда ғына мөмкин. Бының өсөн приюттарҙың тулы булыуы ла, бюджет сығымдарын оптималләштереү ҙә нигеҙ була алмай. Был хайуандар менән эш итеүҙә конституцион гуманистик башлангыстарҙан тайпылыуҙы аңлата.

Суд Рәсәйҙә йортһоҙ хайуандар менән эш итеүҙең универсаль принциптарын иҫкә төшөрҙө. Улар аулау, вакцинациялау, чиплау, агрессив булмаған хайуандарҙы йәшәгән урындарына ҡайтарыу һәм уларҙы яңы хужаларға тапшырыу йәки приюттарҙа аҫрауҙы күҙ уңында тота. Шул уҡ ваҡытта төбәктәр урындағы үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алып, үҙ тәртибен булдыра ала.

# ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ: ҠОТОРОУ АУЫРЫУЫ

**"Роспотребнадзор" хәбәр итеүенсә, Башҡортостанда былтыр 9,9 мең кеше, шуларҙың 6196-һы эттән тешләнгәндән һуң, ҡотороу ауырыуынан прививка эшләткән.**

Ҡотороу сире - баш һәм арҡа мейеһе зарарланыу һәм йыш ҡына үлемгә илтеү ҡурҡынысы менән янаусы вируслы инфекция, тип иҫкәртә белгестәр. Ауырыу хайуандан тешләнгән кешеләрҙе ҡотороу сиренең ауыр эҙемтәләренән иҫкәртеүҙең берҙән-бер сараһы - ул антирабик иммуноглобулин һәм антирабик вакцина менән схема буйынса дауаланыу курсы үткәреү.

Унан һуң, йортта тотолған эттәргә, бесәйҙәргә даими рәүештә прививка яһатыу ҙа ҡотороу ауырыуынан иҫкәртеү сараһы булып тора. Прививканы дәүләт учреждениеларында түләүһеҙ эшләтергә мөмкин.

Башҡортостанда хужаһыҙ эттәр күбәйеүе, уларҙың кешеләргә һөжүме, хатта трагик осраҡтар тураһында хәбәрҙәр тынғаны юҡ. Күптән түгел Хөкүмәт ултырышында БР Башлығы Хакимиәтенең социаль коммуникациялар буйынса идаралығы начальнигы Дмитрий Черенков та ошо мәсьәләгә иғтибарҙы йүнәлткәйне. Республика Башлығы Радий Хәбиров республиканың Торлаҡ-коммуналь хужалығы министрлығына килеп тыуған хәлдә ныҡлап тикшерергә ҡушты. Был киҫкен мәсьәләне хәл итеү юлдары махсус кәңәшмәлә тикшерелергә тейеш.

ДОНЪЯ ШАНДАУЫ

# ҮҘЕ УЛТЫРҒАН БОТАҠҠА...

**Украина президенты Владимир Зеленский үҙенең көндәлек видеомөрәжәғәтендә киләсәккә пландары тураһында һөйләп, дрондарҙың бөтөн төрҙәрен арттырыу буйынса быйылғы йылда рекорд ҡуйырға, шулай уҡ украин ракеталарын, артиллерия һәм башҡа кәрәкле техника етештереүҙе үҫтерергә, тигән бурыс ҡуйҙы.**

Дрондарға заказдар һанын арттырырға ҡуштым һәм был эш башҡарыла, тине ул һәм "Рәсәйҙең хәрби объекттарын утҡа тотоусы" подразделениеларға рәхмәт белдерҙе. "Әммә был объекттарҙың күпселеге Рәсәйҙең граждандар объекттары булыуын иҫәпкә алғанда, Зеленский өсөн бөгөн берҙән-бер урын - өскә өс метрлыҡ төрмә камераһы", - тип яҙа "Комсомольская правда. Ру" сайты күҙәтеүсеһе. Украина ирекмәне һәм билдәле русофоб Мария Берлинская украин боевиктарының сифатһыҙ боеприпастар шартлау арҡаһында күпләп юғалтыуҙарға тарыуы хаҡында һөйләй. Дәүләткә хыянат итеүҙә шик белдерелеп, урындағы СИЗО-ла ултырыусы Верховный Рада депутаты Александр Дубинский: "Украина буйынса тыныслыҡ килешеүе төҙөү һәм һуғышты тамамлау өсөн бөгөн берҙән-бер ҡаршылыҡ - ул Зеленский, - тип асыҡтан-асыҡ белдерә. - Әгәр ҡаршылыҡты урап үтеү мөмкин түгел икән, уны юҡ итергә кәрәк", - ти Рада депутаты.

Ә был ваҡытта Украина граждандары мөмкин булған-булмаған юлдар менән илдән ҡаса. Ошо көндәрҙә урындағы полиция рөхсәтһеҙ рәүештә граждандарҙы сит илгә сығарыуға булышлыҡ итеүселәрҙе асыҡлау буйынса тентеүҙәр үткәрҙе. Украина буйынса 600-ләп тентеү һөҙөмтәһендә 60-лап кеше шик аҫтына алынған, илдең 22 төбәгенән 50-гә яҡын схема буйынса сит илдәргә кешеләр сығарылған: тейеш булмаған урындарҙа ил сиген боҙоу, ялған документтар файҙаланыу факттары асыҡланған. Был "хеҙмәт"тең хаҡы 5-тән 22 мең долларға тиклем баһалана. Илдән ҡасыусыларҙың күптәре Румынияға сыға, ҡайһылары Польша аша өсөнсө бер илдән Рәсәйгә килеп һыйына. Ә илдә тороп ҡалған 18-ҙән 60 йәшкә тиклемге ир-егеттәргә ысын мәғәнәһендә "һунар" бара, ҡулында хатта бронь булғандар ҙа һуғышҡа оҙатыла. Урындағы халыҡ бындай самаһыҙлыҡҡа ҡаршылыҡ күрһәтергә тырыша. Мәҫәлән, Одессала бер ир военкомат нарядына бысаҡ менән ҡаршы торған.

Донъяла тағы ниҙәр бар? Ошо көндәрҙә АҠШ Рәсәйҙең нефть тармағына ҡаршы яңы санкция индерҙе. Киң мәғлүмәт саралары яҙыуынса, был иң ҡаты сараларҙың береһе тип иҫәпләнә. Американың Финанс министрлығы сайтында әйтелеүенсә, "Газпром нефть" һәм уның компаниялары, шул иҫәптән "Сорғотнефтегаз" сикләүҙәр аҫтына алынған. Үҙе ултырған ботаҡты үҙе киҫеүсе иҫәр ҡылығын хәтерләтеүсе был санкциянан АҠШ үҙе лә зыян күрәсәк, сөнки ул да, бөтөн Евросоюз илдәре кеүек үк, импортлаусы ил. Шулай итеп, 2022 йылғы тарих ҡабатлана түгелме? Ул саҡта май-июнь айҙарында нефть хаҡы баррель өсөн 120 долларға барып баҫҡайны. Штаттарҙа был яғыулыҡ хаҡының рекордлы кимәлгә күтәрелеүе булып тарихта ҡалды.

Рәсәй Сит ил эштәре министрлығы белдереүенсә, Американың властан китеүсе президенты Байдендың был аҙымы АҠШ-тың Европа союздаштарына, шулай уҡ Америка граждандарына һәм буласаҡ президент Дональд Трампҡа ла бик ҙур зыян килтерәсәк, тип яҙа РФ Сит ил эштәре министрлығының Telegram-каналы. "Артынан бысраҡ ҡалдырып китеүҙе мәртәбәгә һанай микән әллә аҡылын юйған был тинтәк?" тип аптырай социаль селтәр комментаторҙары. Ведомствола билдәләүҙәренсә, АҠШ санкцияһына ҡарамаҫтан, Рәсәй нефть һәм газ тармағында үҙенең ҙур проекттарын бойомға ашырыуы, импортты алмаштырыуы, сит илдәрҙә АЭС төҙөүҙе дауам итәсәк. Мәскәү, бер нәмәгә ҡарамайынса, донъя энергетика баҙарында ышаныслы партнер булып ҡаласаҡ.

Тағы ла шул да мәғлүм булһын: ошо көндәрҙә Сәғүд Ғәрәбстанының баш ҡалаһы Эр-Риядта Сириялағы хәлдәрҙе көйләү буйынса ғәрәп илдәре сит ил министрҙарының осрашыуы үтте. Улар араһында Сирияның ваҡытлы хөкүмәте сит ил эштәре министры, Берләшкән Ғәрәп Әмираттары, Ливан, Кувейт, Египет һәм Төркиәнең тышҡы сәйәсәт ведомстволары вәкилдәре ҡатнашты. Бынан тыш, Эр-Риядҡа Германия, Британия, Евросоюз һәм БМО вәкилдәре лә килгән булған. Көн тәртибендә Сириянан санкцияларҙы алыу һәм Сирия ҡасаҡтарын илгә ҡайтарыу мәсьәләһе ҡаралған.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда пилотһыҙ осоу аппараттарын коммерция маҡсатында фотоға һәм видеоға төшөрөү тыйыла. Республика Башлығының тейешле указы рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған. Был дәүләт власы һәм урындағы үҙидара органдары, улар ҡарамағындағы ойошмалар һәм предприятиелар файҙаланған пилотһыҙ осоу аппараттарына ҡағылмай. Шулай уҡ пилотһыҙ осоҡостарҙы Башҡортостандың оператив штабы ҡарамағындағы махсус төркөм менән һөйләшеп килешкән осраҡта файҙаланырға мөмкин.

✓Рәсәйҙең иң яҡшы студенттарына өҫтәп 20 мең һум аҡса түләнә. Бөгөн билдәле булыуынса, Хөкүмәт стипендияһы үҙ тармағында ҙур ҡаҙаныштарға өлгәшкән юғары уҡыу йорттары студенттары өсөн тәғәйенләнгән. Был ҡарар 27 декабрҙә хоҡуҡи мәғлүмәт сайтында баҫылған. Документ тексынан күренеүенсә, стипендия бакалавриат, белгеслек һәм магистратура программалары буйынса көндөҙгө бүлектә уҡыған студенттарға бирелә. Айына 20 мең һумлыҡ стипендия бер йылға тәғәйенләнә. Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте стипендияһына 5700 студент иҫәп тота ала.

✓Мишкә районында күренекле шағир Шәйехзада Бабичтың 130 йыллығы билдәләнәсәк. Ҡыйғаҙытамаҡ ауылындағы Шәйехзада Бабич музейы етәксеһе Әлфиә Зарипова әйтеүенсә, күренекле шағирҙың атаһы Мөхәмәтзакир Ҡыйғаҙытамаҡ ауылында донъяға килгән, шуға күрә төп хәтер сараларын уның тыуған төйәгендә үткәреү планлаштырыла.

✓Рәсәй Мәғариф министрлығының матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, метапневмовирус таралыуға бәйле ил мәктәптәрендә сикләүҙәр индерергә йыйынмайҙар. Илдең мәғариф системаһы штат режимында эшләй, тине мәғариф министры Сергей Кравцов.

✓Популяр Абҙаҡ тау саңғыһы курортында 2025 йылдың ғинуарынан туристик һалым индерелә. Белорет районының Абҙаҡ ауыл советы шундай ҡарар ҡабул итте. Бересе йылда ставка ҡунаҡханала йәшәү хаҡынан 1 процент була, әммә тәүлегенә 100 һумдан да кәм түгел. 2029 йылға этаплап 5 процентҡа тиклем арттырыла. Туристар өсөн һалымдан ингән аҡса туризмды үҫтереүгә йүнәлтелергә тейеш. Шулай уҡ яңы йылдан муниципалитеттарҙың үҙ кимәлендә туристар һалымын индереү хоҡуғы бар.

✓2024 йылда йәш ғалимдарға Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте премияларын түләү өсөн мәғариф өлкәһендә - 8 миллион һум, фән һәм техника өлкәһендә 10 миллион һум йүнәлтелде. Бынан алдараҡ Башҡортостан йәш ғалимдарға төбәк ярҙам саралары рейтингында беренсе урынды алды. Уның һөҙөмтәләре менән "Сириус" үҙәгендә IV Йәш ғалимдар конгресында Дәүләт Думаһының фән һәм юғары белем буйынса комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Александр Мажуга таныштырҙы.

*✓ Ете йәштән башлап ай һайын балаларға йәшенә ҡарап билдәле бер сумма - 700-1000 һум бирелә, улар был аҡсаны үҙҙәре теләгәнсә тотонорға хоҡуҡлы.*

ҠЫҪҠАСА

# ШЫРШЫҢДЫ ТАПШЫР!

**Өфөлә йыл һайын үткәрелгән "Тапҡа шыршы" экологик акцияһы үтәсәк.** Башҡортостан тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, ылыҫлы ағастарҙы ҡабул итеү 18, 19, 25 һәм 26 ғинуарҙа ойошторола. Акция сиктәрендә ҡаланың бөтә райондарында махсус контейнерҙар ҡуйыласаҡ. Ағастар нығытмаһыҙ, төргәкһеҙ һәм биҙәүестәрһеҙ ҡабул ителә. Ҡабул итеү пункттары түбәндәге адрестар буйынса: Магистраль урамы, 2а; Столяров урамы, 2; Мушников урамы, 11; Гвардия урамы, 58/1; Гагарин урамы, 10/2; М.Ғөбәйҙуллин урамы, 6, "Аркада" сауҙа комплексы алдында; Ҡулса урамы, 50-61 (Колхоз баҙары); "4 миҙгел" скверы; "Ҡурай сәскәһе" скверы (Рига һәм Урман заводы урамдары киҫешкән урында); "Ҡарағай" биҫтәһе (Талькова, 33 һәм Б.Вәлиева, 5 йорттары араһында); СССР-ҙың 50 йыллығы яғынан "Башҡортостан" сауҙа комплексы эргәһендәге автопарковка. 18 һәм 19 ғинуарҙа сәғәт 12-нән 16-ға тиклем бөтә майҙансыҡтарҙа яңы йыл ағасы тапшырған өсөн мандарин алырға мөмкин.

✓ **Башҡортостанда етештерелгән импортты алмаштырыусы сәнәғәт продукцияһы күләме уҙған йыл йомғаҡтары буйынса 2023 йыл кимәленән ике тапҡырға артып, 380 миллиард һумға етте.** Был хаҡта республика Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министры Александр Шельдяев хәбәр итте. Производствоны үҫтереүҙең бындай динамикаһына төбәктең индустриаль кластерҙарын үҫтереү буйынса әүҙем сәйәсәт һөҙөмтәһендә өлгәшкәндәр. 2022 йылдан Башҡортостанда төрлө йүнәлештәге 23 сәнәғәт кластеры булдырылған. Улар илдең төрлө төбәктәренән 288 предприятиены берләштерә. Ғәмәлдәге кластерҙарҙың дөйөм һаны буйынса республика илдә алдынғы урындарҙы биләй. Рәсәйҙә барлығы 85 индустриаль кластер үҫешә. Төбәк етәксеһе Радий Хәбиров республиканың сәнәғәт кластерҙарын үҫтереү буйынса алып барылған эште юғары баһаланы.

✓ **Башҡортостанда ваҡытлы матбуғат продукцияһын һатыу нөктәләрен арттырырға ниәтләйҙәр.** Башҡортостан Хөкүмәтенең 2024-2028 йылдарға ваҡытлы матбуғат продукцияһын һатыу буйынса халыҡты сауҙа объекттары менән минималь тәьмин итеү нормативтарын билдәләүҙе күҙ уңында тотҡан ҡарар проекты Башҡортостан Республикаһы рәсми порталында йәмәғәтселек араһында фекер алышыу өсөн урынлаштырылған. Документ республиканың Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау министрлығы тарафынан әҙерләнгән. Проект тексына ярашлы, Башҡортостанда 54 районда һәм 9 ҡалала 1832 баҫма продукция һатыу нөктәһе булырға тейеш. Уларҙың күбеһе, йәғни 533-ө Өфөлә, 126-һы Стәрлетамаҡта була. Райондар араһында Туймазы һәм Өфө районларында- 59 һәм 52 нөктә асыу планлаштырыла.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАТЫРҒА ЯЛ КӘРӘК!



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған оператив кәңәшмәлә Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам сараларын тормошҡа ашырыу мәсьәләһе тикшерелде.**

Төбәктең ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова билдәләүенсә, республикала Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың балаларына ярҙам итеүгә айырыуса иғтибар бүленә. 2025 йыл башына 7 меңдән ашыу сабый балалар баҡсаһына бушлай йөрөй. Бынан тыш, 10,5 меңдән ашыу уҡыусы һәм колледж студенттары бушлай ҡайнар аш менән тәьмин ителгән. 562 студентҡа республика колледждарында уҡыуға сертификаттар бүленгән йәиһә уҡыу өсөн түләү хаҡы ҡайтарылған. 5,5 меңдән ашыу бала һауыҡтырыу лагерҙарында ял иткән.

Башҡортостан шифаханалары 5 мең самаһы махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыны һәм уларҙың ғаилә ағзаларын ҡабул иткән. 920 кеше шәхси йорттарға газ үткәреү өсөн сертификаттар менән тәьмин ителгән. Бушлай ер участкаһы алыу өсөн 322 махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы иҫәпкә ҡуйылған, 88 кешегә хеҙмәт баҙарында талап ителгән һөнәрҙәр буйынса уҡыуға сертификат тапшырылған. "Республика халыҡ мәшғүллеге үҙәгенең Учалы районы буйынса филиалында уҡытыуҙы ойоштороуҙың уңышлы тәжрибәһенә миҫалдар килтерергә теләйем, - тине Ленара Иванова. - Мәҫәлән, Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың береһе "Клиник психология" программаһы буйынса белем алды һәм бөгөн үҙе башҡаларға ярҙам күрһәтә. Тағы ла ике ветеран "Хәрби психология һәм хәрби стресс төшөнкөлөгөн психологик оҙатыу" программаһы буйынса уҡый, шәхси һаҡ ойошмаһында һәм "Ватанды һаҡлаусылар" фонды филиалында эшләй.

Ярҙамдың мөһим өлөшө - консультация һәм психологик ярҙам күрһәтеү. Мәҫәлән, "Ғаилә" үҙәктәрендә был хеҙмәт менән - 6,7 меңдән ашыу, ә медицина ойошмаларында 3 205 кеше файҙаланған. Был эштә #БеҙБергә төбәк штабы ирекмәндәре лә ярҙам итә - 8,5 меңдән ашыу ғариза ҡабул иткәндәр һәм эшкәрткәндәр. 975 махсус операцияла ҡатнашыусы медицина реабилитацияһына йүнәлтелгән. 333 МХО ветераны өсөн кәрәкле техник реабилитация саралары бүленгән, 2 меңдән ашыу яугирға бушлай юридик ярҙам күрһәтелгән.

Ленара Иванова шулай уҡ яңы ярҙам сараһын тормошҡа ашырыу тураһында һөйләне. Мәҫәлән, Өфөнән Көнсығыш сығыу юлында льготалы йөрөү хоҡуғына 18 кеше ғариза тапшырған. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ: ғаризаны төбәк дәүләт хеҙмәттәре порталы йәки күп функциялы үҙәк аша электрон рәүештә йүнәлтергә мөмкин.

# ЕТЕМДӘРГӘ - КЕҪӘ АҠСАҺЫ

**Башҡортостанда балалар приюттарында тәрбиәләнгән 432 бала беренсе тапҡыр кеҫә аҡсаһы алды. Был хаҡта республиканың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова белдерҙе.**

"Хәҙер Ғаилә тәрбиәһенә булышлыҡ итеү үҙәктәрендә тәрбиәләнеүселәрҙең, өйҙә йәшәгән тиҫтерҙәре кеүек үк, һатып алыу, хыялы өсөн аҡса йыйыу мөмкинлеге бар. Ете йәштән башлап ай һайын балаларға йәшенә ҡарап билдәле бер сумма - 700-1000 һум бирелә, улар был аҡсаны үҙҙәре теләгәнсә тотонорға хоҡуҡлы: косметика, мәктәп буфетында тәмлекәс алырға, маркетплейстарҙа оҡшаған әйберҙәренә заказ бирергә мөмкин", - тине министр. Уның һүҙҙәренсә, кеҫә аҡсаһы - социализация, финанс белеме тураһында ғына түгел, тәрбиә тураһында ла һөйләй. Мәҫәлән, "Ал елкәндәр" үҙәге тәрбиәләнеүселәре МХО яугирҙарына ярҙам акцияһында ҡатнашырға теләк белдергән һәм кеҫә аҡсаһының бер өлөшөн маскировка селтәрҙәрен үреү өсөн материал һатып алыу өсөн тапшырған.

# АУЫЛ МӘҘӘНИӘТЕН...

**Башҡортостанда "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" программаһы тормошҡа ашырылған дүрт йыл эсендә 150 белгес бер тапҡыр бирелә торған түләү алған. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә билдәле булды.**

Республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова программаның 2021 йылда старт алыуы һәм Рәсәйҙә был йүнәлештәге тәүге башланғыс булыуы хаҡында хәбәр итте. Программа башланған осорҙа белгестәргә 500 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған сумма түләнгән булһа, 2023 йылдан иһә ул 1 миллион һумға тиклем арттырыла. Был сумманы торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға йәки шәхси транспорт һатып алыуға йүнәлтергә мөмкин. Программа талаптарына ярашлы, контрактҡа ҡул ҡуйғандан һуң, хеҙмәткәр ауыл мәҙәниәт учреждениеһында кәмендә биш йыл эшләргә тейеш. 2024 йылда сертификаттар 30 хеҙмәткәргә тапшырылған. Уртаса 29 йәштә булған хеҙмәткәрҙәрҙең күпселеге юғары белемгә эйә. Улар араһында мәҙәниәт итеү учреждениеларының 18 белгесе, балалар сәнғәт мәктәптәренең туғыҙ уҡытыусыһы, республика музейҙарының өс хеҙмәткәре бар. "Ғаризалар араһынан һайлап алғанда комиссия тәү сиратта йәшкә иғтибар итте - ул 35 йәшкә тиклем булырға тейеш, шулай уҡ профилле белем алыу, 50 меңгә тиклем кеше йәшәгән ауылда йәки бәләкәй ҡалала урынлашҡан учреждениела, тулы һәм унан күберәк ставкаға эшләү иҫәпкә алынды", - тип һөйләне Әминә Шафиҡова һәм 2025 йылда мәҙәниәт учреждениеларына белгестәр йәлеп итеү буйынса федераль программа старт ала, тип тә өҫтәне. Министр белгестең Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы раҫлаған буш вазифалар исемлегенән вакансия һайлауын һәм бер тапҡыр бирелә торған компенсация алыуға ғариза тапшырыуын күҙ уңында тота. Программаның үҙенсәлеге - йәш сикләүенең һәм субсидияларҙы тотоноу йүнәлешенең булмауында.

Радий Хәбиров "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" республика программаһын тормошҡа ашырыу һөҙөмтәләрен ыңғай баһаланы, шулай уҡ бер нисә төп мәҙәни объект төҙөүҙе һәм ремонтлауҙы тамамлауҙың мөһимлегенә иғтибар итте. Төбәк етәксеһе, атап әйткәндә, 2026 йылда проектты ваҡытында финанслауҙы тәьмин итеү өсөн, Өфө дәүләт циркын реконструкциялау проектын әҙерләү мәсьәләләрен хәл итергә, шулай уҡ Рус драма театрын ремонтлауҙы контролдә тоторға ҡушты. Башҡортостан Башлығы Баймаҡ районының Урғаҙа ауылында яңы социаль-мәҙәни үҙәк асыуҙа ҡатнашырға ниәтләүе хаҡында ла хәбәр итте. Объектта төҙөлөш эштәрен 2025 йылдың ғинуарында тамамларға планлаштыралар.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында алтынсы тапҡыр "Аксаков шыршыһы" үтте. Байрамға Өфөнән, Өфө, Архангел, Ауырғазы, Благовар, Бөрө, Стәрлетамаҡ райондарынан 300-гә яҡын бала саҡырылды. Сара "Бәхет биләмәһе" хәйриә фондының попечителдәр советы рәйесе Каринэ Хәбирова етәкселегендә уҙғарыла. Тәүге "Аксаков шыршыһы" 2019 йылда хәйриәселәрҙең аҡсаһына ойошторолдо, унан һуң республика етәксеһе ошондай байрамдарҙы республиканың барлыҡ ҡала һәм райондарында үткәрергә ҡушты.

✓Башҡортостандан 2,5 мең бала һуңғы акция дауамында Ҡыш бабайҙың ҡыҙыу элемтәһенә шылтыратҡан, тип хәбәр иттеләр республиканың Һанлы үҫеш министрлығынан. Ә алдағы йылда республиканан 2,37 мең шылтыратыу теркәлгән. Бушлай ҡыҙыу элемтә телефоны буйынса балалар ҡышҡы йомаҡтар систе, Ҡарһылыуға Яңы йылға алырға теләгән бүләктәр тураһында һөйләне. Ҡыҙыу линияға шылтыратҡан иң әүҙем абоненттар - 5 йәштән 10 йәшкә, ә мөрәжәғәттәр һаны буйынса икенсе урында - 5 йәшкә тиклемге балалар.

✓Башҡортостанда водителдәргә ҡытлыҡ күҙәтелә, тип белдерҙе республиканың хеҙмәт министры Ленара Иванова. Республикала, рәсми мәғлүмәттәр буйынса, 2 мең водитель етмәй. Шул уҡ ваҡытта мәшғүллек үҙәктәрендә ошондай һөнәргә эйә булған 230 кеше иҫәптә тора. "Өфөлә хәл тағы ла киҫкенерәк, сөнки 800 водитель вакансияһы бар, билдәле бер категориялы 33 кенә эшһеҙ", - тип өҫтәне министр.

✓Илдус Шәңгәрәев Өфөнөң граждандар йәмғиәте институттары менән үҙ-ара эш итеү идаралығы етәксеһе итеп тәғәйенләнде, тип хәбәр иттеләр баш ҡала мэрияһының матбуғат хеҙмәтенән. Илдус Шәнгәрәев 20 йылдан ашыу эске эштәр органдарында хеҙмәт иткән, 2023 йылдан алып - муниципаль хеҙмәттә. Тәүҙә Өфө хакимиәтенең ҡулланыусылар баҙары, туризм һәм ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау идаралығында эшләй. Һуңғы ваҡытта граждандар йәмғиәте институттары менән үҙ-ара эш итеү идаралығының административ органдар менән эшләү бүлеген етәкләй.

✓Башҡортостанда билдәле актриса һәм педагог Фәрдүнә Ҡасимоваға Өфөнөң почетлы гражданы тигән исем бирелде. Өфө ҡала советы депутаттары сираттағы ултырышта шундай ҡарар ҡабул итте. Фәрдүнә Ҡасим ҡыҙы институттың театр факультетын ойоштороусыларҙың береһе булып тора. Ул 48 йыл эшләү осоронда 500-гә яҡын актёр һәм режиссёр әҙерләгән. Ә 129-ы мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһендә маҡтаулы исемдәргә эйә.

**“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

О, СПОРТ!

# ТАНЫЛҒАН ХОККЕЙСЫҒА АРНАП...



(Башы 1-се биттә).

**Теманы дауам итеп...**

Оҙаҡ йылдар танылған хоккейсы, Рәсәйҙең атҡаҙанған тренеры Сергей Ғимаевтың ниндәй милләттән булыуы хаҡында бәхәстәр тынмай. 2016 йылда Сергей Ғимаев Туймазыға спорт учреждениеларын ҡарарға килгән ваҡытта крайҙы өйрәнеүсе ғалим Марат Ғәйнетдиновтан үҙенең шәжәрәһен төҙөүен үтенә.

Хоккейсының вафатына тик 4 йылға яҡын ваҡыт уҙғас, ғалим үҙенең асыштары менән уртаҡлаша:

- Мин уның башҡорт булыуына шикләнмәй инем. Спортсының атабабаһы сығышы менән Туймазы районының Кәкребаш ауылынан. 2016 йылдағы осрашыуҙа мин уға "Башҡорт ырыуҙары тарихы" китабын бүләк иттем, унда 1917 йылғы халыҡ иҫәбен алыу материалдары араһында Кәкребаш ауылы тураһында мәғлүмәттәр барлығын әйттем. Был бүләккә бик ҡыуанғайны ул. Әммә һуңынан уның менән бәйләнеш өҙөлдө, ә киләһе йылдың яҙында яҡташыбыҙ мәрхүм булды.

Мин үҙем 1917 йылғы халыҡ иҫәбен алыу материалдарын ҡарап сыҡҡайным, уның ата-бабалары тураһында мәғлүмәттәр тапманым. Бынан һуң Кәкребаш ауылына барып, халыҡ менән аралаштым, бер нисә кешенән һорау алдым. Әммә бер кем дә аныҡ ҡына мәғлүмәт бирә алманы.

Сергей Наил улының бер туғаны ғына, Ғимаев фамилияһы Ғимазетдин тигән кешенән сыҡҡан, тип фаразланы. Ысынлап та, халыҡ иҫәбен алыу материалдарында Ғимазетдинов фамилияһы менән бер ғаилә бар ине. Әммә унда Сергей Наил улының ҡартатаһы тураһында мәғлүмәт булмай сыҡты. Артабан метрикаларҙы өйрәнергә тотондом. Ауылдағы тыуымүлемде, никах теркәүҙәрен ауыл муллалары ғәрәп графикаһы менән яҙып барған. Әммә көтмәгәндә бер мәсьәлә килеп тыуҙы, метрика кенәгәләрен уҡый белгән кеше кәрәк. Оҙаҡ ваҡыт эҙләргә тура килде.

Бәхеткә күрә, Туймазыла ғәрәп яҙмаларын өйрәнгән Альберт Исмәғилевты осраттым. Ул миңә ярҙам итте. Метрика яҙмаларын уҡығас, Сергей Наил улы Ғимаевтың этник башҡорт булыуы асыҡланды. Был ғәжәп түгел, Кәкребаш ауылындағы халыҡтың күпселеге - башҡорттар. Хоккейсының шәжәрәһе: Сергей - Наил - Йәмғетдин - Ғимазетдин - Ғәбделғәфәр - Ғәбделйәббәр - Мәмбәт".

**Инсаф ХУЖАБИРГӘНОВ.**

АФАРИН!

# СИБАЙ ҠЫҘЫ ЗАРИНА...

## тай боксы буйынса юғары титулда



**Башҡортостан спортсыһы Зарина Исламова Таиландта тай боксы буйынса халыҡ-ара титул яуланы. Был хаҡта Сибай ҡалаһы хакимиәтенән хәбәр иттеләр.**

23 йәшлек Зарина Исламова 54 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһында Таиланд спортсыһы Дангконгфа Банчамекты ышаныслы еңде.

"Ярыштар легендар Раджадемнерн стадионында үтте. Был Таиландтың тай боксы (муай-тай) ҡағиҙәләре буйынса алыштар ойошторолған стадиондарҙың береһе, Раджадемнерн стадионы чемпионы титулы был спорт төрөндә абруйлы булып һанала. Зарина - Сибайҙың "Кара аждаһа" клубы тәрбиәләнеүсеһе, Александр Гаврилов етәкселегендә шөғөлләнә", - тип билдәләнеләр Сибай хакимиәтендә.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2023 йылда Зарина Исламова муай-тай буйынса Рәсәй чемпионы исемен яуланы, ә 2024 йылда Грецияла тай боксы буйынса донъя чемпионатында еңеүсе булды.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Башҡортостан спортсыларының төрлө кимәлдәге ярышбәйгеләрҙә еңеү яулауы тураһында хәбәрҙәр килеп тора.**

● Мәҫәлән, Башҡортостан иҫәбендә - Рәсәй-Ҡытай йәштәре Ҡышҡы уйындарының өсөнсө миҙалы. Илдең йыйылма командаһы фристайл буйынса көмөш призер булды. Команда составында Башҡортостандың тау саңғыһы мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе Оскар Әйүпов та сығыш яһаны. Был хаҡта үҙенең телеграм-каналында спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итте. "Бөтә команданы, беҙҙең Оскарҙы, уның тренерҙары Елена һәм Роберт Муллағәлиевтарҙы ҡотлайым!", - тип билдәләне ул. Бынан алдараҡ Оскар Әйүпов "акробатика" дисциплинаһында фристайл буйынса бронза призер булды.

● Ҡаяға үрмәләүсе Өфө ҡыҙҙары Бөтә Рәсәй ярыштарында миҙалдар яуланы, тип хәбәр итә Башҡортостан Спорт министрлығының телеграм-каналы. "Рокландс" спорт клубынан Мария Заверуха 10-13 йәшлек ҡыҙҙар араһында көмөш призер булды. Ә "Спартак" олимпия резервындағы спорт мәктәбенән Елизавета Поройкова 16-17 йәшлек ҡыҙҙар араһында 3-сө урынды алды. Ҡаяға үрмәләү буйынса "Раштыуа турниры" Воронеж ҡалаһында үтте.

● Башҡортостандың еңел атлеттары Волга буйы федераль округы беренселегендә 9 миҙал яуланы. Ярыштар Киров ҡалаһында уҙҙы, унда 14 округтан 600-гә яҡын спортсы ҡатнашты, тип хәбәр иттеләр республиканың Спорт министрлығынан. Бейеклеккә һикереүҙә Динар Ғилимшин һәм Александр Самойлов иң яҡшы һөҙөмтәләр күрһәтте, Азамат Хәлитов һәм Нелли Ғилмуллина "бронза" алды. 3000 метр араға йүгереүҙә Ева Вдовина (18 йәшкә тиклем) һәм Елизавета Косолапова (16 йәшкә тиклем) финишҡа икенсе булып килде. Елизавета Косолапова 1500 метрға йүгереүҙә бронза миҙал яуланы. Бынан тыш, Арсений Кутышев (етебәйге) һәм Эрик Унжанов (800 метрға йүгереү) бронза миҙалдарға лайыҡ булды.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!



# ТУРА ЮЛДА...

**Көнсығыш сығыу юлында хаҡтар үҙгәрҙе. 6 ғинуарҙан тариф планына транспорт төрҙәренең дүрт категорияһы индерелде. Транспондерҙар ярҙамында түләүселәргә һәр категорияла 20 һум ташлама яһала.**

Транспондерһыҙ, беренсе категория транспорт менән үтеүселәр өсөн хаҡ - 150 һум, икенсе категорияға - 250 һум, өсөнсө һәм дүртенсе категорияларға 300 һум тәшкил итә башланы. Төнгө сәғәттәрҙәге ташламалар ғәмәлдән сығарыла.

Түләүле юлдан йөрөгәндә ваҡыт әҙерәк китеүен, яғыулыҡ кәмерәк тотонолоуын, шулай уҡ юғары сервис менән файҙаланырға мөмкин икәнен иҫтән сығармаҫҡа кәрәк. Шуныһы ла бар: Көнсығыш юлынан үтеүселәр Рәсәйҙә бер ерҙә лә булмағанса күп льгота менән файҙалана ала.

Был трасса былтыр 21 мартта асылды. Беренсе этапта республика Хөкүмәте ябайлаштырылған тариф планы индерергә хәл итте, ул ике төр транспортҡа һәм иң түбән хаҡтан тора ине. Был водителдәргә яңы юлдың өҫтөнлөктәрен аңларға ваҡыт биреү, шулай уҡ бындағы хеҙмәттәрҙе, сервисты тулыһынса юлға һалыу өсөн мөһим булды. Һөҙөмтәлә:

- апрелдән башлап ҡулаҡсаһыҙ түләү мөмкинлеге булдырылды;
- май айынан транспондер ярҙамында түләү барлыҡҡа килде;
- июлдә Көнсығыш юлынан үтеүгә льготалар биреү тәртибе ҡаралды;
- ноябрҙә уға төҙәтеү һәм үҙгәрештәр индерелде;
- 9 декабрҙә транспондерҙар менән үтеүгә айырым һыҙаттар булдырылды;
- Дәүләт хеҙмәттәренең республика порталында бушлай һәм льготалы үтеүҙе юллау мөмкинлеге асылды.

Әлеге көнгә Көнсығыш сығыу юлы эшен тәртипкә һалыуҙың иң мөһим саралары атҡарылған. Уның нәйбәт эшләүен тәьмин итерҙәй бөтә хеҙмәттәр ҙә ойошторолған, һәм ул Автодор стандарттары буйынса тулы эксплуатациялауға күсерелә.

# МУТЛАШАЛАР

**Өфө районында хәүефле "незамерзайка" етештереү буйынса йәшерен цех эшләүе асыҡланған.**

Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, уны Николаевка ауылында 47 йәшлек ир һалыҡ өсөн хәүефле метил спирты ҡулланып, етештергән. Ул ағыулы матдәләр булған хәүефле шыйыҡсаны һатҡанда тотола. Полиция хеҙмәткәрҙәре 2500 литр әҙер "незамерзайка" ны һәм 12 мең әҙерләмәне тартып ала. Шулай уҡ ике хеҙмәткәрҙең Миграция ҡануниәтен боҙоуы асыҡланған. Полиция "законһыҙ миграция" һәм "ағыулы матдәләр әйләнеше" статьялары буйынса енәйәт эштәре аса.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

**Уҫаҡ**

Уҫаҡ (осина) ҡайырыһы углеводтар, фенолгликозидтар, юғары май кислоталары (каприн, арахин, лаурин, беген һ.б.), ароматик кислоталар, дуплау матдәләре, эфир майҙары, ... Уҫаҡ ҡайырыһы, әсе гликозидтарға (салицин һәм популин) бай. Бөрөләрендә лә файҙалы матдәләр күп. Япраҡтарында өҫтәүенә каротин, органик кислоталар, С витамины, флавоноидтар һәм антоциандар бар.

Уҫаҡ бактерияларға ҡаршы, үт сығарырға паразиттарҙан ҡотолорға ярҙам итә. ЕлһеНеу, йүтәлгә ҡаршы яҡшы дауа.

❖ Эсәк ауырыуҙарынан ваҡланған уҫаҡ ҡайырыһын сәй һымаҡ бешереп (5-8 минут тоторға), ас ҡарынға эсергә.

❖ Һыуыҡ тейгәндә 1 балғалаҡ уҫаҡ бөрөһөнә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 45-60 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 5-6 тапҡыр 1-2 ҡалаҡ эсергә.

❖ Нефрит ауырыуынан уҫаҡтың 1 ҡалаҡ йәш ботаҡтары, япрағы һәм ҡайырыһына 1 стакан һыу ҡойорға, 10 минут ҡайнатырға һәм һөҙөргә. Көнөнә 3-5 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

❖ Эс киткәндә уҫаҡтың 1 ҡалаҡ йәшел бөрөһөнә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта 25 минут йылытырға, 40 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тпҡыр ашарҙан алда 1-2 ҡалаҡ эсергә.

❖ Быуындар һыҙлағанда уҫаҡ бөрөһөнә 1:1 нисбәтендә үҫемлек майы ҡушып, ыуынырға.

❖ Геморройҙан таҙа уҫаҡ япраҡтарын 2 сәғәткә ҡапларға. Ныҡ әсеттергәндә иртәрәк алып ташларға ла була. Шунан һалҡын компресс яһап, һалҡын һыу менән сайынырға. Был ысулды аҙнаһына 3 тапҡыр ҡулланырға була.

**Һарыгүҙ**

❖ Аппетит кәмеһә, 1 ҡалаҡ һарыгүҙ (золототысячник) үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, боҫта 15 минут торға, 30 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Холециститтан 1 ҡалаҡ киптерелгән һарыгүҙ үләненә 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, ауыҙы ябыҡ һауытта 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Ашарҙан 30 минут алда яртышар стакан эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Тебет
**(Перевозчик)**



Сәпсәүҙәр араһында иң ваҡ ҡош, сыйырсыҡ ҙурлығында. Өҫтән ҡарағанда һоро, бронза булып ялтырап тора, буй-буй һыҙыҡтары бар. Аҫҡы яғы аҡ, түшендә тар ғына буй һыҙыҡтары күренә. Ҡойроғо ҡараһыу, ултырған саҡта ҡош уны йыш ҡына сайҡапсайҡап ала. Аяҡтары ҡыҫҡа. Суҡышы тура, ҡара төҫтә. Һыу өҫтөнән осоп барғанда ҡанаттары менән ике тапҡыр һуғып ала, был саҡта "ти-ти-ти-ти" тигән тауыш сағара.

Һыуҙан ҡалҡып торған ағас төпһәләрендә ултырырға ярата. Ярҙан китеп барған кешене көслө ҡыҫҡырыу менән оҙатып ҡала.

Евразияла киң таралған ҡош. Урал алдында ла йыш осрай. Көньяҡ Уралда шулай уҡ оя ҡороп йәшәй, Урал аръяғы һыуҙарында һирәк.

Үләнле, әммә асыҡ ярҙарҙа оя ҡора, шулай уҡ йылға-күлдәргә яҡын урынлашҡан урмандарҙы үҙ итә. Бер ярҙан икенсеһенә осоп йөрөүе сәбәпле, күҙгә ташланып бара. Һыуҙың ситенә килеп ризыҡ таба.

Ояһына кипкән үлән, япраҡ, ылыҫ түшәй. Башҡа сәпсәүҙәр кеүек уҡ, 4 йомортҡа һала. Ике ҡош сиратлап баҫа. Июль аҙағы-август башында йылы яҡтарға юллана башлай. Көньяҡ Азия менән Африкала ҡышлай.

## Көгөрләүек
**(Мородунка)**



Сыйырсыҡ ҙурлығында. Төҫө йәнһәтенән тебеткә оҡшаған. Ҡабырғаһын буйлап ике ҡара һыҙыҡ үтә. Төп айырмаһы - өҫкә бөгөлөп торған ҡыҫҡа суҡышы. Ҡойроғо - аҡһыл көл төҫөндә. Тауышы "твит-твит-твит" йәки "ту-лии".

Ҡурҡып осоп киткәнендә "ведь-ведь" тип тауышлана. Башын аҫҡа эйеп, ер һәм һыу өҫтөнән осоп йөрөй. Был саҡта ул көгөрләй, "көгөррр" тип һайрай, исеме лә шунан, моғайын.

Был төр сәпсәү бөтөн ергә таралған. Көндө һыу буйында үткәрә, шунда уҡ тамағын туйҙыра. Парҙар икеһе ике һыу сығанағын һайлай. Оялары ла һыуҙа яҡын, уға төрлө кипкән үлән түшәй. Ғәҙәттә 4 йомортҡа һала. Ояһын ныҡ һаҡлай, кеше яҡынлашһа, тауышланып, уны ситкә алып китергә тырыша. Бәпкәләр һыуға яҡын йөрөй, һаҙланып ятҡан күләүектәрҙе ярата. Июлдә үк йылы яҡҡа оса башлай. Африка, Азияның көньяғы, Австралияла ҡышлай.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

**Башҡортостанда - Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам йылын, Рәсәйҙә - Ватанды һаҡлаусылар йылын башлап ебәрҙек. Был уңайҙан йыл әйләнәһенә байтаҡ һүҙ әйтелер. Ә хәҙер "Ватанды һаҡлаусылар" Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам күрһәтеү дәүләт фондының Башҡортостан Республикаһы буйынса филиалы етәксеһе Гөлнур ҠОЛҺАРИНА менән 2024 йыл һөҙөмтәләрен барлайбыҙ һәм яңы йылға маҡсаттар хаҡында һөйләшәбеҙ.**

# ЯУГИРҘАР ЯҢҒЫҘ ТҮГЕЛ!

**➔ "Ватанды һаҡлаусылар" махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам күрһәтеү дәүләт фонды ике йыл тирәһе эшләй. Ошо ваҡыт эсендә ниндәй эштәр атҡарылған?**

- Фонд Рәсәй Президенты Владимир Путин указына ярашлы 2023 йылдың апрелендә булдырылды. 1 июндә беҙҙең Башҡортостан филиалы үҙ ишектәрен асты. Фондтың төп маҡсаты - Махсус хәрби операция ветерандарына һәм һәләк булған егеттәребеҙҙең ғаиләләренә ярҙамы алыуға булышлыҡ итеү.

Беҙҙең төп ҡаҙанышыбыҙ тип мин әлеге көндә эшләп килгән команданы атар инем. Бөгөн бөтә республика буйынса 97 социаль координатор эшләй. Күп социаль координаторҙар урындағы хакимиәттәр, йәмәғәт ойошмалары, ирекмәндәр, федераль ведомстволар менән ныҡлы бәйләнеш булдырып, алға ҡуйылған бурыстарҙы лайыҡлы үтәй. Был бурысты ярым-йорто атҡарып булмай, уны бөтә күңелен биргән, ваҡытын йәлләмәгән белгестәр генә башҡара ала. Башта 40 кеше менән эшләй башлаһаҡ, хәҙер белгестәр һаны ике тапҡырға артты. Улар араһында МХО ветерандары, улдарын юғалтҡан әсәләр, ҡаһармандарыбыҙҙың тол ҡатындары, әле яуҙа йөрөгән яугирҙарҙың ҡатындары һәм әсәләре бар.

Рәсәй Федерацияһы Оборона министрлығы статс-секретары - Рәсәй Федерацияһы оборона министры урынбаҫары Анна Цивилева былтыр ике тапҡыр Башҡортостанда булып китте, филиал эшен юғары баһаланы. Ноябрь айында үткән семинарҙа беҙҙең филиал эше бөтә Рәсәй кимәлендә билдәләнде.

Һандарға мөрәжәғәт итһәк, филиал белгестәре былтыр 90 меңдән ашыу мөрәжәғәт ҡабул иткән, уларҙың 96 проценты ыңғай хәл ителгән. Егеттәребеҙгә тыныс тормошҡа ҡайтып, уларға медицина, психология, хоҡуҡ белгестәре консультацияһы алырға, белемен камиллаштырырға, эшкә урынлашырға, шифаханаларҙа дауаланырға ярҙам итәбеҙ. Йәрәхәт алып ҡайтҡан яугирҙарға техник реабилитация саралары - төрлө юғары технологиялы протездар, коляскалар - юллайбыҙ. Уларҙың торлаҡтарын ихтыяждарына ярашлы яраҡлаштырабыҙ. Дәүләт фонды аша алынған ярҙам ветерандарға бушлай күрһәтелә.

**➔ Фондтың Башҡортостан филиалындағы ниндәй эштәр менән айырыуса ғорурланаһығыҙ?**

- Беҙҙең, башҡаларҙан айырмалы рәүештә, үҙебеҙҙең бихисап проекттарыбыҙ бар. "СВОя семейная гостиная" ("Үҙебеҙҙең ҡунаҡ бүлмәһе"), проекты уникаль күренеш. "Ер ҡото" фестивале, "Атайсал" проекты сигендә үткән "Батырҙар дәүере" түңәрәк өҫтәле һәм башҡа төрлө саралар беҙҙең филиалдың башҡаларҙан айырмалы һыҙаты. Шулай уҡ Махсус хәрби операция батырҙарының аталарына тапшырған "Ватан һаҡсыһының атаһы" йәмәғәт миҙалын да билдәләп үткем килә. Был наградa "Рәсәй халыҡтары ассамблеяһы" Бөтә Рәсәй йәмәғәт-дәүләт ойошмаһының төбәк бүлексәһе һәм беҙҙең филиал менән бергә тормошҡа ашырылған проект. Республикабыҙ етәкселеге был башланғысты хупланы. Тәүге наградаларҙы беҙ атайҙар көнөндә тапшырҙыҡ. Миҙал әүҙем ижтимағи эшмәкәрлек менән шөғөлләнгән, ветерандарға һәм Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә тылда ярҙам иткән, йәштәргә һәм ветерандарға өлгө булған, тыуған яғының ысын патриоттарын үҫтергән атайҙарға бирелә. Миҙал алғандар араһында ете Рәсәй Геройының атаһы бар. Шулай уҡ наградa күрше төбәктәрҙәге лайыҡлы милләттәштәребеҙгә лә тапшырылды.

Быға тиклем ысын илһөйәрҙәр үҫтергән әсәйҙәргә ошондай уҡ награда - Рабиға Ҡушаева исемендәге "Ҡатын-ҡыҙ - милләт әсәһе" миҙалы тапшырылып килде. Беҙ быйыл тағы ла улдарын юғалтып, артабан йәшәргә көс тапҡан, әүҙем йәмәғәт тормошо алып барған, алғы һыҙыҡта торған егеттәребеҙгә ярҙам иткән, башҡа әсәләргә терәк булған лайыҡлы әсәйҙәрҙе тәбрикләйәсәкбеҙ.

**➔ Филиалдың киләсәккә ниндәй перспективалы эш йүнәлештәре бар?**

- Үткән ваҡыт эсендә беҙ аныҡ эш системаһын төҙөнөк. Бурыстар көндән-көн арта, сөнки заман ҡуйған талаптар үҙгәрә. Әлеге ваҡытта ветерандарҙы тыныс тормошҡа яраҡлаштырыу һәм уларҙы социаллләштереү мәсьәләләре алғы планға сыға. Шуға ла егеттәрҙе йәмәғәт сараларында ҡатнашырға саҡырабыҙ. Быйыл беренсе тапҡыр шәхси хәрби компаниялар ветерандары Диңгеҙ флоты көнөн һәм Һауа-десант ғәскәрҙәре көнөн байрам итеүҙә ҡатнашты. Егеттәрҙе үҙ-үҙҙәре менән яңғыҙ ҡалдырмаҫҡа кәрәк. Улар үҙҙәре лә йәмғиәткә, тыуған илдәренә кәрәкле булыу өсөн ҙур тырышлыҡ һала: араларында хәрби-патриотик эштә телә ҡатнашыусылар күп. Һәләк булған яугирҙарҙың исемен мәңгеләштереү эшендә лә ҡаһармандарыбыҙҙың ярҙамы ҙур. Гуманитар ярҙам йыйыу һәм алып барып еткереүҙә лә МХО ветерандары ҡатнаша.

Ветерандарыбыҙҙы, шул иҫәптән, инвалидлыҡ алып ҡайтҡан егеттәрҙе спортҡа йәлеп итеү өсөн ҙур эш алып барыла. МХО ветерандарының йыйылма командаһы март айында үтәсәк ҡышҡы адаптив спорт төрҙәре буйынса бөтә Рәсәй фестиваленә әҙерләнә.

Ике йыл рәттән үткәрелгән, матур йолаға әйләнгән ветерандар һәм ҡаһармандарыбыҙҙың ғаилә ағзалары араһындағы ижади фестиваль дә ҡаралған планда. Ғөмүмән, Махсус хәрби операция ветерандары һәм уларҙың ғаиләләре үҙҙәрен яҡлаулы, беҙҙең хәстәрҙе тойоп, тиҙерәк ғәҙәти тормошҡа ҡайта алһын өсөн барыһын да эшләйбеҙ.

Рәсәйҙә - Ватанды һаҡлаусылар, Башҡортостанда - Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам йылы тип иғлан ителеүе беҙгә яңы бурыстар һәм яуаплылыҡ өҫтәй. Яңы эш йүнәлештәрен, күп төрлө, шул иҫәптән бөтә Рәсәй масштабындағы саралар үткәреү тураһында ла уйлашабыҙ. Быларҙы атҡарып сығыр өсөн бөтә шарттар ҙа бар. Беҙгә республика етәкселеге һәм шәхсән Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тарафынан ҙур ярҙам күрһәтелә. "Барыһын да эшләй алабыҙ!" тигән ышанысыбыҙ ошонан да килә.

**Рида ӘХМӘТЙӘНОВА.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

# ЯЛҒА ҠАЙТҠАЙНЫЛАР



**Өфөлә 200-ҙән ашыу яугирҙы МХО биләмәһенә оҙатыу тантанаһы үтте. Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә вице-премьер Ирек Сәғитов белдереүенсә, Башҡортостандан 2025 йылдың башынан ҡыҫҡа ваҡытлы ялға ҡайтҡан яугирҙарҙың 10 колоннаһы Махсус хәрби операция биләмәһенә юлланды.**

- Республиканың ЮХХДИ һәм Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты хеҙмәткәрҙәре оҙатыуында исемле батальондар хәрбиҙәре, мобилизацияланғандар ултырған автобустар юлға сыҡты. Республикабыҙға, шул иҫәптән һеҙгә, Радий Фәрит улы, уңайлы автобустар менән тәьмин иткән өсөн ыңғай баһа бирелде. Кешеләр рәхмәтле, шәхси составтың да хәрби рухы көслө", - тине Ирек Сәғитов.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хәрбиҙәрҙе Донбасҫҡа йөрөткән автобус водителдәрен, шулай уҡ МХО биләмәһенә гуманитар йөк ташыған фура водителдәрен дәртләндереү кәрәклеген дә иҫкә төшөрҙө.

✓ Тоҙҙоң хаҡы, көмөш менән һаналған элекке ассигнация курсын түңәрәкләү маҡсатында ботона 1 йә иһә 1/2 тингә генә арта. Ошо ваҡытта аҡсалы байҙар, үҙҙәренә ҙур зыян килтереп булһа ла, тоҙҙарын һатып ҡалырға тырышты.



ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Граф В.А. Перовский**

**(1833-1842 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған).**

Тоҙ менән эш итеүсе чиновниктар был осракта ла баҙап ҡалмай. Улар тоҙ алырға килгән йөк ташыусыларға яңы йылдан промыслала тоҙ 2 һум көмөш тәңкәгә һатыла башлаясаҡ, шуға күрә тоҙҙо күберәк, запасы менән алып ҡалығыҙ, аҙаҡтан артыҡ көс һалмайынса һис бер хәүефһеҙ яҡшы капитал туплай алырһығыҙ, тип ышандыралар. Мин ул ваҡытты хәтерләйем. Кем генә ул саҡта тоҙ һатып алманы? Аҡсаһыҙҙар байҙарҙан ҙур процентҡа бурысҡа аҡса алды, ә һуңғылары тоҙҙо һаҡларлыҡ урындарын тултырғансы һатып алып өлгөрҙө.

Һәм һуңынан барыһын да ниндәй күңел төшөнкөлөгө биләп алды! Тоҙҙоң хаҡы, көмөш менән һаналған элекке ассигнация курсын түңәрәкләү маҡсатында, сортына ҡарап, ботона 1 йә иһә 1/2 тингә генә арта. Ошо ваҡытта күпме драматик һәм трагик күренештәр күҙәтелде: аҡсалы байҙар, үҙҙәренә ҙур зыян килтереп булһа ла, тоҙҙарын һатып ҡалырға тырышты, сөнки йәйге эҫелә тоҙ кибә һәм ауырлығы кәмей бара, ә тоҙ шул тиклем күп, уны бер нисек тә һатып ебәреү мөмкин түгел ине. Ҡиммәтле тоҙҙо оҙаҡ онотманы Ырымбур!

Илек промыслаһында байыған чиновниктарҙың нығыраҡ билдәле булғандарынан ошоларҙы атап китәм. Щедрин, ҡыҙы больница ҡарамағында хеҙмәт иткән лекарға кейәүгә сыҡҡанда уға 300 мең һумлыҡ ассигнациялар бүләк итә. Балахонов - 50-се йылдарҙа советник булып хеҙмәт иткән чиновник, ситтә дауаланыр өсөн сығып китеп, юлда үлеп ҡала; уның менән бергә барған ҡыҙы табипҡа кейәүгә сыға, уға атаһынан 75 мең көмөш тәңкә аҡса ҡала. Баранцев, 50-се - 60-сы йылдарҙа тоҙ ватып алына торған соҡорҙа күҙәтеүсе хеҙмәтен башҡара; һалдат ғаиләһенән сыҡҡан, госпиталь контораһында писарь булып та эшләй. Элекке наказный атаман Иван Васильевич Подуров подполковник чинында госпиталь күҙәтеүсеһе, аҙаҡтан провиант коммиссияһы ағаһы Щетининға Пасха байрамына килгәнендә уның экзекуция уҙғарғанын күрә: Баранцевты таяҡ менән һуҡтыралар. Подуров, бөйөк байрам ваҡытында яза биреү урынлы түгел, тип әйтеп һала. Уға былай тип яуап ҡайтаралар: "Һеҙ белһегеҙ ине, ошо мошенниктың ниҙәр ҡылғанын! Баранцев, чин алыу менән Илек идаралығына күсә, ә уныһы ябылып, отставкаға сыҡҡанында 30 мең һумдан күберәк капитал туплағаны беленә". Быны миңә Подуров үҙе һөйләне.

Инженер ведомствоһында писарь булып хеҙмәт күрһәтеп күтәрелгән Рыбаков Илек идаралығында ҙур булмаған вазифа биләй; отставкаға сыҡҡас, ул Ырымбурҙа Николаев урамында ике ҡатлы таш өй һатып ала, ул ваҡытта (1840 - 1842 йылдарҙа) был өй 50 мең һумдан да кәм тормаған, унда хәҙер Герштейн аптекаһы урынлашҡан. Ул үҙенең таныштарына һөйләгәненсә (ошо хаҡта мин үҙем дә уларҙан белдем), уның көн итере өсөн таһы ла ошо тиклем үк аҡсаһы ҡала. Ул өйләнгән инеме, юҡмы, уныһын белмәйем, әммә ул һуңғы ваҡытта бер ябай ҡыҙҙы үҙендә тотто, һуңынан уны, бирнәһенә 20 мең һум аҡса бүлеп, отставкалағы унтер-офицерға кейәүгә бирҙе.

Ырымбурға сәйәси енәйәттәре өсөн һөргөнгә ебәрелгән, һуңынан ярлыҡау алған билдәле шағир Александр Николаевич Плещеев Илецк Защитаһында чиновник Токаревтың ҡыҙына өйләнә, атаһы ҡыҙына 50 мең һум көмөш тәңкә аҡса бирә.

Илецк Защитаһында хеҙмәт иткәндәрҙең барыһынан да нығыраҡ билдәлелек алғаны Сергей Николаевич Щербачев булды. Перовскийҙың тәүге идаралығы осоронда ул Ырымбурҙа полицмейстер вазифаһын биләй, ротмистр чинында, яҡшы белем алған кеше һәм билдәле кавалер, урындағы интеллигенция иҫәбенә инә һәм хәрби губернатор свитаһына ингән кешеләр менән дуҫлаша, бигерәк тә ул ваҡытта капитан һәм Перовскийҙың адъютанты Балкашин менән һуңғы көндәргә тиклем һин дә мин аралашып йөрөй.

Ырымбурға генерал Обручев килгәс, Щербачев полицмейстер вазифаһын ҡалдырырға теләйеш була, Балкашин уны үҙендә урынлаштырырға теләй һәм уны айырым поручениелар буйынса чиновник вазифаһына тәғәйенләүҙе үтенә, ошо вазифаны биләгән кешегә йылына 1 мең һум аҡса түләнә. Губернатор Обручев, ришүәт алыуға әүәҫ булыуына, ришүәтселек менән шөғөлләнеүенә һылтанып, Щербачевты әлеге вазифаға тәғәйенләүҙән баш тартыуы хаҡында официаль ҡағыҙ ебәрә. Щербачев Өфөгә бара һәм, ҡазна палатаһы рәйесе Случевскийға 5 мең һум аҡса түләп, Илек тоҙ идарағының ниндәй ҡазна палатаһы чиновнигы вазифаһына тәғәйенләнә. Обручев та үҙ яғынан, Щербачевты тәғәйенләтмәҫ өсөн, уның хаҡында граждандар губернаторы Талызинға яҙа; уныһы үҙ сиратында Случевскийға хат ебәрә, һуңғыһы Щербачевтың вазифаға тәғәйенләнеүе һәм эшләй башлауы, уның бер ниндәй ҙә аламалыҡтарын белмәүен белдереп, яуап ҡайтара.

Шулай итеп, Щербачев биләгән урынында ҡуҙғатып ала алмаҫлыҡ рәүештә нығынып ала, 10 йылдан ашыу хеҙмәт итеп, бик ҙур бол туплай, Мансуровтың имениеһын, Ыҡ йылғаһындағы Спасское ауылын, шулай уҡ Харьков губернаһында шәкәр заводы менән икенсе бер ауылды һатып ала. Ҡарт булһа ла, икенсегә Илек коменданты, полковник Бабстың ҡыҙына өйләнә. Уларҙың ике улы була; улар икеһе лә Ырымбурҙа хеҙмәт итә: береһе Орск өйәҙе башҡорттарында миров посредник вазифаһын башҡара, һуңынан бында элегерәк вице-губернатор булған Лукошковҡа, Пермға китә; уның аҙаҡ Ирбит городничийы һәм исправнигы булыуы хаҡында ишеткәйнем. Щербачевтың икенсе улы тәүҙә башҡорт полкында, һуңынан Ырымбур казак ғәскәрен-дә сотник булып хеҙмәт итә, унан регуляр кавалерияға күсә.

Күсемһеҙ милек булған имениеһынан башҡа Щербачевтың 200 мең һумға тиклем капиталы булған, тип һөйләйҙәр ине. Щербачевтың вафатынан һуң уның ҡатыны, яңы идеялар менән ҡыҙыҡһынып китеп, Харьковта ҡыҙҙар өсөн пансион аса, уны яҡшы итеп йыһазлай һәм, ҙур түләү вәғәҙә итеп, уҡытыусылар вазифаларына профессорҙарҙы саҡыра; сығымдарҙы иҫәпкә алып, пансионда йәшәгән һәм уҡыған өсөн юғары ғына хаҡ ҡуя.

Ҡыҙҙар аҙ килә; реклама һәм башҡа саралар ҡулланып, бында уҡырға килергә теләүселәр һаны күбәйтергә тырышып ҡарайҙар, әммә өмөттәр аҡланмай һәм пансионды ябырға тура килә.

Щербачев, үҙенең ҡомһоҙлоғо менән билдәле булған хәлдә лә, Ырымбурҙың юғары йәмәғәт даирәһендә һәр саҡта ихтирам менән файҙалана, генерал-губернатор Перовский ҙур балдар уҙғарғанда Илецк Защитаһына уның өсөн саҡырыу билеты ебәрелеп тора.

Шулай, генерал-губернатор канцеляриәһының элекке етәксеһе Глебовҡа бер казак офицерының ришүәт алыуы хаҡындағы доклад менән килгәнемдә, ә әлеге офицер йөҙ һумдан кәмерәк алған була, ул: "Бына ниндәй офицерҙар", - тип әйтә ҡуйҙы; мин дә яуапһыҙ ҡалманым: "Ә бындайҙар ҡайҙа ғына юҡ икән?"- тинем һәм туранан-тура Щербачевты күрһәттем, ә уны ҡазнанан урлашҡан өсөн бер кем дә шелтәләмәй һәм уға 70 саҡрымдан генерал-губернатор балына саҡырыу ебәрәләр. Глебов әйтте: "Да-с... әммә Щербачев помещик".

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Берлин стратегик һөжүм итеү операцияһында

60-сы һәм 62-се гв. атлы полктарының Бранденбург ҡалаһы өсөн алыштарҙа ҡатнашыуы хаҡында уларҙың боевой ғәмәлдәре журналында ошондай мәғлүмәттәр теркәлгән: "...25 апрелдә 60-сы гв. атлы полкы алдында 47-се танк бригадаһы, 148-се гв. артминполкының 1-се һәм 3-сө батареялары, ПВО-ның 20-се гв. дивизионының 2-се батареяһы булышлығында Шмертекер йүнәлешендә боевой хәрәкәттәр алып барыу бурысы ҡуйылды... 22 сәғәттә полк Зило-канал йүнәлешендә һөжүм башланы... Рубеждағы хәл торошо: 60-сы гв. атлы полкының 2-се һәм 3-сө эскадрондары биләгән плацдарм Зило-канал буйлап, 35 - 40 м киңлегендә 300 метрға тиклем һуҙыла. Һул яҡ мөйөштән алдараҡ 58-се гв. атлы полкының 1-се эскадроны тора, уң яҡта күршеләр юҡ. 26 апрелдә дошман бер нисә тапҡыр контратакаға күтәрелеп ҡараны. Полк эскадрондары уларҙы ҙур ауырлыҡ менән кире ҡаҡты. Бранденбург-Плаце юлы буйында ҡыҙыу алыштар башланды. Ошо алыштарҙа 3-сө эскадрон (эскадрон командиры, гв. өлкән лейтенанты Михайлов, яраланыуына ҡарамаҫтан, һуғыш яланын ташлап китмәне) пулеметсылары үҙҙәрен батырҙарса тотто. Немецтарҙың юғалтыуҙары: 130 һалдат һәм офицер юҡ ителә йә иһә яралана, 9 автомашина ҡулға төшөрөлә. 60-сы гв. атлы полкының юғалтыуҙары: һәләк булғандар һәм яраланғандар - 33 кеше".

62-се гв. атлы полкы документтарынан: "...26 апрелдә полк 32-се танк полкының өс танкыһы, 148-се гв. артминполкының 3 батареяһы һәм танкҡа ҡаршы бер истребитель батареяһы менән Кригереймштетте тигән тораҡ пунктын алыу өсөн алышҡа сыға, уны биләй һәм Притцербенан Бранденбургҡа барыусы юлда нығына. Ике көн эсендә дошмандың юғалтыуҙары: 55 һалдат һәм офицер юҡ ителә, әсиргә алына - 44. Ошо ваҡыт дауамында полктың 46 кешеһе яралана, 8 кеше һәләк була; 15 ат үлә".

Бранденбургтың төньяҡ ситендә барған алыштарҙың иң ҡыҙған бер мәлендә Мәскәү Берлинды ҡамап алыу операцияһын уңышлы тамамлаған 1-се Белорус фронты ғәскәрҙәренә салют бирә ине. Юғары Баш командующийҙың бойороғонда гв. генерал-лейтенанты М. П. Константиновтың 7-се гв. атлы корпусы соединениелары ла маҡтап телгә алына. 16-сы гв. атлы дивизияһы яугирҙары ошо хәбәрҙе шатланып ҡаршы ала.

Бранденбург өсөн алыштар дауам итә. Саперҙар шартлатылған күперҙе тергеҙеү эшенә тотона. Уның аша бер нисә 45-миллиметрлы пушка һәм полктың миномет батареялары икенсе ярға сығарыла. Был улар биләгән плацдармды кире дошманға бирмәү йәһәтенән бик мөһим була. Тиҙҙән ҡаланы штурмлау маҡсатында канал аша ауыр орудиелар һәм танкылар сығарыла. 58-се һәм 60-сы гв. полктары Бранденбургтың төньяҡ ситендә алышҡа инә. Ә 62-се гв. атлы полкы Хафель йылғаһына сыға. Полк эскадрондары юл ыңғайы яҡын-тирәне дошмандан таҙартып барып, 870 һалдат һәм офицерҙы әсиргә ала. Шулай уҡ венгрҙарҙың 540 кешенән торған төҙөлөш батальоны үҙ телеге менән бирелеүҙе хуп күрә. Банегланд районында беҙҙең яугирҙар авторемонт базаһын ҡулға төшөрә, унда 2 мең автомашина, 800 мотоцикл була. Брилов районында146 самолеты менән авиамастерскойҙар беҙҙекеләр ҡулына эләгә.

28 апрелдә 62-се гв. атлы полкы 47-се танк бригадаһының өс танкыһы менән Герден тораҡ пунктына һөжүм итә һәм уны ала. Бындағы хәрби госпиталдә дауаланып ятҡан 2,5 мең ярым кеше, шулай уҡ 15 офицер һәм 1 генерал әсиргә алына. Госпиталдең 500 хеҙмәткәре лә тиҙерәк әсиргә бирелеү яғын ҡарай. Шул саҡта Герден тип аталған районда (Бранденбургтың төньяҡ ситендә) сәйәси тоткондар тотолған төрмә булыуы белемә. 62-се гв. атлы полкы автоматсылары, 32-се танк полкының бер танкыһына десантсылар булып ултырып, төрмә ихатаһына бәреп инә. 3 меңгә яҡын тоткон төрмә камераларынан сығарыла. Азат ителгән тоткондар төрмә ихатаһында митинг ойоштора, нацистар тарафынан ҡулға алынып, төрмәлә тотолған төрлө илдәрҙең граждандары, шулай уҡ немец антифашистары үҙҙәрен азат иткән совет һалдаттарына рәхмәт белдерә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Ә ҡыҙыҡһыныусылар һәр ваҡыт булды.Ноғман ағай тыуған яғына ҡайтҡанда, осрашыуға килеүселәр халыҡ араһынан уның ауылда йәшәгән ҡыҙын эҙләнеләр, уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәрен ситтән генә күҙәттеләр...*



**Башҡорт прозаһының алтын бағанаһы Ноғман Мусин вафат булғандан һуң уның иҫтәлегенә Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала ойошторолған Хәтер кисәһендә яҙыусының ейәне Тимур Ғарифуллин: "Беҙҙең бурыс - олатайымдың әҙәби мираҫын өйрәнеү, киләсәк быуынға еткереү. Уның исемен мәңгеләштереү өсөн ҡулыбыҙҙан килгәндең барыһын да эшләрбеҙ", - тип сығыш яһағайны. Түңәрәк өҫтәл артындағы йылы һөйләшеү хаҡында "Киске Өфө" гәзитендә "Ноғман Мусин феномены" исемле мәҡәләм донъя күргәс, бик күп шылтыратыуҙар, "Бәйләнештә" селтәре аша иҫәпһеҙ хат-хәбәрҙәр алдым. Мәҡәләне уҡыусыларҙы ҡыҙыҡһындырған һорауҙарҙың асылы ошолай ине: Ноғман Мусиндың ейәне бармы ни? Кем ул? Ниңә быға тиклем ул турала бер ҙә яҙманылар?**

**...**Ауыр һорау. Ноғман ағайҙың тәүге ғаиләһендә ҡалған ҡыҙы Нурсилә апайҙың яҙмышын, уның балаларын - яҙыусының ейәндәрен яҡындан белеүселәр өсөн бигерәк ауыр. Атайһыҙ үҫеүҙең ғазаптарын үҙ иңендә татыған, аҫарҙарендә береһенән-береһе ҡатмарлыраҡ яҙмыштар һүрәтләгән дәрәжәле яҙыусының үҙенә лә еңел булмағандыр. Шәхси аса һорау биреүсе булманы. Тормоштоң әсеһен-сөсөһөн татыған шаран-яран асылып бармайҙар шул ул, урттары тулы ҡан булһа ла кеше алдында төкөрмәйҙәр, теш ҡыҫып түҙә беләләр... Беҙ ҙә тынып ҡалдыҡ. Күҙҙәребеҙ - Нурсилә апайҙа. Бәләкәй генә буйлы, ҡаҡса ғына көүҙәле ауыл ҡатыны. Яурындарына, буй-һынына етемлек мөһөрө де...", - тип башланы ла һүҙен, үҙен атайҙары эргәһендә үҫкән һеңлеләре менән тиң ҡуйып һөйләп алды ла китте. Атайһыҙ үҫкәнен иҫкә төшөрөп, байрамды боҙоп, Ноғман ағайҙы үпкәләтеп ҡуймағайы, тип ҡурҡып ултырған барыбыҙ ҙа еңел һулап ҡуйҙыҡ. Ҡыҫҡа ғына телмәрендә уның ябайлығын да, сабырлығын да, итәғәтлелеген дә, аҡылын

# АТАЙЛЫ БУЛҒЫМ КИЛЕП ЙӘШӘНЕМ

тормошона ҡағылған һорауҙарҙан ҡаса алмаһа ла, тәүге ғаиләһенә ҡағылғандарын һәр саҡ ситләтеберәк үтте бит Ноғман ағай, хатта үҙен яҡындан белеүселәргә лә үҙе һөйләгәндән артығырағы менән ҡыҙыҡһыныурға рөхсәт итмәне.

Ә ҡыҙыҡһыныусылар һәр ваҡыт булды. Ноғман ағай тыуған яғына ҡайтҡанда, осрашыуға килеүселәр халыҡ араһынан уның ауылда йәшәгән ҡыҙын эҙләнеләр, уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәрен ситтән генә күҙәттеләр... 90 йәше тулыу айҡанлы үткәрелгән юбилей сараларында ошо ҡыҙыҡһыныуҙарҙың шаһиты булырға тура килде миңә лә. Бына ул үҙ ҡулдары менән Ноғман Мусин исемен йөрөтәсәк мәктәптең алтаҡтаһын аса, мәктәп алдында шулай уҡ үҙ исеме менән йөрөтөләсәк аллеяға ағас ултырта, Йорт-музейында үҙе үк экскурсия үткәрә. Эргәһендә - ҡайҙа барһа ла уны хәстәрләп-бәпләп оҙатып йөрөүсе ҡыҙы Гөлшат апай. Өфөнән килеүсе яҙыусы-журналистар миңә: "Ағайҙың оло ҡыҙын күрһәт әле", - тип шыбырлайҙар. Ситтә генә уңайһыҙланып, яңғыҙы ғына баҫып торған Нурсилә апайға ымлайым. Хәйер, ул, төртөп күрһәтеүсе булмаһа ла, әллә ҡайҙан танылып тора: Ноғман ағайҙың үҙе генә! Килгән ҡунаҡтар араһынан бер ҡыйыуырағының: "Әйҙәгеҙ, эргәһенә барайыҡ, һөйләшеп ҡалайыҡ", - тип әйтеүе булды, Нурсилә апайҙың эргәһенә барып та баҫтыҡ.

- Нурсилә апай һеҙ булаһығыҙмы?

- Эйе. Мин булам.

- Ноғман ағайҙың ҡыҙымы?

- Эйе. Алай-былай түгеел (ошолай һүҙып әйтте), законлы никахынан тыуған тәүге ҡыҙы.

Нурсилә апайҙың һәр һүҙгә баҫым яһап, ҡаты ғына итеп яуап биреүенән әле башланмаған да һөйләшеүгә нөктә ҡуйылғанын аңланыҡ - башҡа баҫылған. Хатта аяҡтарына тиклем баҫыр ер эҙләп ыҙалаңған төҫлө. Сәсе ҡүптән ағарған шикелле, эйәк осона килешле генә итеп бәйләгән яулыҡының аҫтынан күренеп торған маңлай сәстәре араһында бер бөртөк тә ҡараһыу һиҙат юҡ. Ошо аҡлыҡтан уның ҡуңырт йөҙөнә яҡтылыҡ бөркөлә, ҡараштары нурлана. Уңайһыҙ тынлыҡтан ҡотолорға теләпме, әле беребеҙҙе, әле икенсебеҙҙе күҙҙән үткәреп, йылмайырға тырыша, ә үҙе йәшкәҙәгән күҙҙәре менән беҙҙең яурындар аша кемделәр күҙәтә. Шул саҡ барыбыҙ ҙа үтә лә таныш тауыштан тертеп китеп ҡалабыҙ:

- Нурсилә ҡыҙым да бында икән!..

Ноғман ағай, яйлап ҡына атлап килеп, оло ҡыҙын бер ҡулы менән ипле генә итеп яурындарынан ҡосаҡлап, яратып алды. Гөлшат апай, атаһын һәр ваҡыт оҙатып йөрөгән кесе ҡыҙы, уларға аралашырға мөмкинлек бирергә теләгәндәй, алғараҡ сығып баҫып, ҡайһы аралалыр беҙҙең янға йыйылған ауыл ҡатындары менән һөйләшә башланы. Һәр береһен таныпп, исемләп өндәште.

Шул саҡ барыбыҙҙы ла Мәҙәниәт һарайына саҡырҙылар. Ноғман ағай үҙен оҙатып йөрөгән рәсми төркөм менән алдан төштә, улар артынан - кәләмдәштәре, журналистар, дуҫтары, туғандары, ауылдаштары. Бәләкәй генә көүҙәле Нурсилә апай халыҡ араһында юғалып ҡалды...

**...**Тантана барышында Нурсилә апайҙы сәхнәгә саҡырып сығарҙылар. "Өс ҡыҙҙың атаһы ул минең әтейем (ҡолғоналар "әтей" тип һөйләшә). Өсәү инек, хәҙер икәү ҡалдыҡ инда тойомланыҡ. Үҙ ҡулдары менән бәйләп эшләгән матур панно бүләк итте ул атаһына, шул арала нимәләр һөйләшеп тә алдылар. Айырым-айырым йәшәргә тура килһә лә, ғүмер буйы йөрәгендә йөрөткәндәр Ноғман ағай ҡыҙын - уның күҙ ҡарашынан, ихлас йылмайыуынан, ғәм халыҡ алдында уны дәпөлдәтеп яратып алыуынан шуны аңланыҡ. Ошо һөйөүен ҡыҫҡырып әйтә генә алманы ниңләр (барыбыҙ ҙа уларҙан күҙҙәребеҙҙе лә алмайынса, шул һүҙҙәрҙе көтә инек), шулай ҙа бар зал Ағайға рәхмәт йөҙөнән кинәнеп ҡул сапты шул мәлдә...

**...**Ноғман Мусиндың тәүге ғаиләһендә ҡалған ҡыҙы тураһында мин тәүге тапҡыр 1992-1993 йылдарҙа ишеттем. 11-се класта яҡташ яҙыусыбыҙҙың тормош һәм ижад юлын өйрәнеүгә арналған дәрестәрҙең береһендә, ҡыҙҙары менән төшкән фотоны күрһәтеп: "Фәрзәнә, Гөлшат исемле ҡыҙҙары бар", - тип таныштырам. Уҡыусылар араһында ҡолғоналар ҙа бар. Шуларҙың береһе: "Уның ҡыҙы өсәү. Оло ҡыҙы Ҡолғонала йәшәй", - тип әйтеп һалмаһынмы! Нимә әйтергә белмәй, баҙап ҡалдым. Мин яңылышаммы, әллә улмы? Аптырауҙан, асҡан ауыҙымды ябып та өлгөрмәгәнмендер, ул ҡолғоналарға ғына хас ярһыулыҡ менән Ноғман ағайҙың тәүге ғаиләһендә тыуған ҡыҙы Нурсилә апай, ул апайҙың хәҙер инде үҙенең өс малайға әсәй булыуы, малайҙарының исемдәренә тиклем белеп, теҙеп һөйләне лә бирҙе. Ныҡ итеп аптырауымды күргән егеттең һуңғы һүҙе миңә хөкөм һымаҡ яңғыраны:

- Һеҙ белмәй инегеҙме ни? дерелер", - тигәнерәк һүҙ һөйләп, дөйөмләштереп йомғаҡлап ҡуйҙым һөйләшеүҙе.

Дәрес тамамланғас, ҡыҙыҡһыныуымды еңә алманым, Ҡолғона ауылы егеттәрен алып ҡалдым.

- Ә һеҙ ул апайҙың Ноғман Мусиндың ҡыҙы икәнлеген ҡайҙан беләһегеҙ?

- Ниңә белмәй ти! Беләбеҙ. Уны бөтә Ҡолғона белә.

Юғары класс уҡыусылары бит инде улар, үҫкәндәр, барыһын да аңлайҙар. Бөтә Ҡолғона белгән хәбәрҙе улар ҙа белә булып сыҡты. Етмәһә, Ноғман бауайҙарының (был да ҡолғоналарҙың һөйләше) ейәндәре менән бергә уйнап үҫкәндәр.

Улар ауыҙынан сыҡҡан "ҡыҫҡырып һөйләргә ярамаған" һүҙҙе тыңлап торһам да, ниңәләр, яҙыҡ эш эшләгән һымаҡ тойманым үҙемде. Ниндәйҙер изге бер сергә ҡағылғандай булдым: Ноғман ағайҙың тағы бер ҡыҙы, ул ҡыҙҙың өс малайы - Ноғман Мусиндың ейәндәре бар! Ниңә яҙыҡ булһын ул!

**...**Ошо сер күңелемдә байтаҡ йылытып йөрөнө. Бер аҙҙан тағы ла шул сергә ҡағылырға форсат тейҙе. Көтмәгәндә, өй телефонына Ноғман ағай шылтыратты (ул заманда кеҫә телефоны юҡ ине әле):

- Бик ҙур йомошом бар ине һиңә, Ғәлиәкәй (ул миңә һәр ваҡыт шулай өндәшер ине). Гимназияға ейәнемде урынлаштырырға кәрәк ине.

- Һеҙҙең ейәнегеҙ бармы ни, Ноғман ағай? (Теге сер ауыҙҙан сыҡты ла осто). Тик Ноғман ағай һүҙҙе ҡыҫҡа тотто:

- Марат Ғарифуллин тигән малай килер һиңә. Кейәү менән һөйләш тә (кейәү тигәне -

Уҡытыусы булараҡ, көтмәгәндә килеп тыуған был унайһыҙ хәлдә ипле генә итеп туктатырға тейешлегемде аңлайым. "Пушкин, Есенин, Достоевский, Жуковский һымаҡ рус классиктарының икенсе, өсөнсө ҡатындарынан тыуған балалары хаҡында уҡығанығыҙ барҙыр. Беҙ уларҙың яҙмышын нисек бар, шулай ҡабул итеп өйрәнгәнбеҙ. Ә беҙҙең халыҡ, бигерәк тә күренекле шәхестәребеҙ, биографияларындағы сетерекле хәлдәрҙе ташҡа яҙып бармай. Үҙҙәре өндәшмәгәс, башҡаларҙың да ул турала һөйләргә хаҡтары юҡ һымаҡ. Шуға күрә беҙ ҙә был мәсьәләне тарих хөкөмөнә ҡалдырайыҡ. Киләсәк Ноғман Мусиндың ижадын уҡыр, биографияһын өйрәнер, был хәлгә лә асыҡлыҡ индерер", - тигәнерәк һүҙ һөйләп, дөйөмләштереп йомғаҡлап ҡуйҙым һөйләшеүҙе.

минең тормош иптәшем, гимназия директоры Әлфис Фәйзуллин), хәл итәйек әле ошо мәсьәләне.

Мәсьәлә, әлбиттә, ыңғай хәл ителде, тик теге малай килмәне лә ҡуйҙы. Бер нисә көндән Ноғман ағай йәнә шылтыратты:

- Һеҙҙә уҡыһа, артабан уҡырға инеп китеүе еңелерәк булмаҫмы, тигәйнем дә, теге шилма малай ауылға ҡайтҡан да киткән.

Артығын төпсөнөргә унайһыҙландым. "Ә ниңә Рәми Ғарипов гимназияһына бирмәйһегеҙ уны? Өфө әүрәтер ине, бәлки. Эргәгеҙҙә булыр ине", - тип әйтергә батырсылыҡ иттем шулай ҙа. Ноғман ағай көрһөнөп кенә ҡуйҙы: "Тормошта күп нәмә һин теләгәнсә генә булмай шул, Ғәлиәкәй...", - тип һүҙҙы ниндәйҙер етди һүҙ башларға йыйынған кеше кеүек. Тик артабанғы ауыр тынлыҡты икебеҙ ҙә боҙа алманыҡ. Күңелемдә өйкәп йөрөгән әллә күпме һорауҙар тел осомда торҙо ла ҡалды.

Унан һуң да яҡташ ҡына түгел, мәктәптәш яҙыусымдың юбилейҙарына сценарийҙар яҙғаным, алып барыусы булғаным, ҙур залдарҙа уның менән осрашыуҙар үткәргәнем булды - асыҡтан-асыҡ һөйләшергә ҡыйыулыҡ етмәне. Һорауҙар ваҡытында бирелмәне, шуға яуаптары ла кисектерелә килде. Ул - һөйләмәне, беҙ - һорамаҡ. Яҙыусының бәхетле һағышы инеме ул, һағышлы һыҙланыуы инеме уның оло ҡыҙы һәм ул ҡыҙҙың әсәһе - үҙе генә белгән сер булып, мәңгелек йортона үҙе менән бергә китте...

**...**Ошо хаҡта уйлана-уйлана үтәм Ишембай-Ҡолғона араһын. Юлдаштарым да тап ошо хаҡта уйлай кеүек. Уйҙарыбыҙ бер тирәлә уралһа ла: "Ниңә ҡыҙы тураһында үҙе яҙып ҡалдырманы икән Ноғман ағай?"- тигәнен ҡысҡырып әйтмәйбеҙ. Ҡысҡырып, уның теге йәки был осрашыуҙарҙа әйткән һүҙҙәре, йәш ҡәләмдәштәренә биргән кәңәштәре, үҙенә талаптары, ижади эш процесына мөнәсәбәте хаҡында һөйләшәбеҙ... Былтыр, элекке йыл Өфөнән килеүселәр байтаҡ ине, быйыл башлыса "Ағиҙел"дәр генә килде. Аулаҡ. Иркенләп һөйләшергә була. Сараларҙан һуң тороп ҡалып, Нурсилә апай менән һөйләшеп ултырайыҡ әле, тип һүҙ беркетәбеҙ.

Иң тәүҙә мәктәпкә тукталабыҙ. Ноғман Мусин исемен йөрөткән белем усағында йыл да яҙыусының ижадына арналған Кәҙер һәм Хәтер кисәләре үткәрелә. Уҡыусылар ҙа үҙҙәренең индәренә ниндәй бурыс йәткәнын йылдан-йыл яҡшыраҡ аңлай барған кеүек. "Рухыбыҙ солоғо" тип аталған

***Армиянан һуң әтейем бер йыл "Башҡортостан" гәзитендә эшләп ала, унан һуң ауылға ҡайтып, уҡытыусы булып эш башлай. Тап шул йылда танышып, яратышып ҡауышалар. Дүрт кенә йыл бергә йәшәп ҡалалар.***



# ҒҮМЕР БУЙЫ...



быйылғы сарала ауылдаш яҙыусыларының әҫәрҙәренән оҙон-оҙон өҙөктәрҙе ятҡа һөйләп, барыбыҙҙы ла хайран итте улар. Ә телмәрҙәренең таҙалығы! Яҙыусының рухы һаҡланған ер тап ошолай булырға тейеш! Әҙәбиәт кабинетындағы "Был парта артында 1938-1945 йылдарҙа Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Сөләймән улы Мусин ултырып уҡыған" тигән яҙыу беркетелгән парта артында көн дә бер уҡыусы алмашлап ултырып уҡыйҙар икән. "Яҙыусының ижадына ҡыҙыҡһыныу йылдан-йыл арта. Беҙ уның әҫәрҙәрен уҡыуҙы бурыс итеп тә йөкмәтмәнек, уҡыусыларҙа үҙенән-үҙе тыуҙы ул теләк",- тип үҙ фекере менән уртаҡлаша был мәктәптә оҙаҡ йылдар эшләгән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Зәкиә Ибраһим ҡыҙы. Ноғман Мусиндың ейәне Тимур Ғарифуллин олатаһының исемен мәңгеләштереү өсөн ҡулыбыҙҙан килгәндең барыһын да эшләйәсәкбеҙ, тигән һүҙҙәренә тоғро. Өс йыл эсендә мәктәп өсөн матур эштәр эшләп өлгөргән: йыл да беренсе кластарҙы ҡиммәтле бүләктәр менән ҡаршы ала, ун беренселәрҙе шулай уҡ ҡиммәтле бүләктәр биреп, оло юлға оҙата. Мәктәпкә байтаҡ кәрәк-яраҡ алып биргән, үткәрелгән күп сараларҙың даими бағыусыһы ла - ул. Был юлы осрашыуға шахмат комплекттары алып килгән. "Мәктәп уҡыусыларҙың икенсе өйө кеүек булһын, ниндәй мәктәптә уҡығандарын белеп уҡыһындар", - ти ул. Маҡсаты - берәү: Ноғман Мусин исемендәге мәктәп йәшәргә тейеш.

...Мәктәптәге саранан һуң халыҡ яҙыусыһының музейында, китапанала булдыҡ, мәңгелек йортона зыярат ҡылдыҡ. Рухыбыҙ сологоо - әҙәбиәттең мәңгелек ҡарағайы эргәһендә тынып ҡалдыҡ: олуғ яҙыусының тын алышын ишетергә теләүҙән тыуған тойғо барыбыҙҙы ла телһеҙ иткәйне...

Ҡаршыла ғына ҡарағайҙар менән ҡапланған бейек тау. Ноғман ағайҙың рухы яралған ерҙә һәр нәмәгә айырым иғтибар менән ҡарайһың икән. Тауҙарға бағыу менән, йөрәгеңме, йәнеңме терт итеп ҡала. Туктап, йәнә йәнеңде аҡтарып сығарырҙай тынлыҡты тыңлайһың. Быға тиклем ҡаяларға сат йәбешеп күккә үрләгән ҡарағайҙар офоҡ менән тоташа кеүек ине - юҡ, Йыһан менән тоташа икән улар. Тап ошонда, үлгәндәрҙең тәндәре бәүелгән ерҙә башлана икән Йыһан. Йыһан тынлығын һаҡлай икән зыярат та...

...Зыяраттан һуң йыл да ауылдың матур, яҡты, ҙур кафеһында Нурсилә апай атаһының, оҙаҡ йылдар оло яҙыусының ҡатыны булыу бәхетен дә, ғазаптарын да бергә татыған Фәймә инәйҙең, был донъянан бик иртә киткән Фәрзәнә менән Гөлшат апайҙарының рухтарына бағышлап, Ҡөрьән уҡыта. Уға һәм уның күҙҙәренә генә ҡарап торған улдарына, килендәренә ҡарап, үҙең дә һиҙмәҫтән, донъяның фанилығы, был донъяла һәр беребеҙ атҡарырға тейешле бурыстар һәм ғәмәлдәр тураһында уйланаһың. Өс йыл элек тап аят уҡыған мәлдә Ноғман ағайҙың бүләсәре - Тимурҙың бер айлыҡ ҡына Аиша исемле өсөнсө ҡыҙы ҡулдарымда йоҡлап киткәйне. Ана хәҙер ҙур кеше булып, апайҙары менән бергә Ҡөрьән тыңлап, ҡулдарын килештереп кенә бөгөп, доға ҡылып ултыра. "Эй донъя! - тип уйлайһың үҙең дә һиҙмәҫтән, - ошо тиклем бәхетте күрмәй-татымай китеп барҙы Ноғман ағай. Бүләсәрен алдына ултыртып һөйөп өлгөрһә, унан да бәхетле кеше булмаҫ ине лә бит...". Уйҙар уйға ялғана ла, атаһының рухына ошондай ҡәҙер-хөрмәт күрһәткән, уны олатай иткән Нурсилә апайға, олатайҙарының тамырҙарына тоғролоҡ һаҡлаған ейәндәренә рәхмәт уҡыйһың. Яҙмыш еле уларға һаҡһыҙ ҡағылмаһын ине, киләсәк өсөн һаҡлаһын ине ҡарағайҙың ошо тубырсыҡтарын...

...Аят табынынан һуң, һөйләшкәнебеҙсә, Нурсилә апайҙың өйөнә юлландыҡ. Бында ла кеше күп. Алты мөйөшлө өйҙөң төп яғына үтеп, аулағыраҡ булһын тип, ябыҡ ишек яртында һөйләшергә уйлағайныҡ та, ҡатын-ҡыҙҙар йүгереп йөрөп сәй әҙерләй башланы. Нурсилә апай уларҙың береһе менән: "Бына был минең бер туған һеңлем", - тип таныштырҙы. Беҙ сәйер генә итеп бер-беребеҙгә ҡарашып ҡуйҙыҡ: беҙ белмәгән тағы бер ҡыҙы бармы әллә Ноғман ағайҙың? Беҙҙең нинә аптырашҡанды аңлап, Нурсилә апай төҙәтмә индерә һалды:

- Әтейем менән айырылышыуҙарына дүрт йыл үткәс, әнейем Рәшит исемле Ҡолғона егетенә кейәүгә сыға. Уларҙың бер ҡыҙы, бер улы тыуа. Әсәйебеҙ - бер, әтейебеҙ башҡа була инде. Әммә Рәмилә менән Рөстәм ҡустымдан да яҡыныраҡ туғандар юҡ, улар минең өсөн өҙөлөп торалар, ниндәй генә ярҙам кәрәк булһа ла килеп етә һалалар. Рәшит ағайым да һәйбәт кеше ине, мине бер ҙә ҡыйырһытманы, ситләтмәне, үҙ ҡыҙы һымаҡ күрҙе. Мин дә уны үҙ әтейем һымаҡ күреп, "әтей" тип әйтергә теләй инем, тик әнейем: "Һинең үҙ әтейең бар", - тип тыйып ҡуйҙы. Әтейле булғым килеп йәшәнем ғүмер буйы. Ағайлы, яҡлаулы, ҡараулы булып үҫтем, тик "әтей" тип арҡалана ғына алманым. Ғүмере ҡыҫҡа булды Рәшит ағайҙың, ул донъя ҡуйғанда ҡустыма бер генә йәш ине, әнейем өс балаһын яңғыҙы аяҡҡа баҫтырҙы.

Төркөмөбөҙ етәксеһе, "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире Мөнир Ҡунафин, иплегенә итеп, һөйләшеүҙе юллап килгән серҙең юҫығына төшөрөп ебәрә:

- Әнейегеҙҙең исеме... Гәүһәр бит әле. Ниндәйерәк иҫтәлектәр һөйләй ине Гәүһәр инәй Ноғман ағай тураһында? Уларҙың мөхәббәт тарихтары нисегерәк булған икән?

- Армиянан һуң әтейем бер йыл "Башҡортостан" гәзитендә эшләп ала, унан һуң ауылға ҡайтып, уҡытыусы булып эш башлай. Тап шул йылда танышып, яратышып ҡауышалар. Дүрт кенә йыл бергә йәшәп ҡалалар. Яҙышҡас, яҙған әйберҙәрен гәзит-журналдарҙа баҫтырырға теләгәндер, шуға ла күңеле һәр ваҡыт Өфөгә тартылып тик торғандыр инде әтейемдең. Бер Өфөгә барыуында "Ағиҙел" журналына эшкә урынлашып, бөтөнләй унда ҡалырға ҡарар итә. Ул ваҡытта Өфө менән Ҡолғона араһы иртән барып, кис кире әйләнеп ҡайтырлыҡ ер түгел. Ҡәйнәһе менән бергә йәшәп ятҡан әнейемде бауайым барып алған да ҡайтҡан. Донъяла була торған хәл бит - айырылышып ҡуйғандар. Сабый бала менән яңғыҙ ҡалыуы әнейемә еңел булмағандыр инде, мин да травиз булғанмын, әтейемде таптырып илағанмын.

Беренсе класҡа уҡырға төшкәндә, минә матур тун алып ҡайтты ул. Ундай тун минән башҡа бер кемдә лә юҡ, етмәһә, әтейем алып ҡайтҡан тун! Маҡтанып, әллә кем булып кейеп йөрөнөм. Мин һигеҙенсе класты тамамлағас, Ишембайға күстек. Ҡалала матур кейенеп йөрөһөн, тигәндер инде, шул йылды тағы бер тун алып бирҙе ул минә. Тубығында иркәләнеп үҫмәһәм дә, Ноғман Мусиндың ҡыҙы икәнлегемде белеп үҫтем. Гәзит-журналдарҙа мәҡәләләре, хикәйәләре сыҡһа, гәзит адресына "Ноғман Мусинға" тип хат яҙа торғайным. Яуап хаты килмәгәс, илай торғайным. Әнейемдең дә әсенеп илағандарын хәтерләйем. Үҙе барырға уңайһыҙландымы икән, әтейемдең яңы китабы сыҡһа, мине китапханаға ебәрә ине. Китаптарын уҡып илай торғайны. Балалығыма барып, әнейемдең илауын шул китаптарҙан күрҙемме икән, бер көндө өйҙәге бар китаптарын яндырырға тип йыйған сүплекҡә сығарҙым да бәрҙем. Әнейем уларҙы кире индертте. Үҙенә ауыр ваҡыттарҙа ла әтейемә һүҙ тейҙертмәне ул. "Кешелә булмағанды кейеп үҫтең, өй һалғанда аҡсалата ярҙам итте", - тип, яҡшы яҡлап ҡына иҫләне ул һәр ваҡыт.

Үҙем дә балаларымды ауырлыҡ менән үҫтерҙем. Фазлетдиным һәйбәт кеше ине, ул да иртә китте шул. Ул донъя ҡуйғанда, Тимурыма ун ике генә йәш ине. Фазлетдинымдың атаһы ла әүлиә һымаҡ изге йәнле ине, балалары ла шундай һәйбәт булдылар - ярҙамһыҙ ҡалдырманылар. Ҡайным үлгәндән һуң бәләкәй малайҙарына тейешле ошо өйҙө беҙгә биреп ҡуйҙылар. Хәҙер Флүрем, Маратым, Тимурым ҙурайҙылар инде - донъяны улар алып бара. Флүрем генә йыраҡта, йыраҡта булһа ла ҡайтып йөрөй. Маратым (Ноғман ағай Ишембай гимназияһына урынлаштырырға теләгән Марат була инде ул), Себерҙә эшләп йөрөгән еренән Ишембайға ҡайтып төпләнде. Заводта эшләй. Һуң тип тормаһы, уҡырға керҙе, ситтән тороп авиация институтында уҡый.

...Нурсилә апай һөйләгән ваҡытта шуға иғтибар итмәү мөмкин түгел: үҙенә яҡын һәр кемде ул яратып, -ем ялғауы ҡушып һөйләй. Әтейем, Фазлетдиным, Тимур улым, Эльвира киленем, тип һөйләүҙәрен тыңлауҙары рәхәт хатта. Ҡайҙан килә икән уға шундай көс-ҡөҙрәт! Яратылғыһы килеп, "әтейем" тип өҙгөләнгәндә яралдымы икән ошо хис? Әллә Фазлетдинына биреп бөтөлмәгән наҙ-хәстәрҙәре шулай урғыла микән йөрәгенән? Тормош ҡаҡҡылап-һуҡҡылағанда нисек ҡатмаған, биҙрәмәгән икән уның күңеле? Улдары ла уның өсөн өҙөлөп тора. Беҙ һөйләшкән арала ғына ла, әнейенең тауышы саҡ ҡына баҫыла төшкән һайын, шым ғына инеп, ситтән генә ҡарап-күҙәтеп торҙо Тимуры: артыҡ әҫәрләнеп, илап ҡуймаһын, тиҙер инде. Йыһан тынлығын һаҡлаған тауҙар кеүек, улар ҙа гәзиз әсәйҙәрен ҡурсалап, бәпләп кенә торалар.

...Ҡарағайҙай өс улы ҡурсалауында йәшәү әй килешә Нурсилә апайға: ҡарашында тәү күргәндәге һағыш-һыҙланыуҙар төҫһеҙләнгән, барыюғына аҡланмай, үҙен дәрәжәле генә итеп тоторға ла өйрәнгән; башын килешле генә итеп ҡырын һалып көлөп ебәргән сағында хас атаһы ғына булып ултырыуынан йәм табып, ирәйеп ебәрә. Уға ҡараныңмы, уйҙар үҙҙәренән-үҙҙәре Йыһан ҡанундарына барып тоташа. Ошо бәләкәй генә ҡатын Рухыбыҙ сологоноң тамырҙарын һаҡлап ҡалған. Ҡарағайҙың тубырсыҡтары, инде үҙҙәре шытым биреп, тамыр йәйеп ебәргән: Ноғман ағайҙың бер бүләре, биш бүләсәре бар. Йәшәй әле ғорур ҡарағайҙың тамырҙары! Йәшәй! Йыһан ҡөҙрәте түгелме ни был!..

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА.**
**Ишембай районы.**

## Сабит ФАЗЛЫЕВ

# БӨРСӘ



* * *

...Ғәлим, үткәндәрҙе хәтерләп, яҙмышы менән уйнаусыларҙы күҙәтте. "Алһалар ғына ярар ине, - тип мейеһен сүкене бер үк уй. - Күрһәтер инем ауылдаштарға негоденды..."

- Килолай йыйған хәстрүш, - тип зитына тейҙе "һонтор", ҡағыҙҙарын шыптырлатып, көтмәгәндә әллә призывникты йәлләне, йылмайып, йомшаҡ өҫтәне:

- Әйҙә, килограмм өҫтәп, берәй командаға яҙайым да, повар булып булһа ла йөрөп ҡайтыр.

Сибәркәй, ҡыйғас ҡаштарын матур төйөп, баш ҡағып йөпләне. Шул мәлдә йөҙө яҡтырған Ғәлим ҡарамаҡҡа йәмһеҙ ҡатынды ҡосаҡлап үпкеһе килде. "Ауыҙыңа бал да май", - тип мейеһенән атаһының һүҙҙәре ҡыйылып үтте, һалынып төшкән яуырындары ҡалҡынып, ҡаҡ күкрәге кирелде.

* * *

...Хәрби состав ал-ял белмәй Алыҫ Көнсығышҡа ашыҡты. Станцияларҙа "һатып алыусы" офицерҙар "байлыҡтарын" эйәртеп төшә барҙы.

Тәғәйенләнгән хәрби гарнизонға еткәнсе, теүәл бер аҙна үтте. Ғәлимдәрҙе тайга эсендә урынлашҡан танк батальонының казармаларына тараттылар. Гарнизон Ҡытай сигенән алыҫ түгел йәйелгән, тәүлек әйләнәһенә хәрби әҙерлектә көн итә, шул тарафтан көтөлгән һөжүмгә ҡорос ҡалҡан икән.

Тәүге көндән үк әрме тормошо тәүлек әйләнәһен ялмап алды. Сәғәт алтынан "подъем", ялһыҙ илле минут йүгереү, политуҡыуҙар, көндөң икенсе яртыһында танк төҙөлөшөн өйрәнеү, киске аштан һуң өҫ-башынды тәртипкә килтереү, күҙ йомоп аҫҡансы үткән төн. Бербереһенә һыу тамсыһылай оҡшаған ялтыр башлы йәш һалдаттар, һарыҡ көтөүе кеүек, ҡайҙа ҡыуалар - шунда йүгерҙе. Көтмәгәндә инде повар булырға килешкән Ғәлимгә водитель-механик итеп танытма тотторҙолар. И-и-и, һалдат бер башҡа үҫтеме ни, шатлығы эсенә һыйманы, ысын танкист буласаҡ бит ул! Тик батальонды тулыландырасаҡ яңы көстәр менән танышҡанда һалдаттар артынан Өфөгә ебәрелгән офицерға командирҙан ҡәҙимге эләкте. Иң артта баҫып торған Ғәлимде абайлағас та уҫлаптай полковник ҡул аҫтындағыға екерҙе:

- Был бөрсәнән йүнлерәген тапманыңмы?

Офицер, аптырағандай, берсә командирына, берсә Ғәлимгә ҡарап алды ла, аңлайышһыҙ аҡланды:

- Иптәш полковник, һуң, тракторға таныҡлығы бар, тәжрибә тупланым, ти, кәүҙәһе лә йәтеш кенә, люктан иркен үтерлек...

Былайырағын көтмәгәйне хәрби хеҙмәткә ынтылған егет, тағы нимәлер һөйләнде полковник, ишетмәне, ҡолағы тоноп, башы шауланы, борсолдо: "Ҡушамат йәбештереп ҡуйҙы был миңә..."

Иртәгәһенә бөтә казарма уға "Бөрсә" тип кенә өндәшә ине. Хатта киске тикшереү ваҡытында взвод командиры урынбаҫары, әллә юрамал "курсант Бөрсә" тип ыс-ҡындырҙы, геү килеп көлөшөү аҫтында төҙәтергә ашыҡты. Баҡһаң, командирҙары офицерҙарға ла ҡушамат тағып бөткән, йыш ҡына фамилияларын "онота" икән. "Хужа ниндәй - ғаиләһе лә шундай" - ҡыҙыҡ, атаһының һүҙҙәре иҫенә төшә лә тора, әллә аҙым һайын осраған алйотлоҡто мәҡәлдәр менән баҫырға тырышамы?

Бойороҡто ҡабул иткәндән һуң ҡайҙа килеп эләккәндәрен төшөндө йәш һалдаттар, "дедовщина"ның ояһы ине бында. Яҡлау эҙләү тураһында уйлама ла, һалдаттар араһындағы шундай мөғәмәлә комсостав тарафынан өнһөҙ генә хуплана ине. Батальондың үҙ иерархияһы: яңы килгәндәр - духтар, ярты йыл хеҙмәт иткәндәр - йәштәр, йыл тултырғандар - черпактар, йыл ярымлыҡтары ҡарттар тип атала икән. Аҫтағылар өҫтәге һәр баҫҡысҡа буйһона. Командирҙарға "ҡартлыҡ" ҡулай, уставтан тыш аралашыуҙар тәртип өсөн кәрәк, имеш. Сәйнәүҙәренсә, комбаттың Мәскәүҙә әшнәһеме, сыбыҡ осо туғанымы юғары даирәләрҙә етәкселек итә, шуға уның башбаштаҡлығына бер ниндәй ҙә кәртә юҡ.

* * *

Рота старшинаһы прапорщик Дьяков төрлө ярыш үткәрергә ярата. Бер көндө өсөнсө взводты Ленин бүлмәһенә йыйып, автоматты һүтеп ҡорорға, йәштәрҙең һәләтен тикшерергә булды. Ғәлим НВП дәрестәрендә ҡорал менән эш итергә ныҡ таҫылланғайны, взводтың ғәжәпләнеү ауазы аҫтында егерме һигеҙ секундта өлгөрҙө. Китте бәхәс, тегенеһе былай түгел, бынынһы дөрөҫ булманы, ҡоралды әйләндерҙеләр, етешһеҙлек эҙләп шауланы бүлмә. Ҡабатлап күрһәтте йәш һалдат, аһ иттеләр, уҙырға маташтылар, әммә береһе лә уға еткерә алманы. Шунда старшина тылсымлы һүҙҙәрен еткерҙе:

- Нимә, ҡарттар, танауығыҙҙы һөрттөмө һөтимәр?

Отбойҙан һуң аңлаттылар прапорщик һүҙҙәренең мәғәнәһен, "ҡарттар" бәҙрәфкә саҡырып, уратып алды.

- Йә, салага, беҙҙе старшина алдында хурларға булдыңмы? - Айыуҙайы ҡапыл ҡы-рыйҙан бөйөрөнә сөйҙө. Ғәлим, тубыҡтан бөгөлөп, таш иҙәнгә ялпашҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Икенсеһе араларына уҡталды.

- Үлтерәһең бит, Серега. Былай ҙа ҡойолоп төшөргә тора.

- Артабан да шәп булып ҡыланһаң, инвалид булып ҡайтып китәһең! - тип ыҫылданы Сергей.

Ғәлим карауатына саҡ етеп йығылды. Өс көн ҡан һейеп йөрөнө, әммә берәүгә лә һиҙҙермәне. Санчасҡа ла барманы, төндәрҙе һыҙланып үткәрҙе. Шул ваҡиғанан һуң бик ғәжәпләнде егет, командирҙарына сәйерһенеп ҡараны: "Тырышып, өлгөлө хеҙмәт иткән һалдатты маҡтарға тейештәр ҙә баһа". Ләкин бер нәмәгә ҡарамай, үҙен күрһәтергә булды, барыһынан өҫтөн булырға ҡыртышты. Сафта атлау әҙерлегендә лә һынатманы ул, шаҡылдата баҫып, һәр аҙымын теүәл башҡарҙы, уңыш шауҡымынан танауҙы өҫкә сөйгәйне лә, асыулы ҡараштарҙан шөрләп, аяҡ осона текләне. "Калаш"тан атҡанда ла пуляларҙы сәптең ҡап уртаһына һендергәйне, мәргәнлеге өсөн төндә түләргә тура киләсәген иҫләп, күҙ йәшереп, иренен ҡымтыны. Ауыл малайы бит ул, тракторҙың һәр шөрөбөн тотоп ҡараған кеше, ҡаланыҡылар алдында өҫтөнлөгө бар. Техниканың төрлөһө менән идара итеп шымарған кешегә нимә инде, ҡырҡ тонналы танкты уйынсыҡтай өйрөлтөп, оҫта маневрҙар яһап, хеҙмәттәштәрен көнләштерһә лә, инструкторҙар күрмәмешкә һалышты. Люкты асып төшкән саҡта "ҡарттар"ҙың ҡара болот ҡаплаған йөҙҙәрен шәйләп, ул еңеү ярһыуынан тиҙ һыуына ине.

Шундай көндәрҙең береһендә Өфөнән сиккә тиклем станцияларҙы һанаған хеҙмәттәштәре Ғәлимгә ризаһыҙлыҡ белдерҙе. Бында "һөтимәр"ҙәр өсөн яҙылмаған закон хөкөм һөрә: берәү өсөн башҡалар яуап бирә, башҡалар өсөн берәү яуап тота. "Нимә осонаһың, итек башындай кәүҙәң менән шәп булып ҡыланаһың, һинең өсөн беҙгә эләгә?" - тип ирен турһайтты тегеләр. "Ҡулығыҙҙан килһә, һеҙ ҙә маташығыҙ", - тип ҡаршы телләште. "Ҡуй әле, кәпәренмә, турникта тоҡ һымаҡ аҫылынып торғаныңды оноттоңмо?" - тигәстәре, уйлана төштө. Турникта күтәрелеү - ыҙа, унды күтәрелһәң, ун бишкә еткереү бурысы ҡуйыла, артабан һорау арта, сер-жанттарҙың ҡайыш айылдары күптәрҙең оса иттәрен күгәртте генә. Ырата алманы Ғәлим турникта, бала саҡтан шуны яратманы. Ә тегеләргә-әә, бирҙе Хоҙай, үсләшәләр, арҡаһын яндырған айыл эҙҙәре оҙаҡ һыҙлай ине.

* * *

Офицерҙарҙың хуплауы аҫтында "дух"тар иң ауыр эштәргә егелде. Көн аша ашханаға нарядҡа баҫыу, төнө буйы картуф әрсеү, казарма иҙәнен һабын менән йыуыу, часть биләмәһен таҙартыу - барыһына ла йәш һалдаттар түҙҙе. Көндөҙ танктар боксында "ҡарттар" төрлөсә кәмит ҡорһа, кистәрен йоҡо бүлмәһендә тамашалар дауам итте. Күмәк хахылдауҙар аҫтында "духтар" "вождение" үтә, йәғни карауат аҫтынан шыуышып йөрөй, иҙән уртаһында ултырғысҡа баҫып ҡатмарлы физик күнекмәләр үтәй. Иң ҡаныҡҡандары - Ғәлим, уға дегәнәктәй йәбештеләр. Эйе, эйе, хас та картуфлыҡ ситендә үҫкән дегәнәк, балаҡҡа бер ҡаҙалһа, ысҡынмай. Ҡайҙа ғына пәйҙә булмаһын, уны ҡыҙыл сепрәккә үсеккән үгеҙҙәй ҡаршы алалар. Офицерҙарға тиклем егетте үҙһенмәй. Батальон командиры менән осрашҡандарында устав ҡушҡанса честь бирһә, полковник Ковалев яуапҡа теләмәй генә козерогына ҡағыла, янынан ытырғанып үткәндәй. Ҡайҙан уға шундай ҡараш? Шулай шөкәтһеҙ булып күренәме икән ни? Һалдат аңламай, аптырағандан өҫ-башын тикшерә, һуң, таҙа ла йөрөй, кейеме үтекләнгән, кирза итеге көҙгөләй ялтырай. Төндәрен арыуына ҡарамаҫтан, уйланып, керпек тә ҡаҡмай, әйләнеп-тулғана, һорауҙарына яуап эҙләй. Ауылы иҫенә төшә.

Һарайҙарында бер ҡыш кәзә сирләне, эсе китеп, хәле мөшкөлләнде. Төрлөсә һауыҡтырып ҡаранылар - файҙаһыҙ. Хәлһеҙләнгән хайуанды иптәштәре дөп-дөп һөҙә, меҫкенең йыш тәгәрәй, ҡалҡына алмай ята. Әмәлһеҙҙән ситләтелгән кәзә мөйөшкә барып һыйына, кәртә буйлап тәнтерәкләп ҡаса, тегеләре уны эҙәрлекләй, ҡыуалап етеп, ураҡтай мөгөҙҙәре менән тағы дөмбәҫләйҙәр. Көн дә шулай дауам итте, ауырыу кәзә аяҡ һуҙмайынса ҡуйманы иптәштәре. "Мин дә шул бахыр кәзәгә оҡшағанмын да баһа. Ярай, малдың аҡылы юҡ, ә былар әҙәми зат- кешелек сифаттарына эйә йәндәр. Ниндәй генә булһам да, бит уларҙың хәрби иптәше, танк экипажының бер ағзаһы, хәрби антҡа тоғромон, хатта күптәргә үрнәк булырлыҡмын", - тип ғәжәпләнә һалдат.

Уйлана торғас, Ғәлим һорауҙарына яуап тапҡандай булды. Килгән көндө үк комбат үҙе ауылдағы кәзә хәленә ҡуйҙы уны, ҡушамат йәбештереп, башҡа һалдаттар алдында кәмһетте, файҙаһыҙ бөрсәгә тиңләне. Етмәһә, батальонда сит кеше икәненә ишараланы. Башҡаларға етә ҡалды, полковниктың һүҙҙәрен тиҙ эләктереп алдылар. Хәҙер барыһы ла уға, "Эй, Бөрсә" тип кенә бойора. Эш буйҙа шул, ҡартатаһы үҙенсә бөгөп ҡуйһа ла, бөтә бәлә шунда. Политуҡыуҙар ваҡытында йәнәш һалдаттың яҙғанына күҙ һалды, ә унда-а-а, хәрефтәре сатай-ботай, ылғый хата. Бер ҙә уға, наҙанһың, фәлән-фәсмәтән, тип бәйләнгәндәрен күргәне юҡ, аптыраҡ!

Эх, былай итеп күҙ алдына килтермәгәйне бит ул армияны, бандиттар ояһымы ни? Аҙым һайын мыҫҡыллауҙар, кәмһетеүҙәр, йәберләүҙәр - ахыры бармы? Күҙҙәренә йәштәр төйөлә Ғәлимдең, үҙен йәлләй, көсһөҙлөгөнән нәҙек бармаҡтары карауаттың һыуыҡ тимерен ҡыҫа. Икһеҙ-сикһеҙ дала уртаһында үҫкән яңғыҙ ағастай тойҙо үҙен. Таяныр кешеһе лә юҡ бит уның, ҡурсалаусы яҡындары бик алыҫта, бындағы хәлдәрҙе улар белмәй, сөнки хаттарында һалдат тыныс хеҙмәтен һүрәтләй. Командир-атай ҙа яҡлашмай һалдат-улын, илен, халҡын һаҡлаусыны ҡыйырһыттыра. Күкрәгендә утлы шар булып асыу ҡайнаны Ғәлимдең. Тамағына тығылған төйөрҙө саҡ йотоп, әшәке донъянан ҡасҡандай, одеалына бөркәнде. Күҙҙәрен йомоп, тыуған ауылы буйлап гиҙҙе. Туғандарын ныҡ һағынды ул. Сәй артында ата-әсәһе уны йәлләп уфтаналыр әле, һағынып, көн һанайҙарҙыр, йә булмаһа, бала саҡ шуҡлыҡтарын иҫкә алаларҙыр. "Ә Гөлсирә? Гөлсирә... Ҡыҙ уны уйлаймы икән? Бер генә күрәһе ине, әллә хат яҙып һалырға инде. Йыртып ташлаһа? Юҡ, йыртмаҫ, яҙайым, бәлки көтәлер. Яуап яҙып, фотоһын да һалһа, минән бәхетле кеше булмаясаҡ", - тип уйлап йөрәкһенә егет. Күршеләрен, унан көлгән ауылдаштарын да һағынды Ғәлим, бындағы йүнһеҙ әҙәмдәрҙән кәмһетелгәс, ауылдаштары бер туғандай булып тойолдо.

Башҡаса осонмаҫҡа һүҙ бирҙе үҙенә. Көндәр артынан көндәр үтте. Батальон, элеккесә, үҙ ҡаҙанында ҡайнаны. Буранлы ҡыш үтеп, ер ҡарҙан әрселә башлағас, периметр буйлап һуҙылған танк бокстарын шар асып ҡуйҙылар. Яҙғы ҡояштың йылы, наҙлы нурҙарына бар тәбиғәт ҡыуана. Тайга тултырып ҡоштар сутылдаша, ағастар йоҡонан уянғандай, талғын елгә шыбырлаша, тиртергә тулышҡан бөрө еҫе бокс эсенә таралды. Йәкшәмбе булыуға ҡарамаҫтан, йәш һалдаттар танктар янында эш менән мәшғүл, "гражданка"ға яҡынлаған бер нисә "дембель" тәғәйенләнгән урында тәмәке көйрәтә, "ҡарттар", "Һалдат йоҡлай - хеҙмәт бара" тигән әйтемгә тоғро - бокстың ҡояшҡа ҡыҙған ҡыйығына ятып, әүен баҙарында гиҙә.

**(Дауамы. Башы 1-се һанда).**

✔ *Бына ошо кинәйәләрҙе уҡығас та, килгән шатлыҡ йә, киреһенсә, бәлә-ҡазаның яҡшығамы-яманғамы икәнен белмәүебеҙ, уның фәҡәт Аллаһы Тәғәлә белә икәненә инаныуыбыҙ хаҡында фекерләй башлайһың.*



УЙЛЫҒА - УЙ

**Элегерәк бер никах мәжлесендә булырға тура килгәйне. Ҡоҙалар араһында туҡһан йәштәрҙәге ныҡ ҡына бер ҡарт та бар ине. Оло йәшенә ҡарап, янымда ултырған бер ҡоҙанан: "Бабай, моғайын, һуғыш ветеранылыр..." - тип һорай һалдым. "Юҡ, һуғышта булмаған, - тине ул һәм һүҙен дауам итте: - Ҡырҡ дүртенсе йылдың көҙөндә, хеҙмәткә йәше тулғас та, повестка алған тип һөйләйҙәр. Әммә... шул көндө уны йылан саҡҡан. Хәле шәптән булмағас, егетте район балнисына алып барып һалғандар. Йылан тешләгән яра ҡатмарланып китеп, оҙаҡ ҡына ятҡан ул дауаханала. Ә йүнәлеп сыҡҡас, уны, һис кисекмәҫтән, ниндәйҙер бронле эшкә ҡушҡандар. Шул эшендә һуғыш тамамланғансы эшләп, инде тыныс шарттарҙа ғына әрмегә саҡырылған. Бына шулай, уны һуғыштан, бәлки, үлемдән дә йылан ҡотҡарғандыр..."**

# ЙЫЛАН САҒЫУ ФАЙҘАҒА БУЛҒАН,

## йәки Был хәлдәр - осраҡлыҡмы?



Тағы бер шундай кинәйә бар. Берәүҙең берҙән-бер аты юғала. Эҙләп-эҙләп тә таба алмағас, өмөтөн дә өҙә хужа, әлбиттә, ныҡ ҡайғыра ла. Тик, әмәлгә ҡалғандай, тағы бер аҙ ваҡыттан был ат икенсе бер ҡырағай байталды эйәртеп, хужаһына ҡайта. Хәҙер инде ике атлы булған хужаның шатлығы эсенә һыймай. Бына бит, тигенгә генә юғалып тормаған уның малы! Хужаның еткән улы әлеге ҡырағай атты менгегә өйрәтергә тотона. Шул саҡ, ат тулап китеп, егетте ергә күтәреп һуға, һәм егет аяғын һындыра. Малайҙың атаһы тағы ҡайғыға ҡала. "Әй, әттәгенәһе, ҡураға был ҡырағай аттың килеп инеүе тик насарға ғына булған икән..." Тағы бер аҙҙан илдә һуғыш сығып китә. Йәше еткән егеттәрҙе хәрби хеҙмәткә ала башлайҙар, ә был ҡарттың аяғы һынған улы хеҙмәттән азат ителә... Ауылдаштары был ғаиләгә көнләшә, сөнки күптәренең улдары шул һуғышта башын һала. Ә бабайҙың берҙән-бер ярҙамсыһы булған улы артабан да, аҡһаңҡырап булһа ла, өй хужалығы менән булыша, әлеге аттан алған йәрәхәте өсөн Аллаһы Тәғәләгә шөкөр итә...

Бына ошо кинәйәләрҙе уҡығас та, килгән шатлыҡ йә, киреһенсә, бәлә-ҡазаның яҡшығамы-яманғамы икәнен белмәүебеҙ, уның фәҡәт Аллаһы Тәғәлә белә икәненә инаныуыбыҙ хаҡында фекерләй башлайһың. Үҙ ғүмеребеҙҙә һәр кемебеҙ әленән-әле бына шундай осраҡтарға юлығып торабыҙ бит. Урыҫта ошондай әйтем бар: "Не было бы счастья, да несчастье помогло..."

Минең ҡайным, Арыҫланов Усман, ауылдағы һуғыш ветерандарының иң һуңғыһы булып, 89 йәшендә донъя ҡуйҙы. Уның фронттан яҙған һәм әлегәсә һаҡланған өсмөйөшлө хатында ошондай һүҙҙәр бар: "...Әсәй, беҙ хәҙер Польша ерен азат итеп, нимесәрҙең үҙ ерендә - Берлин ҡалаһынан ҡырҡ саҡрым самаһы алыҫлыҡта торабыҙ. Тиҙҙән был ҡала ла беҙҙеке буласаҡ. Баш осонан снарядтар осоп тора. Мин ошо һуғышта юғалып ҡалһам да, минең өсөн һис ҡайғырмағыҙ. Аллаһ ҡушһа - үленер, ҡушмаһа - йөрөләр Ҡыҙыл Армия еңһен өсөн Аллаһы Тәғәләгә һәр саҡ доға ҡылып тор, әсәй... Яраҡкан улың Усман. Яҙылды 31-се март 1945 йыл".

Был уның фронттан яҙған һуңғы хаты була. Сөнки яҡында шартлаған немец снарядынан ҡаты яраланып - контузия алып, егет тыл госпиталенә оҙатыла. Һуғыш тамамланғас, күптәр илгә ҡайта башлай, ә Усмандан һаман да хат-хәбәр юҡ. Ул саҡта бындай осраҡтарға халыҡ күнегеп тә бөткән булғандыр, күрәһең. Инде ике улына "похоронка" алған әсә - Хөсниямал әбей кесе улын күреүҙән дә төңөлә башлай. Бәхеткә, әсәһен шатландырып, йәй уртаһы үткәс кенә, ҡолаҡтары ла ишетмәгән, һөйләшә лә алмаған Усман бер санитар һалдат оҙатыуында тыуған ауылына ҡайтып төшә...

Уйлап ҡараһаң, бына ошо осраҡта ла һалдаттың ҡаты яраланыуы, бер яҡтан, - насар һымаҡ, шулай бит? Ә инде төптәнерәк фекерләй төшһәк, бәлки, менәрләгән һалдат ғүмере ҡыйылған Берлин операцияһында уның ҡатнашмауына Аллаһы Тәғәлә ошо бәлә-ҡазаны сәбәп итеп ебәргәндер. Йылдар үтеп, ҡайнымдың теле лә асыла, ҡолаҡтары ла ишетә башлай. Икенсе төркөм инвалиды булыуына ҡарамаҫтан, хатта колхоздың алдынғы чабаны булып та танылғайны ул. Ғаиләкороп, һигеҙ бала атаһы булып киткән был кешенең бөгөнгө көндә һикһәнгә яҡын ейән-ейәнсәре, бүләбүләсәре бар...

Бәйғәмбәребеҙҙең с.ғ.с: "Әгәр берәү ниндәйҙер хәлгә тарыны икән, тимәк уға был хәлдән ҡотолоу мөмкин булмаған тип кенә һанау кәрәк. Ә инде кемделер берәй хәл урап үтһә, был кеше менән ул хәлдең булыуы мөмкин түгел ине... Сөнки был - Аллаһы Тәғәлә яҙған тәҡдир. Шуға инанмай тороп, әҙәм балаһы иман килтергәндәрҙән булмаҫ..." - тигән мәғәнәләге сахих хәҙисе бар. Берәй фажиғәнән имен ҡалған кеше хаҡында уның әле әжәле етмәгән тип уйлау кәрәк. Әҙәм балаһының ҡотолоуына сәбәп булырҙай нәмәне лә Аллаһы Тәғәлә әллә ҡасан уҡ әҙерләп ҡуйған, тимәк.

"Шул-шул ваҡытта мин нисек тере ҡалдым икән, мине һыуҙан (йә уттан) тартып алып сығыусы Фәлән кеше ҡайҙан килеп сыҡты икән?.." тигән һымағыраҡ уйҙар кемдәрҙең генә башына килгәне юҡ. "Бирәм тигән ҡолона - сығарып ҡуйыр юлына", тигән әйтем йөрөй халыҡта. Ҙур аварияға осрағандан һуң йә иһә ауыр сирҙән терелеп киткән бәғзеләрҙең "Хоҙай араланы", тигәнен дә йыш ҡына ишетәбеҙ. Аллаһҡа баш эйеп, Уның тәҡдиренә ышанып, Уға һәр саҡ шөкөр итеп, Ислам дине ҡанундары буйынса ғүмер иткән боронғо ата-баларыбыҙҙың лөғәтенә инеп киткән бихисап шундай әйтемдәр уларҙың шәриғәт ҡанундарын тәрән белгән булыуына ишара. Әлеге уттан йә һыуҙан "ҡотҡарыусы" берәй бәндәһен кәрәк ваҡытта юлыҡтырып тороусы ла Аллаһы Тәғәлә бит.

Раббыбыҙ һәр кемебеҙҙең ғүмере ҡасан тамам булырын да алдан яҙып ҡуйғанлығы хаҡында белөйек. "Аллаһ тарафынан яҙылған әжәле ("әжәл" ғәр. - срок) килеп етмәй тороп, бер кем дә үлмәй", тип әйтелә изге Ҡөрьәндең Әл-Ғимран сүрәһендә (145-се аят). Ә инде шул мәлең етте икән, унан бер ҡайҙа ла ҡасып китеп булмай. Сөләймән бәйғәмбәр заманынан килгән бер риүәйәт бар. Белеүебеҙсә, Аллаһы Тәғәлә Сөләймән ғәләйһис-сәләмгә ҡоштар, кейектәр, бөжәктәр телен аңлау һәм уларҙы үҙенә буйһондороу һәләтен бирә. Шулай уҡ уға ендәр, хатта ел дә буйһона. Бәйғәмбәр булараҡ, ул, әлбиттә, фәрештәләр менән дә һөйләшер булған. Шулай бер мәл бер кеше был бәйғәмбәргә килеп: "Бөгөн минә берәү бик яман итеп, асыуланып ҡараны, үлем фәрештәһе булмағайы ул, мин үлемдән ҡурҡам. Мине унан ҡасырып, бик алыҫҡа илтеп ҡуй әле..." - тип мөрәжәғәт иткән. Бәйғәмбәр был кешенең һүҙен үтәгән, Ғифрит (ен) ярҙамында был әҙәмде, күҙ асыпйомғансы Һиндостанға уҡ илтеп ҡуйған. Шунан Сөләймән ғәләйһиссәләм үлем фәрештәһен күреп, унан: "Ни өсөн һин Фәлән кешегә усал итеп ҡараның?" - тип һораған. Фәрештә: "Мин уға асыуланып ҡарамаһым. Аллаһы Тәғәлә иртәгә шул бәндәнең йәнен алыр өсөн минә Һиндостанға барырға бойорғайны. Тик ул һаман бында йөрөп ятҡас, ғәжәпләнеп кенә ҡарағайным..." - тип әйткән. Тимәк, әлеге әҙәмгә тап Һиндостан еренә барып үлергә яҙған...

Ата-бабаларыбыҙҙың "яҙмыштан уҙмыш юҡ" тигән һүҙҙәрен тәфсирләп, иман шартының береһе булған тәҡдир тураһында һүҙ йөрөтә башлаһаң, бәғзе берәү, уйлап та тормаҫтан: "Әй, Аллаһ әллә ҡасан уҡ тәҡдиребеҙҙе яҙып ҡуйғас, нигә шул хәтлем доғалар ҡылырға? Барыбер бер ни ҙә үҙгәртә алмаясағыбыҙҙы аңлата түгелме был яҙмыш тигәндәре?" - тип хаталана. Әгәр ҙә беҙ Раббыбыҙға доға, башҡа ғибәҙәттәр ҡылып ғүмер итәбеҙ икән, тимәк, ошо йәшәү рәүешебеҙ ҙә беҙгә тәҡдир итеп яҙылған...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ИҪКӘРТӘБЕҘ!



# АҘ ҒЫНА ЭСҺӘҢ ДӘ...

**Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығы яңы йылдың тәүге көндәрен алкоголдө артыҡ ҡулланыуҙы иҫкәртеү аҙнаһы тип иғлан иткәйне. Байрамдарҙан, төрлө юбилей йәки туй табындарынан һуңғы осорҙа иҫерткес эсемлектәрҙең зыяны, уның әҙәмтәләре тураһында тағы бер тапҡыр иҫкә төшөрөргә кәрәк. Был хаҡта тулыраҡ БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш баш белгесе, психиатр-нарколог Татьяна СТАРОСТИНА һөйләне.**

➔ **Татьяна Николаевна, иҫерткес эсемлектәр кеше һаулығына ни тиклем зыянлы?**

- Алкоголдең аҙ ғына дозаһы ла зыян килтерә. 200-ҙән ашыу сирҙең уның артыҡ ҡулланылыуы менән бәйле булыуы билдәле, ә төрлө ауырыуҙарға индергән өлөшө 5-75 процентҡа тиклем. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә кешелә үҙәк нервы системаһы зыян күрә, интоксикация фонында аҡыл һәм физик эшкә һәләтлелек кәмей. Ваҡыт үтеү менән бауырҙың кире ҡайтарылмаҫлыҡ зарарланыуы (цирроз, май гепатозы), гастрит, йөрәктең ишемия ауырыуы, иммунитеттың кәмеүе һәм хатта яман шеш ауырыуҙары үҫешә. Гипертониктарға һәм йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары менән сирләгәндәргә иҫерткес эсемлек ҡулланыу ҡәтғи тыйыла.

➔ **2025 йылда насар ғәҙәттәрҙән баш тартырға ҡарар иткәндәргә ниндәй кәңәш бирергә мөмкин?**

- Иҫегеҙҙә тотоғоҙ, никотин - ул химик матдә, ул көслө бәйлелек тыуҙыра, һәм һеҙҙең организмығыҙ унан ситләшергә тейеш. Шуға күрә, сабыр булығыҙ, сәләмәт йәшәү рәүешен башлау өсөн сәбәп табығыҙ, яраҡан көсептәрегеҙҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ һәм улар менән шөғөлләнегеҙ. Никотинның бер нисә аҙнанан һуң психика менән никотин аслығы түгел, ә тәртип һәм психологик комплекстар етәкселек итә. Зыянлы ғәҙәткә кире ҡайтыу теләге барлыҡҡа килгәндә бер стакан таҙа йылы һыу эсегеҙ һәм 3-4 минут самаһы һағыҙ сәйнәгеҙ.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: тәмәке тартыуҙы ташлау ни тиклем ауыр булмаһын, иртәнге сәғәттәрҙә тәмәке тартыусының йүткереүенән ҡотолоу ниндәй рәхәтлек килтергәнен онотмағыҙ.

➔ **Ә электрон тәмәке тартырға яратыусыларҙы нисек бынан баш тартырға күндерә алаһығыҙ? Етештереүселәр уларҙы, киреһенсә, продукция ябай тәмәке менән сағыштырғанда зарарһыҙыраҡ һәм хатта хәүефһеҙерәк тип ышандыра...**

- Күп кенә халыҡ-ара тикшеренеүҙәр киреһен иҫбатланы: электрон тәмәке һаулыҡҡа зыян килтерә, ә уларҙың химик ингредиенттарының етди өлөшө әлегә етерлек өйрәнелмәгән. Әлеге ваҡытта канцерогенлы парҙың организм өсөн бик хәүефле булыуы билдәле. Токсик матдәләрҙең тәьҫире астма, пневмония, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарының ҡыҫкенләшеүенә килтерә. Шуға күрә һәр кешегә аңлы һайлау яһарға кәрәк: организмығыҙҙы ағыуларғамы, әллә сәләмәт йәшәү рәүешен һайларғамы?

**БР һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәте.**

✓ *Рәфҡәт Ҡорбанаев һәм уның улдары ла, ҡыҙҙары ла республика кимәлендә үткәрелеп торған ат ярыштарында ҡатнашмай ҡалмайҙар, һәр ваҡыт призлы урындар яулайҙар.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠУЛЫҢДЫ ДӨРӨҪ ЙЫУ!

■ Кешелектең 95 проценты ҡулын дөрөҫ йыумай. Бары тик 5 процент кешеләр генә гигиена ҡағиҙәләрен теүәл үтәй. Күптәр ҡулды йыуыуға 6 секунд ҡына ваҡыт бүлә, ә ҡурҡыныс бактерияларҙы үлтереү өсөн ҡулдарҙы 15-20 секунд һабынлап, ағып торған һыуҙа йыуырға һәм таҙа таҫтамалға һөртөргә кәрәк. АҠШтың Мичиган университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәрҙән табиптар ошондай һығымтаға килгән. Статистика күрһәтеүенсә, яуап биреүселәрҙең өстән бер өлөшө һабын менән һирәк ҡуллана, ә 10 проценты ҡулдарын бөтөнләй йыумай тиерлек. Ҡатын-ҡыҙҙар ир-егеттәргә ҡарағанда күпкә таҙараҡ булып сыҡҡан.

■ Табиптар әйтеүенсә, ғүмер оҙайлы булһын өсөн сәләмәт йәшәү рәүеше алып барырға кәрәк. Ә бына "Forbes" журналы 100 йәштән уҙған кешеләрҙән һорау алып, уларҙың оҙаҡ йәшәү серен асыҡларға тырышҡан. Баҡтиһәң, 100 йәшлек иң сәләмәт кешеләр Японияла йәшәй икән, сөнки улар йәшелсәне, барыҡты күп ашай. Йомортҡа, ит, һөт аҙыҡтары бында аҙыраҡ ҡулланыла. Мәҫәлән, АҠШ-та йәшәүсе Дэйзи Макфадден уларҙың миҫалына эйәреп, емеш-еләк, балыҡ, йәшелсә менән туҡлана, уға ноябрь айында 101 йәш туласаҡ. Оҙаҡ йәшәүселәр кәңәш итеүенсә, газлы эсемлектәр сәләмәтлеккә зыян килтерә. Уның урынына һыу, мүк еләге һуты, һөт йәки сәй эсергә кәрәк. Ҡәһүә һәм алкоголле эсемлектәр тыйыла. Шулай уҡ ҡайһы берҙә үҙеңә яраткан аҙыҡтарыңды ашарға рөхсәт итергә кәрәк, ти табиптар. Көн һайын нимә менәндер шөғөлләнеү шулай уҡ ғүмерҙе оҙайта. Телевизор алдында ултырыуға ҡарағанда, хәрәкәт итеү күпкә яҡшыраҡ. Баҫҡыстан йәйәү менеү, урамда йөрөп килеү шулай уҡ сәләмәтлек сығанағы икән. Доктор Эрик Раков әйтеүенсә, баш мейеһе лә ял итергә тейеш түгел. Бының өсөн иң ябай ысул булып кроссвордтар сисеү тора. Берәй музыка ҡоралында уйнау ҙа мейене йәш көйө һаҡлай. Оло кешеләр өсөн доғалар уҡыу ҙа кәрәк, был уларҙы тынысландыра һәм оҙайлы йәшәүгә булышлыҡ итә. Психиатр Гэри Кеннеди раҫлауынса, йәштәр менән аралашыу, уларҙы тәрбиәләү шулай уҡ үҙеңде кәрәкле итеп тойорға мөмкинлек бирә.

■ Бал ҡушып сәй эсеү күҙҙәрҙе компьютерҙың насар тәьҫиренән һаҡлай. Табиптар бының өсөн сәйҙе көнөнә өс тапҡыр эсергә кәрәк, тип иҫәпләй. Бал яратыусылар комьютерҙа көнө буйы эшләһәләр ҙә, артыҡ бирешмәйәсәк. Күҙҙәр өсөн бигерәк тә йүкә, ҡандала үләне балы файҙалы. Ғөмүмән, компьютер артында эшләгәндә үҙеңә ял биреп алыу мөһим. Бер сәғәт эшләгәс, мотлаҡ 20 минут ял итергә кәрәк. Тап ошо ваҡытта баллап сәй эсеп алырға ярай ҙа инде, ти табиптар. Ҡандала үләне балы тын юлдары яуырыуҙарынан, баш ауыртҡанда, йоҡлай алмағанда, шулай уҡ йөрәк ауырыуҙарынан файҙалы. Ул коронар ҡан тамырҙарын киңәйтә, ҡан әйләнешен яҡшырта, ҡан баҫымын яйға һала. Йүкә балы йөрәк-ҡан тамырҙары һәм нервылар системаһы ауырыуҙары менән яфаланыусыларға тәҡдим ителә. Ул стресты, көсөргәнеште юҡҡа сығара, матдәләр әйләнешен яҡшырта.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# АТЛЫ, ЗАТЛЫ ХАЛЫҠБЫҘ

**Үтеп барған йылдың һуңғы айының һуңғы көндәрендә Күгәрсен районының Үрге Сирбай ауылында башҡорт атына арналған матур сара үтте. Күпләп йылҡы малы аҫраған, төрлө ат спорты ярыштарында алдынғы урындар яулаған Рәфҡәт Ҡорбанаевтың ғаиләһе, шулай уҡ районды алдынғы фермеры - аттар тәрбиәләүсе Азамат Айытҡолов, район ауылдарынан йыйылған ағинәйҙәр был үҙенсәлекле сараның төп ҡатнашыусылары булды.**






Сал тарихлы Сирбай өс быуаттан артыҡ тарихы булған, башҡорт тарихында үҙенең данлы битен яҙған ауыл ул. Һуңғы ваҡыттарҙа, заман үҙ мөһөрөн һалған күп башҡорт ауылдары кеүек, тынып, юғалып барған мәлендә тағы бер ҡалҡынып, елкенеп алды ул. Тынып ҡалған урамдарҙан милли кейемдәр кейгән тиҫтәләгән ағинәй, шулай уҡ башҡорт милли кейемендәге һыбайлы балалар үтте. Байрамды тамаша ҡылырға сыҡҡандар ҙа бихисап булып, ауыл ысын һабантуй майҙанына әйләнде.

Башҡорт аты байрамы ла юҡҡа ғына үтмәне Сирбайҙа. Үткән быуаттың 70-се йылдарынан бөгөнгө көнгә тиклем Күгәрсен районы, яҡын-тирә райондар һабантуйҙарында ла, Ырымбур өлкәһендәге ат сабыштарында ла егеттәребеҙ беренселекте бирмәй, призлы урындар яулай. Район нимә, Башҡортостан кимәлендә таныта улар үҙҙәрен! Республикала беренсе тапҡыр үткән "Терра - Башҡортостан" бәйгеһендә беҙҙең ауыл малайы Рафаэль Ҡорбанов Гран-при яуланы. Былтыр Баймаҡта нисәмә илдәрҙән, Рәсәй төбәкәтәренән, бөтә Башҡортостандан һыбайлылар ҡатнашҡан "Башҡорт аты" фестиваленда лә ат сабышында өсөнсө урын алды Сирбай егеттәре. Көрәшселәре менән дә дан тота ауылыбыҙ. Милли көрәш буйынса өс Рәсәй чемпионы, унға яҡын республика чемпиондары сыҡҡан ауылыбыҙҙан. Мәҫәлән, 2023 йылда "Башҡорт аты" йыйынында Данил Яхин милли көрәш буйынса үҙ ауырлығында беренсе урын яуланы, былтыр иһә икенсе урынға лайыҡ булды. Рәфҡәт Ҡорбанаев һәм уның улдары ла, ҡыҙҙары ла республика кимәлендә үткәрелеп торған ат ярыштарында ҡатнашмай ҡалмайҙар, һәр ваҡыт призлы урындар яулайҙар. Район кимәлендәге ат ярыштарын йыл да Азамат Айытҡолов үҙе финанслап үткәрә **(һүрәттә)**.

Әйткәндәй, башҡорт атына арналған байрам тураһында ентекләберәк. Сараның тәүге өлөшө Фәниә һәм Сәғит Рәхмәтуллиндарҙың йортондағы үҙҙәре берәмтекләп йыйған боронғо ҡомартҡыларҙан торған музейға экскурсия менән башланды. Ҡунаҡтар бында ат еккеһендә ҡулланыла торған әйберҙәр, хәҙер инде онотолоп барған ҡомартҡылар менән танышты, был ғаилә ағзаларының фиҙаҡәрлегенә, илһөйәрлегенә һоҡланыу һәм рәхмәт һүҙҙәре белдерҙе. Музейға юлланғанда ла, унан сығып, клуб бинаһына барып еткәнсе һыбайлы балалар ҡунаҡтарҙы оҙатып йөрөнө. Ошо түгелме илһөйәрлек тәрбиәһе өлгөһө!

Артабан сара клубта дауам итте. Сәхнә бик матур итеп биҙәлгәйне: ат еккеһендә, һыбай йөрөгәндә кәрәкле ҡорамалдар, йүкәнән үрелгән септә, арҡан-тышауҙар, ағастан яһалған арба тәгәрмәстәре һәм башҡа экспонаттар байрамдың йөкмәткеһенә ишаралап, ҡунаҡтарҙың ҡыҙыҡһыныуына лайыҡ булды. Ҡорбанаевтарҙың төрлө ат ярыштарында яулаған бер өҫтәл тулы бүләктәре - ялтырап торған кубоктар, грамоталар, миҙалдар ҙа, моғайын, уларҙың сәмен ҡуҙғытмай ҡалмағандыр: араларында йәшәй бит ошондай маҡсатлы, тырыш ауылдаштары!

Тамаша барышында башҡорт аттары тураһында тарихи мәғлүмәттәр еткерелде, башҡорт атына дан йырланды, 112-се башҡорт кавалерия дивизияһында һуғыш яуын үткән ауылдаш батырҙар иҫкә алынды. Ауыл клубы мөдире Мөхәмәт Шәрипов үҙе гармунда уйнап, "Аҡбуҙат" йыры менән концертты башлап ебәрҙе. Әйткәндәй, был йырҙың һүҙҙәрен дә, көйөн дә ижад иткән Дамир Әҙелбаев ошо ауылдан сыҡҡан, байтаҡ йырҙар яҙған, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре ине.

Байрамды алып барыусы тамашасыларға, ҡунаҡтарға ла ҡыҙыҡлы хәтирәләре менән бүлешеү форсаты бирелде. Районыбыҙҙың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһын етәкләүсе Гөлфиә Хәсән ҡыҙы Искәндәрова бәләкәйҙән һыбай йөрөп, атаһына ярҙам итеүен, тормошҡа сыҡҡас та ире менән һыбай көтөү көтөүен һөйләп таң ҡалдырҙы. Ул шулай уҡ район ағинәйҙәренең йыл буйына эшләгән эштәренә, осрашыу сараларына йомғаҡ яһаны һәм әлеге байрамды ойоштороусыларға республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының Рәхмәт хаттарын тапшырып ҡыуандырҙы. Уның "Районыбыҙҙа йыл буйы барған "Ағинәй юлы" эстафетаһын 2025 йылда ла дауам итербеҙ", - тигән һүҙҙәре Сирбай ағинәйҙәренең күңеленә бигерәк тә хуш килде: уларҙың ошо башҡорт атына арналған байрамы "Ағинәй юлы" эстафетаһын лайыҡлы тормошҡа ашырыу, артабан башҡа ауылдарға тапшырыу булды бит.

Байрамға Ейәнсура районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе, Үрге Сирбай ауылы ҡыҙы. Нурия Мөхтәр ҡыҙы Ҡунысбаева-Яхина ла саҡырылғайны. Ул Ейәнсура районында йәшәһә лә, тыуған ауылы менән һәр саҡ бәйләнештә. Ул да ауылының тарихы, билдәле шәхестәре тураһында бик күп мәғлүмәттәр еткерҙе, һорауҙарға яуап бирҙе, тыуған ауылы, ауылдаштары менән ғорурланыуын да йәшермәне. Исем ауылы ағинәйҙәре исеменән Зилә Хөсәйенова сығыш яһап, Сирбайҙарға аттарға бағышланған тарихи китап бүләк итте. Мәксүттән килгән Фирүзә апай Фәттахова, сығышы менән шулай уҡ Үрге Сирбай ауылы ҡыҙы, моңло йыры менән, Дөмбәйҙән Рәхимә Самиғуллина аттар тураһында шиғырын һөйләп, күңелдәрҙе күтәрҙе.

Бына сәхнәгә Рәфҡәт Ҡорбанаевтың ғаиләһе саҡырыла. Рәфҡәт менән Анна ғаиләләренең тарихы менән таныштырып, бәләкәйҙән атҡа мөкиббән китеүҙәре, балаларының һәр береһенең - ҡыҙҙарының да, улдарының да атта һыбай йөрөргә өйрәнеп үҫеүҙәре тураһында һөйләне, ҡаҙы яһау серҙәре менән уртаҡлашты. Рәфҡәт үҙенең яҡын туғаны кеүек күргән, гел алға әйҙәп дәртләндереп торған фермер Азамат Айытҡоловҡа ҙур рәхмәттәрен еткерҙе, Азамат та үҙ сиратында Ҡорбанаевтарҙы хуплап, уларға уңыштар теләне.

Фәһемле, күңелдәргә дәрт өҫтәүсе, иҫтәлекле осрашыуҙан ҙур ҡәнәғәтлек алған ағинәйҙәр илгә тиҙерәк тыныслыҡ ҡайтыуын теләп, доғалар ҡылды. "Атлы, затлы халыҡ булып йәшәйек!" тигән теләк менән тамамланды байрам сараһы.

**Гүзәл ҠОТЛОГИЛДИНА.**
**Күгәрсен районы.**

**✓ Тәү ҡарамаҡҡа ҡыҙыҡһыҙ булып тойолған урындың да бер ҡыҙығын табыу мөмкинлеген ысҡындырмағыҙ. Ерҙә ҡыҙыҡ булмаған урындар юҡ: ни бары ҡыҙыҡһынмаған, ҡыҙыҡ таба белмәгән кешеләр генә бар.**



ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ИҢ ЯҠШЫ ОНКОЛОГ




**Ошо арала Сочи ҡалаһында "ПроДокторов" порталының Бөтә Рәсәй премияһын тапшырыу тантанаһы уҙҙы. Илдең иң яҡшы табиптары араһында башҡорт егете Даян Солтанғужин "Иң яҡшы онколог" номинацияһы буйынса Гран-при алды!**

"ПроДокторов" порталы илдең 752 меңдән ашыу табибы тураһындағы мәғлүмәтте берләштерә. Унда теге йә был табиптың ҡайҙа эшләүе күрһәтелгән, пациенттар ошонда уҡ белгестәр тураһында фекерҙәрен асыҡтан-асыҡ яҙып ҡалдыра ала. Даян Баязит улы тураһында әлеге мәлгә 200 самаһы комментарий теркәлгән, араларында бер генә бөртөк тә кире фекер юҡ. Һәр яҙмала кешеләр, ғаиләләр яҙмышы сағыла.

"Әсәйем 70 йәштә, ул күптән онкология менән көрәшә. 2024 йылдың июнендә ул онколог Даян Солтанғужин ҡулына эләкте. Доктор әсәйемә шунда уҡ оҡшаны, ул дауаланыу ысулын бик дөрөҫ билдәләне, иң мөһиме, яҡшылыҡҡа ышаныс уятты. Даян Баязит улы ярҙамы менән әсәйем түшөнкөлөккә бирелмәне, ауырыуҙы еңергә тип маҡсат алды!" тип яҙған бер ҡатын.

Йәнә бер фекер. Уны ир кеше ҡалдырған: "Даян Солтанғужин 2022 йылда ҡатыныма ваҡытында дөрөҫ диагноз ҡуйҙы. Баш мейеһендәге яман шеш ҡатыным йөклө сакта асыҡланды. Бала тыуғандан һуң шеште алыу буйынса операция яһалды. Бер аҙ хәл алғас, Даян Баязит улы ҡатынымды нурлы терапияға йүнәлтте. Хәҙер онколог уны даими күҙәтә. Докторыбыҙ бик иғтибарлы, кешеклекле. Тормошобоҙҙағы ауыр осорҙа тап уны осратыуыбыҙ - оло бәхет".

Л.Д. исемле пациент яҙа: "Даян Баязит улының егәрлелеге һоҡландыра. Иртәнән кискә тиклем пациенттар ҡабул итеүҙән тыш, ул халыҡ өсөн конференциялар ойоштороуға ла ваҡыт бүлә. Ундай сараларҙа кешеләр докторҙарға туранан-тура һорау бирә ала. Ошо конференциялар ярҙамында яман шеште башланғыс стадияларҙа асыҡлау осраҡтары артты. Мәҫәлән, тире яман шеше генә өс кешелә асыҡланды".

Даян Солтанғужиндың бала сағы Башҡортостандың Йылайыр, Хәйбулла районында үткән. Өфө дәүләт медицина университетын тамамлағандан һуң хеҙмәт юлын Әбйәлил үҙәк район дауаханаһында башлаған. Әлеге мәлдә Силәбе өлкәһенең Магнитогорск ҡалаһында "Медсанчасть" ойошмаһында эшләй. Яҡташыбыҙҙы оло еңеүе менән ҡотлайбыҙ, ныҡлы һаулыҡ, ғаилә именлеге теләйбеҙ.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Егерме етенсе хат "Сәйәхәт итегеҙ!"

Йәшәүҙең иң оло ҡиммәттәренең береһе - үҙ илең һәм сит илдәр буйлап йөрөү. Шул уҡ ваҡытта сәфәрҙәрҙе ҡыҙыҡлы һәм ҡыҙыҡһыҙға, ә барып күргән урындарҙы әһәмиәтле һәм әһәмиәтһеҙгә бүлеп ҡарауҙан һаҡ булығыҙ. Хатта барған ерҙәрҙең әһәмиәте йәһәтенән урынын билдәләргә лә тырышмағыҙ. Сәфәрҙәрҙе үҙегеҙ ныҡлы әҙерләнеп барған, әҙерләнмәй йәки насар әҙерлекле барғандарға булегеҙ. Һеҙ әҙерлекһеҙ барған теләгә ниндәй ҡала, ил, урын - ҡыҙыҡ түгел һәм күңелһеҙ. Һәм, киреһенсә, әгәр барған ерҙең тарихын белһәгеҙ, ул күпкә ҡыҙыҡлыраҡ тойоласаҡ.

Таныш булмаған ҡалаға - һеҙ әле берҙә лә барып күрмәгән урынға сәфәргә сығырға әҙерләнеү нимәне аңлата? Был - уның тарихын өйрәнеүҙе, туристик схемалар буйынса ғына булһа ла уның төҙөлөшөн белеүҙе, ваҡытты бушҡа үткәрмәҫ өсөн барып күрергә кәрәк урындарҙы алдан картала билдәләп ҡуйыуҙы аңлата.

Тәү ҡарамаҡҡа ҡыҙыҡһыҙ булып тойолған урындың да бер ҡыҙығын табыу мөмкинлеген ысҡындырмағыҙ. Ерҙә ҡыҙыҡ булмаған урындар юҡ: ни бары ҡыҙыҡһынмаған, ҡыҙыҡ таба белмәгән, булмыштары күңелһеҙ кешеләр генә бар.

Мин таныш булмаған урынға барғанда эс бошорғос ҡиәфәт менән юлдаштарына: "Ә бына мин Парижда булдым... вот унда..." - тиеп һөйләнгән кешеләрҙе һәр ваҡыт өнәп етмәйем. Яҙмыш илтеп ташлаған урындың мөхитенә сума, бар ерҙә үҙеңдекен, үҙеңә хас нәмәне таба белергә кәрәк. Был, әлбиттә, теләктән генә тормай, ә белемгә лә бәйле. Һәм бигерәк тә ошо сәфәргә сыҡҡанға тиклем алған белем мөһим.

Һәр ваҡыт рәссамдарҙың тәьҫораттары ҡыҙыҡлы була. Рәссамдарҙың сәфәрҙәре тураһындағы яҙмаларын һәм хәтирәләрен уҡығыҙ. Нисек шулайҙыр, белмәйем, әммә бөтә рәссамдар ҙа шул тиклем матур яҙа. Ғәжәйеп яҙыусылар - Коровин, Бенуа, Добужинский, Грабарь...

Улар нисек ҡарай һәм күрә, аҙағынан күргәндәрен живописта ғына түгел, үҙҙәренең яҙмаларында ла ниндәй итеп кәүҙәләндерә белгән!

М.В. Добужинский йәш сағында тәүге тапҡыр барып күргәнендә Мюнхен, Венеция һәм Париж нисек тәьҫирләндереүе тураһында үҙенең хәтирәләрендә яҙа. Уға Рәсәйгә ҡапыл кире ҡайтырға тура килә (сит илдә булғанда Добужинскийҙарҙың бәләкәй улы ҡапыл вафат була һәм уны тыуған Вильнюсҡа алып ҡайтып ҡуйырға ҡарар итәләр). Һәм бына Мюнхен, Париж һәм Венециянан һуң ул бәләкәй генә Литва ҡәберлектәре араһына барып эләгә. Һәм бына нимәләр яҙа ул:

"Ҡатыным менән йыш ҡына коляскала шоссе буйлап йәки урман аша Неман яғына ҡарай, йә баҫыуҙар буйлап йөрөй инек һәм мин тағы ла һағышлы һәм һөйкөмлө Литва пейзажын күрә инем: көмлө баҫыуҙар, һәм йәшел оазистарға оҡшап, улар араһында юғары тәреләр һәм ҡарағай шырттары менән романтик ҡәберлектәр урынлашҡан, һәм яй ғына осоп барған ҡарға ҡарғалы һоро күк.

Был зыяраттар, һырлы Литва тәреләре, офоҡта урмандар һәм ҡыҙыл ағас костел торған ярлы ғына урын Олитаны мин Мюнхенға тиклем үк белә һәм ярата инем, әммә хәҙер, сит илдә күргәндәремдән һуң, был тәбәк миңә бигерәк үҙенсәлекле булып тойолдо.

Беҙ Вильнола булдыҡ - һәм яраткан ҡалам тағы ла минә әсир итте. Һәм һуңынан да, һоҡланғыс, нәфис бароккоһы менән Вильно минең сит илгә һәр сәйәхәтемдән һуң, Петербургҡа барышлай тейеп сыҡҡанымда, сағыштырыу һынауын гел үтә алды".

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# НАМАҘ ҠЫЛЫУСЫНЫҢ...

## алдынан үтмә

**Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән: "Намаҙ уҡып ултырыусы алдынан үтеп киткән кеше үҙенең ниндәй ҙур гонаһ ҡылғанын белһә, доға уҡыуҙың тамамланыуын 40 көн көтөргә лә әҙер булыр ине".**

Был гонаһ тураһында бөтә хәҙистәрҙә лә әйтелә. Башҡалар был хатаны ҡылмаһын өсөн иманлы кеше үҙе лә хәстәрлек күрергә бурыслы. Намаҙ уҡырға ниәйләнгәндә, ул ултырған урынды ситләп үтһендәр өсөн, алдына берәй әйбер һалып ҡуйырға мөмкин. Кеше намаҙ ҡылыусы алдынан үткәнен һиҙмәй йә был ҡылыҡтың гонаһ икәнен белмәй икән, эргәһендә булған мосолмандар уны иҫкәртергә тейеш. Уның юлын ҡыйып, "Собханаллаһ" тип әйтергә кәрәк. Был талап намаҙ ҡайҙа уҡылыуға ҡарамаҫтан - асыҡ һауаламы, мәсеттә, башҡа урындамы - үтәлергә тейеш. Намаҙ ҡылыусы ҡарашын сәждә урынына төбәргә һәм ян-яҡҡа ҡарамаҫҡа тейеш. Сит тауыштар иһә иманлының тыныслығын боҙа һәм Аллаһ менән аралашырға ҡамасаулай. Шуға гонаһ намаҙ ҡылыусыны борсоған кешегә яҙыла.

# ТӘҺӘРӘТ НУРЫ...

## йөҙҙө яҡтыртыр

**Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) артынан барыусылар дини йолаларҙы үтәүҙе Аллаһы Тәғәлә менән яҡынайыу һәм уның менән аралашыу мөмкинлеге тип ҡараған. Йолаларҙы үтәү минуттары улар өсөн иң ҡәҙерлеһе булған, был ғәмәлдәренән күңелдәрен бер тулҡынға көйләп, тыныслыҡ, бәхет кисергәндәр. Хоҙайға табыныуҙы ҡабатланмаҫ шатлыҡ тип ҡабул иткәндәр һәм быны өсөн Аллаһҡа рәхмәт уҡығандар. Улар һәр ваҡыт тәһәрәттә - ритуаль таҙалыҡта булырға тырышҡан.**

Бер ваҡыт иртәнге сәғәттә Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙ янына Билалды (радиаллаху анху) саҡырып: "Ниндәй ғәмәлең өсөн һин ожмахҡа минән иртәрәк индең? Төшөмдә йәннәткә китһәм, һинең аяҡтарыңдың тауышы ишетелә. Үткән төндә мин йәнә ожмахҡа ингәйнем, һәм ҡабат һинең аҙымыңды ишеттем", - тигән. Билал (радиаллаху анху) әйткән: "О, Аллаһ илсеһе! Аҙан ҡысҡырғандан һуң мин һәр ваҡыт ике рәкәғәт намаҙ уҡыйым. Тәһәрәтем бөтһә, намаҙ ваҡытын көтмәйенсә, йәнә йыуынам. Тәһәрәт булғас, миңә тағы ике рәкәғәт намаҙ уҡымаҫҡа, тип уйлайым һәм йәнә намаҙ ҡылам".

Сәхәбәләрҙең береһе Әбү Хөрәйра (радиаллаху анху) тәһәрәт алғанда ҡулдарын яурынына тиклем йыуа торған булған. "Был ниндәй тәһәрәт?" тип һорағандарға ул шулай яуап ҡайтарған: "Рәсүллуллаһ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән һүҙҙәрҙе ишеттем. Ул былай тигәйне: "Ҡиәмәт көнөндә мөьминдең нуры, йәғни мөьмин тәнендәге нур, тәһәрәт алғанда һыу ҡайҙа тиклем барып еткән, шул урынғаса етеп яҡтыrасаҡ".

Сәхәбәләр Бәйғәмбәрҙән (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм), өммәтендә булыусыларҙы нисек таныясаҡһың, тип һораған. "Күҙ алдына килтерегеҙ, берәүҙең маңлайы һәм аяҡтары аҡ төҫтә булған аты бар, ти. Үҙ атын хужаһы ҡара йылҡылар араһында танымаясаҡмы ни? Тимәк, имандаштарыбыҙҙың йөҙҙәре, тәһәрәт алғанға күрә, нур менән яҡтырып торасаҡ. Аяҡ-ҡулдарында ла нур буласаҡ. Үҙ йылғама иртәрәк килеп, буләктәр таратыр өсөн уларҙы көтөп торасаҡмын. Иғтибарлы булығыҙ. Ҡайһы бер кешеләрҙе фәрештәләр йылғамдан ҡыуып торасаҡ. Дөйә көтөүенән сит дөйәне ҡыуған кеүек. Сөнки улар Аллаһ күрһәткән юлдан ситләшкән буласаҡ", - тип яуаплай Бәйғәмбәр (саллалаһу ғәләйһи үә сәлләм).

**Әхмәт ТАҺИР.**



**20 ЯНВАРЯ**
**ПОНЕДЕЛЬНИК**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20 "Горячий лед". Фигурное катание. Чемпионат России по прыжкам 2025. Трансляция из Санкт-Петербурга. [0+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.00, 14.15, 16.00, 19.00, 23.40 Информационный канал. [16+]
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Минута тишины". [16+]
0.50, 1.35, 2.25, 3.05, 3.15, 4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00 Профилактика на канале до 12.00.
12.00, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 15.55 Т/с "Кулагины". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.10, 3.30 Т/с "Доктор Рихтер. Продолжение". [16+]
4.31 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 Профилактика.**
**14.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башкорттар. [6+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**16.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Үткән гүмер. [12+]**
**18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Авангард" (Омск). КХЛ.**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Гилмияза". [12+]**
**4.30 Телецентр. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

**21 ЯНВАРЯ**
**ВТОРНИК**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Минута тишины". [16+]
0.00, 0.50, 1.35, 2.20, 3.05, 3.15, 4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 15.55 Т/с "Кулагины". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.10, 3.30 Т/с "Доктор Рихтер. Продолжение". [16+]
4.31 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Городок АЮЯ. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Я вернусь... [12+]**
**23.00 Бишбармак. [12+]**
**2.15 Спектакль "Счастье с неба". [12+]**

**22 ЯНВАРЯ**
**СРЕДА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Минута тишины". [16+]
0.10 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.10, 2.00, 2.45, 3.05, 3.25, 4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 15.55 Т/с "Кулагины". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.10, 3.30 Т/с "Доктор Рихтер. Продолжение". [16+]
4.31 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15, 13.45, 16.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Физ-ра. [6+]**
**15.30 Зерно. [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 "100 имён Башкортостана". [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Спроси у Дубовского.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Байык представляет... [12+]**
**2.30 Спектакль "Бесприданница". [12+]**
**5.00 Тайм-аут. [12+]**

**23 ЯНВАРЯ**
**ЧЕТВЕРГ**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Минута тишины". [16+]
0.00, 0.50, 1.35, 2.20, 3.05, 3.10, 3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 15.55 Т/с "Кулагины". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.10, 3.30 Т/с "Доктор Рихтер. Продолжение". [16+]
4.31 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.30 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 20.45, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 12.15, 13.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 0.00, 2.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**16.45 Мегасело. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Йома. [6+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.20 Хоккей. ХК "Сочи" - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**3.00 Спектакль "Вишнёвая гора". [12+]**

**24 ЯНВАРЯ**
**ПЯТНИЦА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
14.40 "АнтиФейк". [16+]
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Фантастика". Следующий уровень. Финал. [12+]
23.40 Спецпроект. "30 лет вместе". [12+]
1.30, 2.15, 3.00, 3.45, 4.30, 5.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 15.55 Т/с "Кулагины". [16+]
17.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Один в один. [12+]
0.30 Истории Большой Страны. [12+]
1.30 Х/ф "Укради меня". [12+]
4.56 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.30 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00, 4.30 Йома. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00, 13.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.15 Ҡурай даны. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Хазина. [6+]**
**16.45 Ради добра. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Башкорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Мегасело. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Ете егет. [12+]**
**0.00 Ҡурай-шоу. [12+]**
**2.45 Спектакль "Наследство". [12+]**
**5.00 Хазина. [12+]**

**25 ЯНВАРЯ**
**СУББОТА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Моей душе покоя нет...". К 90-летию Валентины Талызиной". [12+]
11.05 Поехали! [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф Премьера. "Это я не вернулся из боя". Ко дню рождения Владимира Высоцкого". [12+]
12.45 "Наше всё". [12+]
13.35 "ПроУют". [0+]
14.25 Х/ф "Розыгрыш". К 65-летию Дмитрия Харатьяна". [12+]
16.15 Д/ф "Дмитрий Харатьян. "Я ни в чем не знаю меры". [12+]
17.05 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Народный ледниковый". [0+]
21.00 "Время".
21.35 Премьера. "Своя колея". [16+]
23.10 Х/ф "Черный ящик". [16+]
1.35, 2.20, 3.10, 3.55, 4.40, 5.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 Доктор Мясников. [12+]
12.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 Парад юмора. [16+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Муж моей мечты". [16+]
0.40 Х/ф "Маруся". [12+]
4.19 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Мегасело. [12+]**
**8.30 Хазина. [6+]**
**9.00 Ҡурай даны. [12+]**
**9.15 Квадратные метры. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Әкиәтсе. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Прегрaд. Net. [6+]**
**11.30 Ат уйнатып. Битва командиров. [12+]**
**12.00 Елкән. [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Профессия - режиссёр. [12+]**
**18.50 Хоккей. СКА (Санкт-Петербург) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 1.45 Новости недели (на баш. яз.). [12+]**
**23.15 "Юлдаш plus". Национальный молодежный фестиваль. [12+]**
**2.30 Спектакль "Белый пароход". [12+]**
**4.30 Защитники Отечества. [12+]**
**5.00 Башкорттар. [6+]**
**5.30 "100 имён Башкортостана". [12+]**

**26 ЯНВАРЯ**
**ВОСКРЕСЕНЬЕ**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.00 Т/с "Ладога". Ко Дню полного освобождения Ленинграда от фашистской блокады". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 "Время".
23.00 Х/ф Премьера. "Кентавр". [18+]
0.50, 1.35, 2.20, 3.05, 3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

**РОССИЯ 1**

5.10, 1.30 Х/ф "Пряники из картошки". [16+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.45 Д/ф "Донбасс. Зеркало для героев". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
17.50 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.31 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Тормош. [12+]**
**8.15 Ради добра. [12+]**
**8.30 Күстәнәс. [12+]**
**9.00 Ҡурай даны. [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Зерно. [6+]**
**12.00 Сулпылар. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз.). [12+]**
**13.15, 4.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [6+]**
**15.30 Честно говоря. [12+]**
**16.15 Спектакль "Что там, за холмом?" [12+]**
**18.30 Мегаселo. [12+]**
**19.15 Аксаковская елка. [6+]**
**20.00 Патриот РФ. [12+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45, 3.45 Концерт ГАСО РБ. [12+]**
**0.00 Спектакль "Мона". [12+]**
**2.45 Колесо времени. [12+]**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Ғинуар (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 20 (20) дүшәмбе | 7:42 | 9:25 | 13:30 | 15:40 | 17:31 | 19:13 |
| 21 (21) шишәмбе | 7:41 | 9:23 | 13:30 | 15:41 | 17:33 | 19:15 |
| 22 (22) шаршамбы | 7:40 | 9:22 | 13:30 | 15:43 | 17:34 | 19:17 |
| 23 (23) кесе йома | 7:38 | 9:21 | 13:30 | 15:45 | 17:36 | 19:18 |
| 24 (24) йома | 7:37 | 9:19 | 13:30 | 15:47 | 17:38 | 19:20 |
| 25 (25) шәмбе | 7:36 | 9:18 | 13:30 | 15:49 | 17:40 | 19:22 |
| 26 (26) йәкшәмбе | 7:34 | 9:16 | 13:30 | 15:51 | 17:42 | 19:24 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 13 ҒИНУАР - РӘСӘЙ МАТБУҒАТЫ КӨНӨ

**Рәсәй матбуғаты көнөн билдәү 1703 йылдың 13 ғинуарында Петр I батша әмере буйынса рус телендә тәүге гәзит - "Ведомости"ҙың 1-се һаны донъя күреүгә бәйле.**



Был гәзиттә батша ғали йәнәптәре үҙе әҙерләшкән: мәҡәләләрҙе һайлаған, тәржемәләрҙең сифатын һәм хаталарҙы тикшергән. 1-се һанда хәрби темаға материалдар бер колонка итеп баҫылған, башта гәзиттең рубрикалары булмаған, 4 мең тирәһе дана итеп сығарылған.

Ошо мәлдән илдә рус телендәге матбуғат үҫеш алған. Ә бына Рәсәйҙең башҡа халыҡтары телдәрендә нәшер ителгән баҫмалар бик күп булмаған, шулай ҙа төрки халыҡтар өсөн гәзит-журналдар дөйөм яҙма телдә сығарылған.

Революциянан һуң башҡорт телендә тәүге гәзит донъя күрә - "Башҡорт иттифаҡи бюроһының мөхбире" тип атала ул, 1917 йылдың 14 июнендә баҫыла. Бөгөн республикабыҙҙа төрлө быуын кешеләренә тәғәйенләнгән башҡорт, урыҫ, татар, сыуаш, мари, удмурт һәм күп телдә гәзит-журналдар нәшер ителә.




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**1-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Минут. Бәхетем. Табын. Ҡаҙаҡ. Ҡитға. Уралтау. Ҡоралай. Йәдит. Ылаусы. Таҡта. Беҙ. Әрмәк. Фил. Утар. Халат. Айғыр. Тәкә. Атайсал. Манап. Риүәйәт. Ҡот. Хаҡ.

**Вертикаль буйынса:** Ҡалтағай. Ҡурайҡайға. Лигатура. Баҡа. Тупраҡ. Ҡуйын. Мөхит. Борай. Сәсәк. Балауыҙ. Ата. Әлфиә. Томан. Тоҡ. Ҡуй. Әлхәм. Әмер. Иртә. Аят. Китап.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**21 ғинуар "Әҙләнем, бәгрем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 12+

**24 ғинуар "Заятүләк менән Һыуһылыу"** (М. Ғафури, М. Малухина), әкиәт. 6+

**25 ғинуар Премьера! "Йырланмаған йырым һин..."** (В. Исхаҡов), музыкаль мелодрама. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**22 ғинуар "Аҡһаҡ"** (М. Ғиләжев), драма. 12+

**24 ғинуар "Хужа Насретдин мажаралары"** (Л. Савельев, В. Виткович), трагикомедия. 12+

**25 ғинуар "Сказание о семи батырах"** (Д. Йосопов), фэнтези. 12.00 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**24 ғинуар "Премьера! "Снеговик и солнышко"** (А. Малахов). 18.00 0+

**25-26 ғинуар "Морозко"** (М. Шуринова). 12.00, 15.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**25 ғинуар "Музыку слушаем вместе"**, орган залы әкиәттәре. 11.00, 12.00 0+

**26 ғинуар "Бөтә ғаилә өсөн йәкшәмбе концерты"**. 15.00 12+

**"Сказки Средиземья"**, квест-концерт. 18.00 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**21 ғинуар Премьера! "Һөйөү көсө"** (Т. Дәүләтбирҙина), мелодрама. 12+

**23 ғинуар "Ҡыҙын алдым ҡосаҡҡа"** (Б. Алпаев), комедия. 12+

**25 ғинуар "Сказка о рыбаке и рыбке"** (С. Пушкин, Л. Ниғмәтуллина инсц.), әкиәт. 13.00 0+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**25 ғинуар Премьера! "Не хочу быть собакой!"** (С. Белов, С. Кувалев), әкиәт-комедия. 12.00 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**23 ғинуар "Ир ҡанаты - ат була", "Ашҡаҙар"** эстрада-фольклор төркөмө концерты. 6+

**25 ғинуар Премьера! "#КираПростиАртема"** (Н. Блок), интернетта булған хәл. 18.00 12+

**26 ғинуар "Золотой осел Насретдина"** (Ш. Казиев), әкиәт. 12.00 0+

**"Аҡ ҡалфаҡ"** (М. Фәйзи), драма. 18.00 12+

## БР Милли музейы

**24 ғинуар "Хәтер дәресе"**, Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығына арналған сара. 12.00 12+

**25 ғинуар "Йәш археолог курсы. Яңы миҙгел"**, сара. 15.00 6+

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ошо көндәрҙә Бөрйән районы Брәтәк ауылында йәшәүсе беҙҙең иң ҡәҙерле кешеләребеҙ -

**Ғәшүрә Һаҙый ҡыҙы һәм Ғәзиз Ғәли улы Юлдашевтарҙың**

65 йәшлек матур юбилейҙары.

Ғүмер байрамы менән ҡотлап, ҡәҙерлеләребеҙгә ғүмерҙең иң оҙонон, бәхеттең иң ҙурын, шатлыҡ-ҡыуаныстар, ныҡлы сәләмәтлек, рух ныҡлығы һәм яҡшы кәйеф теләйбеҙ. Күҙ ҡараһындай ҡәҙерләп үҫтергән балаларығыҙҙың хөрмәтендә, ейән-ейәнсәрҙәрегеҙҙең шатлыҡтарын уртаҡлашып, ҡыуаныслы ғүмер кисерергә яҙһын һеҙгә! Йән тыныслығы, тән сәләмәтлеге ташламаһын!

**Иң изге теләктәр менән балаларығыҙ, ейән-ейәнсәрҙәрегеҙ.**

✓ *Халҡыбыҙҙың кәсеп-һөнәрҙәрен балҡытыусы, башҡорт донъяһын ҡотайтҡан ағинәйҙәребеҙҙең аманат тапшырыу йолаһы ихласлыҡ, изгелек, ғаилә уңайлылығы, мәҙәниәттәр һәм быуындарҙың күсәгилешлеге символына әүерелде.*

*АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ*

# РУХ ҠОШО ЯРҘАМЫ МЕНӘН...

**Ата-бабаларыбыҙ фекеренсә, Аллаһ Ер йөҙөндәге һәр бер халыҡҡа үҙ Рух ҡошон бирә. Рух ҡошо нурҙан ғына тора һәм күҙгә күренмәй. Уны бары тик күңел менән генә тойоп була. Ҡош халыҡтың күңел йылылығынан көс ала. Халыҡтың үҙ булмышына, моңона, теленә һөйөүе, бер-береһен яратыуы һәм тартыуы, киләсәге өсөн яуаплылығы күңел йылылығы булып туплана. Ошонан көс алған Рух ҡошо халыҡҡа юғары хыялдар, оло маҡсат, саялыҡ, ғорурлыҡ, ихтыяр көсө - йәшәүгә ынтылыш бирә!**



Эйе, халҡыбыҙҙың Рух ҡошо ярҙамы менән бөгөн республиканың һәр районында һәм ауылында бер ойошма булып тупланған, Ағинәй тигән оло вазифа йөкмәгән ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ бер ҡорҙа аралаша, онотолоп бөтөп барған йолаларыбыҙҙы, мондо, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, традицияларҙы яңынан тергеҙә, Рәми әйтмешләй, туған телебеҙҙең йәнле ынйыларынан кәрәҙ ҡоя, йөрәктәрендә бер-береһе менән нур бәйләнеше булдыра. Ошо бәйләнештән көс алып, берҙәм, бәхетле, маҡсатлы, эшлекле һәм булдыҡлы, илһамлы һәм дарманлы булып йәшәй беҙҙең ағинәйҙәребеҙ.

Ошо хәҡиҡәтте раҫлау булды Рәсимә Мөхәмәтйәрова етәкләгән Архангел ауылы ағинәйҙәре ойошторған "Табындарҙа аманат тапшырыу" сараһы. Һәр халыҡ үҙенең ижад емештәрен, изгелек һәм аҡыл хазинаһын үҙе булдыра һәм уны киләһе быуындарға тапшыра. Архангел ауылы ағинәйҙәре әлеге сарала ғаиләләрҙә бер ҡомартҡы итеп һаҡланған әйберҙәрҙе - алмас ҡылыс, уҡ-йәйә, көмөш йүгән, аҡыҡ ҡашлы эйәр, ҡоршаулы һандыҡтар, күҙ яуын алырҙай аҫалы балаҫтар, кейеҙҙәр, бәйләгән йә һуғылған дебет шәлдәр, шау тәңкәле муйынса-һаҡалдар, ҡашмау-еләндәрҙе йәш быуынға аманат итеп еткереү йолаһын сәхнәләштерҙе. Халҡыбыҙҙың кәсеп-һөнәрҙәрен балҡытыусы, ижад итеүсе, башҡорт һөнәрмәнлеген данлаған, башҡорт донъяһын ҡотайтҡан ағинәйҙәребеҙҙең аманат тапшырыу йолаһы ихласлыҡ, изгелек, ғаилә уңайлылығы, мәҙәниәттәр һәм быуындарҙың күсәгилешлеге символына әүерелде. Йырҙа йырланғанса, "Йәшәү бәхете - күңел сафлыҡта, йәшәү бәхете - дуҫлыҡ, хаҡлыҡта, йәшәү бәхете - илең, халҡың өсөн хеҙмәт аша тыуған шатлыҡта" икәнен тағы бер тапҡыр раҫланы алтын ҡуллы ағинәйҙәребеҙ!

Район хакимиәте башлығы урынбаҫары Динара Хисамова "Хазина" һәм "Ихлас" төркөмдәре ағинәйҙәренә Маҡтау ҡағыҙҙары тапшырып ҡыуандырҙы. Район мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Салауат Әбделмәнов, мәҙәниәт һарайы директоры Марат Рәхмәтуллин, оҫта ҡурайсы Урал Хызыров, баянсы Зәкир Өмөтбаев , "Ихлас" төркөмөнөң берҙән-бер батыр егете Риф Ғафаровтарҙың әүҙем ҡатнашыуы сараның мәртәбәһен арттырҙы. Рәхмәтле булды уларға һәм районның төрлө ауылдарынан йыйылған ағинәйҙәргә сараны ойоштороусылар.

Әйткәндәй, Рәсимә Мөхәмәтйәрова етәкләгән "Хазина" һәм "Ихлас" төркөмдәре ағинәйҙәре Яңы йыл алдынан ғына республика "Байыҡ" бәйгеһендә Гран-при яулап, районыбыҙҙы данланы. Ҡотло булһын уларҙың еңеүе!

**Зилә ФӘЙЗУЛЛИНА,**
**Архангел районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИКЕ ШОҢҠАР ТАЛАШҺА...

## бер ҡарғаға ем булыр

Атың барҙа елеп ҡал, елә алмай торған көн дә килер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Цзен Цзы тигән берәү Конфуцийҙың уҡыусылары менән осрашып, улар менән изгелек, йән камиллығы, эскерһеҙлек һәм ҡомһоҙлоҡ тураһында фекер ҡора һәм шулай ти:**

**- Мин ике хужаға хеҙмәт иттем. Тәүге хужамда мин хеҙмәтем өсөн бик аҙ ғына эш хаҡы алдым. Эш хаҡымдың өстән ике өлөшөн ата-әсәйемә ебәрҙем, бер өлөшөн генә үҙемдә ҡалдырҙым һәм ошо ғәмәлемдән һуң мин бөтөн донъя байлығына эйә кешеләй шатландым... Икенсе хужама хеҙмәт иткәндә ул миңә бик күп аҡса бирҙе, әммә мин ул аҡсанан ата-әсәйемә өлөш сығарманым һәм был минең йөрәкте шул тиклем әрнетте...**

**Уҡыусылары был һөйләшеү тураһында Конфуцийға һөйләп бирә һәм: "Уҡытыусыбыҙ, әйтегеҙ әле, Цзен Цзыны ҡомһоҙлоҡта ғәйепләп буламы?" - тип һорай. "Була, - ти Конфуций. - Бында ҡомһоҙлоҡҡа урын бар. Телмәрендә мәкер ҙә бар. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: Цзен Цзы ике хужала хеҙмәт иткән, уның тойғолары ике тапҡыр үҙгәреш кисергән. Ҡомһоҙлоҡтан арынған кеше булһа, ул аҡса мәсьәләһендә шатлыҡ йә ҡайғы кисерер инеме ни? Аҙ аҡса менән күп аҡсаны сағыштырыр инеме?.." "Тимәк, Цзен Цзы ҡомһоҙ булып сығамы?"- тип һорай тағы уҡыусылары. "Тегеләй ҙә, былай ҙа түгел, - ти Конфуций. - Цзен Цзы бары тик бик күптәр кеүек уҡ камил булмаған кеше. Үҙенең тәжрибәһенә генә таянһа, ул һеҙҙе бер нәмәгә лә өйрәтә алмаясаҡ. Ысын ихласлыҡта кешелеклелек аҙ". "Улай булғас, нимә һуң ихласлыҡ?"- тип төпсөнә һаман уҡыусылары. "Камил булмаған кеше - ул үҙ теләктәре ауында буталған себен кеүек. Ундай кеше кемгәлер ниҙер бирә һәм рәхмәт һүҙе көтә. Рәхмәт һүҙен ишетмәһә лә, ул барыбер үҙе эшләгән изгелекте күңелендә, хәтерендә тота, үҙ-үҙенән ҡәнәғәт ҡалып, әҫәрләнә. Бындай әҫәрләнеү - ғорурлыҡ инде ул, ә камил кешелә ғорурлыҡ булмай. Ҡарағыҙ, ямғыр үҙенең һыуын кемгә һибергә тип һайлаймы? Ул үҙенең дымын сарсағанға ла, һыуланмаҫ өсөн ышыҡҡа йәшенгәнгә лә һайламай бирә. Ҡояшҡа ҡарағыҙ - ул кемде йылытырға икән, тип һайланамы ни? Изгелекте һәм игелекһеҙлекте һайлап алып буламы? Камил кеше тәбиғәттең үҙе һымаҡ, тик уның йөрәге бар. Ғәмәлдең файҙалы икәнен күрһә - иң тәүге сиратҡа ғәҙеллекте ҡуя, кемгәлер янаған хәүефте тойһа - үҙенең ғүмерен фиҙа итә. Ундайҙар биргән вәғәҙәләрен дә гел иҫтә тота, ә башҡалар биргән вәғәҙәне онота. Камил кеше изгелек һәм ихласлыҡ тураһында һөйләгәндә, Цзен Цзы кеүек, үҙен миҫал итеп килтермәйәсәк бер ваҡытта ла..."**

*БАЛАҢА УҠЫ!*

# ФИЛ НИМӘГӘ ОҠШАШ?

Индустар ҡараңғы бинаға бер филде индергәндәр һәм уны халыҡҡа күрһәтергә уйлағандар. Филде күрергә теләгән бер нисә кеше шулай уҡ был бинаға ингән. Унда дөм-ҡараңғы булған, урамдан саҡ ҡына ла яҡтылыҡ төшмәгән. Инеүселәр филде ҡулдары менән ҡапшай башлаған.

Берәүһе филдең томшоғон ҡапшап, былай тигән:

- Фил йыланға оҡшаған икән...

Ә икенсеһе филдең ҡолағын тотоп:

- Юҡ, фил ҙур елпеүескә оҡшаған...

Ә өсөнсөһө уның аяғын ҡосаҡлап, шулай тигән:

- Фил бағанаға оҡшаған...

Ә дүртенсеһе филде арҡаһынан һыйпап хәл иткән:

- Фил тәхеткә оҡшаған.

Ҡараңғы биналағы һәр кеше филдең бер ағзаһын ҡулдары менән ҡапшап өйрәнеп, уның ни рәүешле икәнен аңлатырға маташҡан. Һәм береһенең фекере икенсеһенекенән ныҡ ҡына айырылған. Берәү филде йылан кеүек, икенсеһе елпеүес кеүек тип иҫбат иткән...

Эш ҡараңғылыҡта ғына түгел. Был кешеләр ҡулдарына май шәм тотоп, филде яҡтыртып ҡараһалар ҙа, барыбер уларҙың баһаһы төрлөсә булыр ине. Донъяла нисә кеше - шул тиклем фекер. Йәшәйеш шуныһы менән ҡыҙыҡ та, мәғәнәле лә. Башҡалар аҡылы, башҡалар фекере менән йәшәмә, һәр нәмәгә үҙ фекерең булһын, тигәнгә ишара был.

**Мөршиҙә УЙСАЛ.**
**"Хаҡ динемдә беренсе аҙымдарым" китабынан.**

*ТЕЛҺӨЙӘР*

# ЭРБЕЛСӘКТӘН - ҺЫҘҒЫРТМАҠ

**Баҡсала эрбет тә, энәлек тә бар. Энәлек емешенең ҡан баҫымын дауалауы билдәле. Ә эрбет тәмле һәм файҙалы сәтләүеге менән дан тота.**

**Энәлек. 1.** "Энәлек" тип ҡыҙыл йәки һары емешле, эре энәле ағас, ҡыуаҡты һәм уның емешен атайҙар. Ҡайһы бер ерҙә энәлекте "дунала", "йәмшегән" тиҙәр. *Энәлектең емеше өлгөргән. Ҡоштар энәлекте бигерәк ярата.*

**2.** Түшкә ҡаҙай торған биҙәүес, брошканы ла "энәлек" тип йөрөтәләр. *Гәрәбәле энәлек. Ҡыҙ ынйылы энәлек таҡҡан.*

**Энәсә.** Ул - бауырһаҡ өсөн таҫма-таҫма итеп теленгән йәки нәҙек итеп йомарланған ҡамыр. *Энәсә тигеҙ теленгән. Энәсә ҡатмаһын өсөн тиҙерәк киҫеп, бауырһағын бешерер кәрәк.*

**Энер йондоҙ.** Энер йондоҙ тигәндә, Сулпан йондоҙҙо күҙ алдына баҫтырайыҡ. *Күктә энер йондоҙо ҡалҡты. Энер йондоҙона ҡарап теләк әйтәләр.*

**Эрбелсәк.** Ҡайын туҙының өҫкө йоҡа ҡатламы була эрбелсәк. *Эрбелсәк һыҙырыу. Малайҙар эрбелсәктән һыҙғыртмаҡ яһай.*

**Эрбет.** Ул - тубырсығында ашарға яраҡлы сәтләүеге булған ылыҫлы ағас; кедр. *Эрбеттең бер нисә төрө бар. Башҡортостанда ла эрбет үҫтерелә.*

**Шулай итеп, ошо һүҙҙәрҙән дә энер йондоҙҙай матур энәлек яһап, тел хәтерендә беркетәйек.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт: Сәриә ҒАРИПОВА, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 16 ғинуар 17 сәғәт 00 мин. Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2857
Заказ - 96

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.